✓ "Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, бөтөн донъя башҡорттары!"- тип сәләмләйбеҙ 10-11 июндә баш ҡалабыҙға оло ҡорға йыйыласаҡ милләттәштәребеҙҙе. Кәңәштәрегеҙ берекһен, фекерҙәр уртаҡ булһын, илһөйәрлек, телһөйәрлек нығынһын, рух оҫҡоно, сәм ҡунһын йөрәктәргә, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр аҡылы өҫкә сыҡһын, тип теләйбеҙ. Хәйерле сәғәттә!

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№23 (389)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Милләттең һанын арттырыу...

бер ни тормай!



4

### Мәңгелек хәҡиҡәт,

йәки Яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы ынйы бөртөгөләй йыйыу фарыз



5-7

### Халҡыбыҙ ҡояш кеүек,

беҙ унан йылынабыҙ, нур һәм көс алабыҙ...



8-11

### Килер быуындарға Торатауҙы

мираҫ, тиеп, васыят итәйек...



15


## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



# БЕР УЙ МЕНӘН ЯНАЙЫҠ, ЙӘНГӘ УСАҠ ЯҒАЙЫҠ!

### I

Баш ҡалала бөгөн байрам -
Күккә ашҡан балҡыштары.
Баш ҡорона йыйылалар
Бөтөн донъя башҡорттары.

Ете диңгеҙ, уттар кисеп,
Үтеп Йыһан баҫҡыстары.
Атайсалға ағылалар
Бөтөн донъя башҡорттары.

Күҙҙәрендә уйсанлыҡ та,
Балҡып тора шатлыҡтары.
Уралтауға ҡайта бөгөн
Бөтөн донъя башҡорттары.

Иләүенә тупланғандай
Әйтерһең дә, бал ҡорттары.
Килмәй улар, ҡайта бөгөн
Бөтөн донъя башҡорттары.

Әйтерһең дә, умарталар
Өфөләрҙең таш йорттары,
Кәрәҙенә бал килтерә
Бөтөн донъя башҡорттары.

Төрлө илдән, төрлө телдә
Булһалар ҙа паспорттары,
Бер маҡсатта - Арғымаҡта
Бөтөн донъя башҡорттары.

Йөҙҙәрендә иман нуры,
Бөркөп тора сафлыҡтары;
Асылына - илгә ҡайта
Бөтөн донъя башҡорттары.

Тыңлағыҙ һеҙ, Баш йортоғоҙ
Һеҙҙе нисек алҡышлауын:
Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ,
Бөтөн донъя башҡорттары.

### II

Өймәкләшеп иләүгә,
Төйнәкләшеп биләүгә;
Ил барлығын онотмай,
Тел тамырын ҡоротмай, -
Йыйҙыҡ бөгөн ҡоролтай,
Ҡорҙоҡ бөгөн ҡоролтай.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Халҡым рухы ҡоростай,
Ҡурай мәңге сыңлаған,
Уралтауы тыңлаған,
Халҡым рухы һынмаған.

Мең йыллыҡтар үтһә лә,
Һыу-боҙлоҡтар өтһә лә,
Империя сүкһә лә;
Йәшәй ерҙә башҡорттар
Урал тигән таш йортта,
Күп ырыуға баш ҡорттар.

Башҡорт тигән саф иләү,
Ҡырҙым тигән Тәфтиләү, -
Бөгөнгөһө - Мөфтиләү...
Хәҙер быуат башында,
Мең йыллыҡтар ҡашында
Ҡурай уйнай аҫылдар.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Уҫҡа йыйған йоҙроҡтай,
Тереһыулы турһыҡтай,
Йомарланған ҡороттай,
Ергә һалған орлоҡтай.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Геүләп торған солоҡтай,
Киләсәккә юллыҡта
Уйнап йөрөй ҡолон, тай.

### III

Бер уй менән янайыҡ,
Бер уй менән ҡалайыҡ,
Илгә ҡолаҡ һалайыҡ.
Нисек йәшәй халайыҡ?
Яуаптарын табайыҡ,
Йәнгә усаҡ яғайыҡ.

Ил хаҡында һүҙебеҙ,
Илдә ике күҙебеҙ,
Илдә яҡты йөҙөбөҙ,
Илдә ожмах, гүребеҙ,
Илдән киткән күбебеҙ,
Ил бит йәшәй, күрегеҙ!

Илдән сығып киткәндәр,
Ситте төйәк иткәндәр,
Мөстән атын еккәндәр,
Ситтә сәскән, иккәндәр, -
Илгә тула бүтәндәр,
Тула әкәм-төкәмдәр.

Ҡайһығыҙ һуң, ҡай ерҙә?
Кемдер байып серергә,
Олаҡҡан бит Себергә;
Кемдер йөрөй сит ерҙә
Ҡаҡланырға, кибергә,
Инер өсөн ҡәбергә.

Ҡайтығыҙ һеҙ, әйләнеп,
Илгә яҙмыш бәйләгеҙ,
Тереһыуҙы тәмләгеҙ;
Ҡайтып төшһә һәммәгеҙ,
Башҡортостан ҡәғбәбеҙ
Гөл-баҡсаға әйләнер,
Тупланайыҡ, әйҙәгеҙ,
Ҡайтығыҙ тик әйләнеп!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

✓ *Беҙ, башҡорттар, был ергә ҡайҙандыр ситтән килмәнек. Тамырыбыҙ - ошонда. Йәнебеҙ, "Урал батыр" эпосында бәйән ителгәнсә, кешелек барлыҡҡа килгән мәлдә үк ошо ерҙә яралған.*



ӘЙТӘГҮР!

# БАХЫР ХАЛЫҠ...

## Ер йөҙөнән юҡ ителә

**"Беҙҙең башҡорт заманға яраҡлаша алманы", тип бахырланған, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән милләттәштәргә нимә әйтер инегеҙ?**

**Рәүеф ӘЛМӨХӘМӘТОВ, "Банкос" фирмаһы директоры:** Мин бик күп илдәрҙә булдым. Сит илдә үҙ-ара мөнәсәбәттә үҙ тойғоларынды күрһәтеү һиҙелмәй. Бәҫ һаҡлау, намыҫ һаҡлау төшөнсәһе юғары. Үҙ бәҫтәрен юғары ҡуйғас, милләт бәҫен дә төшөрмәйҙәрҙер, тип уйлайым. Бындай кәмһенеү бер башҡортта ғына түгел, Рәсәй иленең башҡа халыҡтарында ла күҙәтелә. Татыулыҡ, яҙамсыллыҡ, бер-береңә ихтирам төшөнсәләре кәмене. Ә кешене ихтирам итмәү иң элек үҙ бәсендә төшөрөүҙән башлана. Әммә мин бөтөн башҡорттар ҙа улайҙыр тип уйламайым. Тормошта үҙен раҫлай, ауыр холҡо арҡаһында маҡсаттарына өлгәшә алмағандар үҙ уңышһыҙлығын кемгәлер япһарырға яратыусан. Тәғәйен кеше булмаһа, халыҡҡа япһара. Ҡайһы бер кеше үҙ яҙмышын баштан уҡ уңышһыҙлыҡҡа юрай. Был ғаиләләге тәрбиәнән дә киләләр. Минең әсәйемдең әсәһе - Фәрхиямал өләсәйем, олатайым вафат булғас, бер үҙе дүрт баланы аяҡҡа баҫтырған. Мал аҫыраған, картуф ултыртҡан, көнөнө эшләгән. Әммә зарланмаған. "Балаларым кәмһенеп йөрөмәһен", - тип тырышҡан ул. Әсәйем дә бик егәрле, эшсән, беҙҙе лә шулай тәрбиәләне. Ҡыҫҡаһы, үҙен ихтирам итмәгән кеше генә милләтен дә кәмһетә.

**Наил ҒӘЙЕТБАЕВ, драматург:** Башҡорт халҡы - бик боронғо халыҡ. Күпте күргән, тәжрибә туплаған. Азатлыҡ яулап байтаҡ ихтилалдарҙа ҡатнашҡан, илен ҡурсалап, һуғыштарҙа күп ҡан түккән. Ул йәшәүҙең мәғәнәһен, асылын аңлаған, ысын ҡиммәттәрҙе ялғандан айыра белерлек аҡыл туплаған. Булғанына ҡәнәғәт итә белә, байлыҡ тип артыҡ сапмай. Фани донъяла йәшәү өсөн артыҡ байлыҡ туплауҙың һис кенә лә кәрәкмәгәнен, рухи байлыҡтың күпкә өҫтөн булыуын яҡшы аңлай. Аҡса, аҡса, тип, бар йәшәү маҡсатын байлыҡта күргән Американың ниндәй әхлаҡһыҙлыҡҡа төшкәнен бөтөнөбөҙ ҙә күрә-ишетә беләбеҙ.

Бәхет - ул аҡса ла, байлыҡ та түгел, иң элек, күңел тыныслығы. Быны аҡһаҡал аҡылына эйә булған зирәк халҡым яҡшы аңлай. Әммә был бахырлыҡ түгел, ә фәлсәфәүи халыҡтың йәшәү мәғәнәһен аңлауы. Быны аңларлыҡ дәрәжәлә булмағандарҙың бахырланыуын күреүе ҡыйын. Бахыр кешеләр, бахыр халыҡ байлыҡ тип үлә, аҡыллы кеше, аҡыллы халыҡ байлыҡтың ваҡытлы икәнен аңлай.

(Дауамы 4-се биттә).

УЙЛАН...

# БЕҘ, БАШҠОРТТАР...



➔ **Беҙ, башҡорттар,** был ергә ҡайҙандыр ситтән килмәнек. Тамырыбыҙ - ошонда. Йәнебеҙ, "Урал батыр" эпосында бәйән ителгәнсә, кешелек барлыҡҡа килгән мәлдә үк ошо ерҙә яралған. Ошо ерҙән моң, тел, һут, ҡот, бәрәкәт, ырыҫ алғанбыҙ. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙе "ситтән килтерергә", ошо ерҙең килмешәге итеп күрергә теләй. Әйтергә кәрәк, был фараз еребеҙгә, йәнебеҙгә, тарихыбыҙға дәғүә итеүселәрҙең уйҙырмаһы, ҡоткоһо, аҫтыртын уй-ниәте. Был, үҙенә күрә, һыбайлы һәм йәйәүле мөнәсәбәте сағылышы. Тарихы шулайыраҡ: бер мәл һыбайлы үҙ юлында йәйәүлене осратҡан, ти. Арыған һәм талсыҡҡан йәйәүле һыбайлынан үҙен атҡа мендереүҙе һорай. Һыбайлы уны йәлләгән һәм эйәренән урын биргән, үҙенә ризыҡ бирергә ризалашҡан. Улар бергилке барғас, әйәрҙә ирекҡән элекке йәйәүле ат хужаһына: "Һин эйәрҙән төшөп, артабан йәйәү атла ла ҡуй, артабан мин бер үҙем барайым",- тигән белдереү яһаған. Кеше күңелле һыбайлы атынан төшөп, йәйәү атлаған һәм йәйәүлегә әүерелгән. Беҙҙе "ситтән килгән" тип иҫбатларға тырышыусы ла шул уҡ йәйәүле бит...

➔ **Беҙ, башҡорттар,** халҡыбыҙ тәрлә ырыуҙарҙан баш ҡорға ойошҡандан алып, үҙ дәүләтселегебеҙ булған милләт. Әммә беҙҙенсә дәүләтселек төшөнсәһе үҙ дәүләтселеген төҙөгән башҡа ҡәүемдәрҙекенән нык айырыла. Ни өсөн тигәндә, меңәр йылдар һуҙымында башҡорт милләте ике ҡитғаның төрлө төбәктәрендә йәшәүсе ҡәүемдәр һәм ҡәбиләләр вәкилдәренең Уралтауға, ундағы милләт ядроһын тәшкил итеүсе төп ырыуҙарға килеп ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән. Ситтән килеүселәрҙе төрлө тәбиғәт катаклизмдары (Туфан һыуы ҡалҡыуы, боҙлоҡтар шыуышыуы, ҡара ҡыштар, йотлоҡтар), донъя һуғыштары Уралтауға, унда йәшәүсе боронғо көслө ҡәүемгә килеп һыйынырға мәжбүр иткән. Урындағылар уларға йәшәргә урын, ут-һыу бүлеп биргән. Үҙҙәрен һәләкәттән һаҡлап ҡалған ҡәүемгә рәхмәт йөҙөнән ситтән килеүселәр был ҡәүемдең телен, динен, йолаларын ҡабул иткән. Был процесс бик оҙайлы йылдар барған һәм һөҙөмтәлә башҡорт милләте формалашҡан, уның эсендә йөҙҙән ашыу ырыу барлыҡҡа килгән. Тағы ла шуныһы: милләт составына ингән һәр бер ырыуҙың ике ҡитғаның ҡайһылыр төбәгендә үҙ тамырҙары, дәүләте һәм милләте бар. Нисек кенә булмаһын, милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең нигеҙендә ҡасандыр кешелеккә янаған дөйөм бәлә ятыуын аңлауы ауыр түгел. Шулай булмаһа, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө ерҙән, ҡырҡ холоҡло ҡәүем, ҡәбилә вәкилдәре, үҙ ерҙәрен ташлап, нисек итеп Уралтауҙағы төп ҡәүемгә килеп һыйына һуң? Башҡорт (баш ҡор) һәм дәүләт һүҙҙәре бер үк мәғәнәгә эйә, уның һәр бер ырыуы - дәүләткә буйһоноусы субъект, кәрәк саҡта тиҙ генә ғәскәр туплап (ғәскәр төҙөү һәм уны үҙ иҫәбенә тотоу - дәүләтселек күрһәткесе), баш ҡорға ебәрә алыусы берәмек, дәүләттең айырым бер өлөшө, заманса итеп әйткәндә, штаты, өлкәһе...

➔ **Беҙ, башҡорттар,** кешелеккә ирекле этник дәүләтселек һәм гуманлы этник империя өлгөһөн күрһәтеүсе милләт. Башҡорт дәүләтселеге һәм башҡорт империяһы, әйткәнебеҙсә, беҙҙең милләттең милләт булараҡ ойошоу рәүешендә һәм маҡсатында ята. Беҙ ике ҡитғаның әле был, әле икенсе еренән беҙгә килеп һыйыныусы ҡәүемдәрҙең берәһен дә көсләлек менән, янап йә ҡурҡытып үҙебеҙгә буйһондормағанбыҙ, үҙебеҙҙең милләттең бер өлөшө итмәгәнбеҙ. Башҡорт империяһы - кешелектең бер ҡорға ойошоуының идеаль этник империяһы өлгөһө. Был - кешелек тарихының үҙенсәлекле башҡорт империяһы феномены. Башҡорттоң бер ваҡытта ла ситтәрҙең еренә дәғүә итмәүен, баҫып алмауын да тап ошо фактор менән аңлатып булалыр. Беҙ кешелектең киләсәген тап шулай, милләттәрҙең ирекле рәүештә бер дәүләткә ҡушылыуы, империяға берләшеүе рәүешендә күрергә теләгәйнек. Дәүләтселектең һәм империяның бер формалары кешелекте яҡты киләсәккә алып килер тип хыялландыҡ, әммә беҙ теләгәнсә килеп сыҡманы, кешелек бөтөнләй икенсе юлдан китеп, дәүләтселектең һәм империяның ҡоралы, ҡанлы юлын һайланы. Кем белә, бәлки, шуның өсөн дә беҙ башҡалар күҙлегенән бер ҡатлы булып күренәбеҙҙер...

➔ **Беҙ, башҡорттар,** һаман да Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға тоғробоҙ. Үҙебеҙгә зыян килтерһә лә, шарран асыҡбыҙ, ихласбыҙ, иманға вә әхлаҡҡа хыянат итмәнек. Милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең төп маҡсаты - ирекле дәүләтселек һәм гуманлы империя сифатыбыҙға тоғробоҙ. Шуның өсөн дә беҙҙең башҡаларға ҡарата толерантлы булыуыбыҙға донъя һөмһөҙҙәре тарафынан бер ҡатлылыҡ йә сараһыҙлыҡ тигән ярлыҡ тағылалыр. Дөрөҫ әйтте Владимир Владимирович Путин, беҙҙә Рәсәй "бер тамсыла" кеүек сағыла, әммә ул һүҙен әйтеп бөтмәне: беҙҙә Рәсәй генә түгел, кешелектәге милләттәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенең идеаль формаһы бер тамсыла кеүек сағыла. Шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе ошо ерҙә яралтып, ошо ерҙең генә түгел, кешелектең яҙмышы өсөн оло яуаплылыҡ тойғоһо ла һалған. Американы азатлыҡ иле тиҙәр, тик унда бәхет эҙләп барып, үҙ асылын юғалтыусы "американлылар" бәхетләме икән? Ай-һай...

➔ **Беҙ, башҡорттар,** башҡа дәүләттәр һәм милләттәр менән һәр саҡ килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорҙоҡ, Рус дәүләте менән төҙөгән килешеүгә һәр саҡ тоғро ҡалдыҡ. Улай ғына ла түгел, Рәсәй именлегенә ситтәр ҡурҡыныс менән янағанда һәр ваҡыт башҡорт һыбайлылары алғы сафта барҙы. Был беҙҙең берҡатлылыҡҡа яҡын антҡа тоғролоҡ сифатыбыҙ түгел. Ғөмүмән, башҡорттар һундар, Туран дәүләте, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа, Рус батшалығы, Рәсәй, Советтар Союзы ғәскәрҙәре сафында һуғышып, иң беренсе нәүбәттә үҙ милләтен, Уралтауҙы һаҡлауҙы маҡсат итеп ҡуйған...

➔ **Беҙ, башҡорттар,** донъя һөмһөҙҙәренең үҙ именлегебеҙгә хаяныҙ мөнәсәбәтен күтәрә алмайынса, күп тапҡырҙар ихтилалдарға күтәрелеп, һуңғы сиктә XX быуат башында тағы ла ҡулыбыҙға ҡорал алып, донъяның рәсми даирәләре талап иткән формалағы дәүләтселегебеҙҙе төҙөргә мәжбүр булдыҡ һәм бының Рус дәүләтселегендәге күп кенә халыҡтарға үҙ автономияһын төҙөүгә, һуңғы сиктә Рәсәй Федерализмына юл һалдыҡ. Башҡорт милләтенең һәм ул халыҡтарҙың ирке өсөн миллионлап башҡорт аҫылдары башын һалды. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға әле лә тоғробоҙ, беҙҙең өҫтән ошо ер һәм кешелек өсөн яуаплылыҡ төшмәгән. Төшмәҫ тә. Шуның өсөн дә Башҡортостаныбыҙҙың һәм кешелектең яҡты киләсәге хаҡында һөйләшер өсөн ошо ҡорға йыйылдыҡ...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Йәштәр советы ағзаһы, БДУ-ның Хоҡуҡ институты студенты Азат Бадранов "Закон сығарыу башланғысым" тигән Бөтә Рәсәй бәйгеһендә енеп сыҡҡан. Азат бәйгегә "Рәсәй Федерацияһында йәштәр фәненә дәүләт ярҙамы тураһында" федераль закон проектын ебәргән. 30 эш араһында Азаттың эше иң яҡшыһы тип табылған һәм уға I дәрәжә диплом тапшырылған. Бынан тыш, Азаттың эше бәйгенең иң яҡшы проекттары исемлегенә индерелгән. Ул үҙ сиратында РФ Дәүләт Думаһының профилле комитетына ҡарауға ебәреләсәк.

✓БР Хөкүмәте менән Ю.Гагарин исемендәге Рәсәй дәүләт космонавтар әҙерләү ғилми-тикшеренеү-һынау үҙәге араһында Башҡортостан шифаханалары базаһында космонавтарҙы осоштан һуң реабилитациялауҙы ойоштороу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйылғайны. Рәсәй шифаханаларында үткәрелгән мониторинг һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан шифаханаларының ошо маҡсат өсөн иң ҡулай булыуы билдәләнгән һәм "Красноусол" шифаханаһы осоштан һуң ял иттереү майҙансығы итеп һайланған. Космонавт Михаил Тюрин бында реабилитация курсы үтеп, Космонавтар үҙәге етәксеһе Василий Циблиев һаулығын нығытып ҡайтып киткәйне инде. Әле бына осоштан һуң реабилитация үтеү өсөн шифаханаға космонавт Максим Сураев килде.

✓РФ Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идараһыһы Фоат Хантимеров журналистар менән осрашыуҙа пенсия реформаһының тәүге һөҙөмтәләре тураһында һөйләне. Пенсияларҙы һәм пенсияға хоҡуҡтарҙы валоризациялау эше уңышлы тамамланған. 2010 йылдың 1 апрелενә уртаса пенсия күләме 6649 һум тәшкил иткән. 1 апрелдә хеҙмәт пенсияһын индексациялағандан һуң ул 6,3 процентҡа артты. Республика буйынса уртаса хеҙмәт пенсияһы күләме - 7313 һум, ҡартлыҡ буйынса уртаса хеҙмәт пенсияһы - 7116 һум. 1 июлдән дәүләт пенсияларының тағы ла артыуы көтөлә.

✓Бөрйән районының Оло Ҡужан тип аталған урынында Башҡортостанда туристар өсөн коммерция нигеҙендә эшләгән тәүге туҡталҡа асылды. Ҡырағай туризмдан заманса стандарттарға күсеүҙең тәүге аҙымы булды, тип баһаларлыҡ был башланғыс БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев тарафынан тәҡдим ителгәйне. Был туҡталҡа тураһында гәзиттең киләһе һандарында анығыраҡ мәғлүмәт буласаҡ.

*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ*

**Урал армыттарында, уның көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш урманлы-яланлы ерҙәрендә бынан 4 - 5 мең йылдар әүәл көн күргән башҡорттар ошо заманда әҙәми затҡа билдәле булған барлыҡ көнитмеш төрҙәрен дә үҙендә туплаған. Ул иген иккән, мал тотҡан, мәғдән сығарған, баҡыр, тора-бара тимер сүкегән, ҡалалар һәм ауылдар төҙөгән, йәйләүгә сыҡҡан. Уның төп шөғөлө ил һаҡлау, дәүләттең именлеген баҫҡынсылар һәм яҫҡынсыларҙан ҡурсалау, эске тәртипте тотоу булғанлыҡтан, үҙе һәм ир балалары һәр саҡ ғәскәри хеҙмәттә торған, ә өйҙәге ғаиләһе өҫтә әйтеп үтелгән кәсепте күргән.**

# АҪАБАЛЫҠ



Был турала "Урал батыр" эпосында Уралдың яуҙа йөрөүе, аҙаҡтан ир балаларының да үҙенә ҡушылыуы, ә ҡатындарының донъя көтөүе, башҡорттоң бүтән эпостарындағы ваҡиғалар ҙа шуны раҫлай. Тормош-көнкүреш ҡороуҙың бөтә рәүештәре лә башҡортҡа хас икәнлеген тарихта ҡалған, археологик табыштары аша даны сыҡҡан Арҡайым, Башҡорт, Һынташ ҡалалары дәлилләй. Шул замандағы дәүләт, уның башында торған батшалар, ҡала, ауыл сардары хәрби хеҙмәткәргә тәғәйен ер биргән. Йәмғиәттең бүтән ҡатлам кешеләренең ере үҙгәрергә, артырға йә кәмергә, бер йылда бер урында, икенсеһендә икенсе урында булырға, йә бөтөнләй тартып алынырға мөмкин саҡта хәрбиҙеке (башҡорттоҡо) үҙгәрмәйенсә һаҡланған. Үҙе яуҙа үлһә, ере ғаиләһенә бирелгән. Бүтәнсә уның еренә берәү ҙә хужа була алмаған.

Бүтән төрлө әйтһәң, башҡорттоң билдәле бер ергә хужа булыу хоҡуғы бик борондан, тарих ҡағыҙға яҙыла башлағанға тиклем үк барлыҡҡа килгән, тип фаразларға була. Аҫаба һүҙенең барлыҡҡа килеү рәүеше лә шуны раҫлай. Әгәр аҫабалыҡ бынан 4-5 мең йыл әүәл тыуған булһа, был һүҙҙең барлыҡҡа килеүен дә шул нигеҙҙә эҙләргә кәрәк. Ул заманда Уралда боронғо иран телендә һөйләшкән кешеләр көн күргән, шуға һүҙ тамырын шул телдән юллайбыҙ. Әйтелгән һүҙ ике өлөштән тора: аҫа һәм ба. Аҫ, ас - "ер" мәғәнәһендә булған. Һуңынан ҫ, с өндәре р өнө менән сиратлашҡан һәм хәҙерге яңғырашлы "ер" барлыҡҡа килгән булырға тейеш. "Ба" һүҙе элек тә, әле лә бер үк мәғәнәлә йөрөй - "бабай", "атай". Йәғни аҫаба - "атай ере", "атай-бабай ере", киңерәк мәғәнәлә "ғаилә ере" була.

Башҡорттоң көнкүреше, ғөмүмән, донъяһы яйлап үҙгәргән. Үҙгәрешкә төп сәбәпсе ул үҙе түгел. Үҙгәреште Ҡытай менән сиктәш Көнсығыш илдәренән Көнбайышҡа күсенгән халыҡтар килтерә. Урал тауы тирәһендә көн күргән бүтән кешеләр менән бергә башҡорттар ҙа уларҙың йоғонтоһон үҙ иңендә татый. Көнсығыштан килеүселәр һан яғынан бик күп булғанға күрә, урындағылар тегеләрҙән еңелә. Элек бит яуҙа, көнкүрештә, донъя көтөүҙә еңеүҙе кем күберәк - шул алған. Ошо урында хәҙерге заманда булып үткән фәһемле бер һөйләшеү иҫкә төшә. Уны минең дипломат яҡташым тасуирлағайны: "Рәсәй менән Ҡытай араһында һөйләшеү алып барабыҙ, - тигәйне ул. - Айҙар буйы эшләйбеҙ, тик алға китеш юҡ. Ҡытайҙар беҙҙең бер генә тәҡдимде лә ҡабул итмәй. Көндәрҙең береһендә бәхәсләшеп арығас, тышҡа тәмәке тартырға сыҡтым, минең менән ҡуша бер ҡытай ҙа сыҡты. Йәнәш торабыҙ, шунан теге: "Бәхетһеҙ халыҡ һеҙ, россияндар", - ти. "Ниңә?" "Сөнки һеҙҙең күршегеҙ беҙ - ҡытайҙар. Ә беҙ бик күпбеҙ. Һеҙ йөҙ миллион ярым булһағыҙ, беҙ бер ярым миллиард кеше. Һеҙҙең һәр берәүегеҙгә беҙҙең унау тура килә. Беҙ һеҙҙе бүтән төрлө еңә алмаһаҡ, семтекләп, тешләп булһа ла үлтереп бөтөрәбеҙ. Ун кешегә ҡаршы барыбер сыҙай алмаясаҡһығыҙ". Бына ошо һөйләшеү күпселек менән аҙсылыҡ нисбәтен бик яҡшы төшөндөрә.

Яңы эраның башы тирәһендә башланған күсеш Уралда йәшәгән кешеләрҙең тормошон ныҡ үҙгәрткән. Күскенсе күпселек урындағы аҙсылыҡты үҙенең теленә күсергән. Башҡорттоң теле ирансанан төркисәгә әүерелә, әммә элекке телдән бик күп тамыр һүҙҙәр ҡала, шул иҫәптән "аҫаба" тамыры ла.

Башҡорттоң ултыраҡ хужалығын күсмән көнкүреш еңә, мәғдән ҡаҙып ҡалалар төҙөү, иген сәсеп, йәшелсә үҫтереү урынына мал тотоу, мал кәсебе өҫтөнлөк итә башлай, шуға ҡалалар төҙөү, унда йәйен-ҡышын йәшәү онотола. Әммә ер ултыраҡ тормош ҡорғанға ла, мал баҡҡанға ла кәрәк. Шуға ул үҙгәрешһеҙ ҡала, улай ғына ла түгел, ер биләмәһе ҙурая, хәҙер аҫабалыҡ хәрбилек менән ҡуша бүтәндәргә лә күсә. Шул уҡ ваҡытта хәрби хеҙмәт бурысы бөтә ир-атҡа ла йөкмәтелә, тимәк, башҡорттоң һәр береһе - хәрби зат һәм аҫаба.

Аҫаба хоҡуғы башҡорт өсөн һәр саҡ иң мөһим тормош ҡануны булған. Үҙенең ерендә ул ризыҡ тапҡан, кейем йүнләгән, кәсеп иткән, өй һалған, тирмә ҡорған, кәләш алған, нәҫел үрсеткән, ерен һаҡлаған, уны берәүгә лә бирмәгән. Аҫабалыҡтан яҙмаҫ өсөн башҡорт Сыңғыҙ хан сиреүенә 14 йыл ҡаршы тора, Иван Грозный менән бер нисә йыл дипломатик һөйләшеүҙәр алып бара һәм, һәр ике осраҡта ла аҫабалыҡты элеккесә ҡалдырыу шарты менән көслө яҫҡынсыларға баш һалырға ризалаша.

Аҫабалыҡ башҡорт ҡанына меңәр йылдар буйы һеңгән күренеш. Аҫабаны берәүгә лә бирмәү өсөн диңгеҙҙәй ҡан түгә, миллиондан да күберәк йән бирә. Сөнки аҫабанан башҡа уның бер ниндәй бүтән мөлкәте лә юҡ: ҡалалар ташланған, завод-фабрикалар һалынмаған, алтынды золом сығанағы тип, йыймаған. Бар булған мөлкәте - аҫаба ере. Шул мөлкәтенә хужа булған да ул 1920 йылға тиклем. Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡортостан хөкүмәте төҙөгән дәүләттең төп бурысы аҫаба башҡорттоң тыныс тормошон тәьмин итеү була. 1917 йылға аҫабалар 6 дисәтинәнән күберәк ерҙе мөлкәте һанап килеп инә (хәҙергесә 7 гектарға яҡын). Был бик ныҡ талауҙан, урлауҙан, һатып алыуҙан ҡалған ер. Башҡорт хөкүмәте беренсе сиратта ошо ерҙе һаҡларға һәм киңәйтергә була. Берәүҙәр үтә күп ер (200 мең дисәтинә -Ҡорбанғәлиевтар) тотһа, уларҙыҡын башҡалар менән тиңләштерергә ҡарар ителә. Күскенселәр ҡулына эләккән ерҙе мөлкәт рәүешендәгеһен кире элекке хужаларына ҡайтарыу йә ҡуртымға ҡалдырыу мәсьәләһен дә хәл итергә йыйына хөкүмәт.

Үҙәк совет власы менән 1919 йылдың 20 мартында төҙөлгән килешеү ҙә ошо маҡсаттан яһала - аҫабаны һәм аҫабалыҡты һаҡлау. Әммә мәкерле Ленин хөкүмәте 1920 йылда килешеүҙе боҙа, дөрөҫөрәге, унан баш тарта һәм башҡорттоң аҫабалығы ошо көндән башлап бөгөнгәсә юҡ. Башҡорт бер ниндәй ҙә мөлкәтһеҙ, хоҡуҡһыҙ ҡалды. 4-5 мең йыл әүәл нисек булһа, шул рәүешле. Әйтерһең, меңәр йылдар үҙ еренә хужа булмаған. Хәҙер йөрөй ул иҫкән ел ыңғайына тәгәрәгән ҡамғаҡ һымаҡ. Ауылда ғына йәшәр ине, унда ере юҡ. Ҡалала торор ине, фатир ҙа, эш тә юҡ. Ҡала янында өй һалыр ине, башҡорт илендә башҡортҡа ус аяһындай ер юҡ.

Ни эшләргә? Аҫабалыҡты кире ҡайтарырға кәрәк! Бөгөнгө Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы, әле ғәмәлдә булған бүтән закондар кешеләрҙең совет дәүерендә юғалған хоҡуҡтары һәм милке аяҡҡа баҫтырылырға мөмкин, тип һанай. 1920 йылда Рәсәй Федерацияһы тартып алды бит аҫабалыҡты, 2010 йылда Рәсәй Федерацияһы кире ҡайтарһын уны. Бының өсөн һәр аҫаба, йәғни элекке ер хужаларының вариҫтары беренсе сиратта 1920 йылға тиклем үҙенең аҫаба еренең ҡайҙа, күпме булғанын һәм нисек межаланғанын раҫларға бурыслы. Икенсенән, ул үҙенең 1920 йылға тиклем көн күргән бабай-олатайҙарының вариҫы икәнен күрһәткән документ эшләргә тейеш. Шунан һуң Рәсәй закондары нигеҙендә элекке аҫаба ерен ҡайтарыуҙарын һорап, район хакимиәтенә мөрәжәғәт итә. Ул ыңғай яуап бирмәһә, Башҡортостан Хөкүмәтенә яҙа. Унан да кәрәкле яуап ала алмаһа, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә хат ебәрә. Бында ла мәсьәлә хәл ителмәһә, ошо документтарҙы тотоп, район судына бара. Район суды ыңғай ҡарар сығармаған һүрәттә республиканың Юғары судына мөрәжәғәт итә. Унда ла булмаһа, Рәсәйҙең Юғары судына иск бирә. Рәсәй кимәлендә лә эш сыҡмаһа, аҫабаны юллаусы халыҡ-ара судҡа мөрәжәғәт итә.

Беҙҙең бабайҙар аҫабалыҡты меңәр йыл буйы тотҡан. Беҙ бөгөн шуны кире ҡайтарырға һәләтһеҙме ни? Тик ятырға ғына ярамай. Тик беҙгә цивилизациялы, закон рөхсәт иткән ысулдар менән эшләргә генә кәрәк. Мин ошо юлда башҡорттоң уңышҡа өлгәшеренә ышанам. Әлеге рәүешле үҙ хоҡуҡтарын аяҡҡа баҫтыра алған милләттәр Ер йөҙөндә бар бит. Әйтәйек, Америка индеецтары, әйтәйек, йәһүдтәр...

Аҫабалыҡ һәм аҫабалар тураһында минең фекерем бына ошо. Әгәр III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында әлеге мәсьәлә ҡуҙғатылһа, бик урынлы булыр ине. Бүтәндәрҙең уйын белеп, фекер уртаҡлашыу бик кәрәк.

**Ғәлим ХИСАМОВ,**
**яҙыусы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтындағы халҡыбыҙҙың билдәле шәхестәренә арналған Батырҙар аллеяһы тиҙҙән тағы бер шәхес - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева бюсы менән тулыланасаҡ.

✓Сибай ҡалаһында башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Ирәндек моңдары" X төбәк-ара конкурсы булып үтте. Унда республиканың 17 районынан, 6 ҡалаһынан, шулай уҡ Ҡурған, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, Татарстандан һәм Мәскәүҙән 114 кеше (шуларҙың 58-е - балалар) ҡатнашты. Балалар араһындағы бәйгелә Нуриман районы Яңы Күл ауылынан Раушан Хәлилов еңеү яуланы. Ә өлкәндәр араһында конкурстың Гран-прийына Өфөнән Дилара Иҙрисова лайыҡ булды. Бәйгеселәрҙе БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илдус Илешев ҡотланы.

✓"Башҡортостан" киностудияһында "Минең йондоҙом" исемле яңы башҡорт фильмының исем туйы үтте. Фильм йәштәрҙең бөгөнгө тормошон, көндәлек проблемаларын, мөхәббәт һәм йәшәү идеалдарын яҡтырта. Күптән түгел Мәскәүҙә Щепкин исемендәге сәнғәт училищеһын тамамлаған йәштәр, шулай уҡ йәш сәхнә оҫталары ҡатнаша. Төп ролдәрҙең береһен, мәҫәлән, "Бүреләр" рок-төркөмө солисы Илшат Абдуллин башҡара. Фильм Зөһрә Бураҡаева сценарийы буйынса ҡуйылған.

✓"Россельхознадзор"ҙың БР буйынса идаралығы белгестәре тарафынан 10 тонна Мысыр әфлисундары партияһын юҡ итергә әмер бирелгән. Баҡтиһәң, йөктә Урта диңгеҙ буйы емешеләк себененең тере ҡарышлауыҡтары табылған. Был себен - ауыл хужалығы культураларының хәүефле ҡоротҡосо. Ул Европа, Азия, Африка, Америка, Австралия кеүек күп илдәрҙә таралған. Рәсәйҙә ул юҡ, әммә карантин объекты булып иҫәпләнә.

✓10 июндә Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында III Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайына арнап, Сибай дәүләт филармонияһы артистары шағир Шәйехзада Бабичҡа арналған "Йөрәктәрҙә ҡалдың йыр булып" тигән музыкаль драмаһы менән сығыш яһай. 11 июндә Башҡорт дәүләт филармонияһы ижадсылары "Уралымда тамырым..." исемле концерт программаһы тәҡдим итә.

***✓ Өләсәйҙең 23 ейән-ейәнсәре, әлегә 20 бүлә-бүләсәре бар (тағы ла 10 ейән-ейәнсәре әле ғаилә ҡормаған). Бына, күрәһегеҙ, бер нисә быуын алмашынып та өлгөрмәгән, ә милләт күпме кешегә артҡан.***

*ӘЙТӘГҮР!*

# БАХЫР ХАЛЫҠ...

## Ер йөҙөнән юҡ ителә

**"Беҙҙең башҡорт заманға яраҡлаша алманы", тип бахырланған, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән милләттәштәргә нимә әйтер инегеҙ?**

**Рәшит ШӘКҮР, шағир, ғалим:** Үкенескә ҡаршы, бахырлыҡ синдромы осрап тора. Бахырлыҡ, меҫкенлек иҙелгән милләткә һеңдерелә килә, сөнки кеше ни тиклем меҫкен булһа, уны шул тиклем тиҙерәк бөтөрөп була. Милләт яҙмышы, уның йәшәү-йәшәмәүе өсөн иң ҙур хәүеф ошо ла инде. Совет заманында был тенденция айырыуса ныҡ үткәрелгән. Әммә халҡыбыҙҙың бөйөк шәхестәре башҡорт рухын тотоп килгән һәм килә. "Бөйөк шәхестәр" тигәндә, мин вазифа юғарылығынан йәки күкрәгендәге ордендар һанынан сығып әйтмәйем, бөйөклөктө мин кешенең рухы юғарылығынан, милләт яҙмышын күҙаллау һәм бөтөн ғүмерен, йәшәү маҡсатын уның яҙмышына арнау йәһәтенән сығып билдәләйем. Йәшәү-йәшәмәү проблемаһы һәр милләттә лә бар. Хатта күп һанлы милләттәрҙә лә. Сөнки сәйәсәт шул тиклем мәкерле, ул милләт һанының күплегенә, аҙлығына ҡарамай, баҫырға маташа. Ғаяз Исхаҡи үҙ заманында Иҙел-Урал штаты төҙөү идеяһы ҡалдырған. Ҡайһы берәүҙәр һаман шуны бойомға ашырырға маташа. Совет власы телебеҙҙе, рухыбыҙҙы имгәтеү эше алып барҙы. Һуңғы ваҡытта ошо ауырыу үҙен һиҙҙерткеләп ала һәм, әгәр беҙ рухи ныҡлығыбыҙҙы ҡаҡшатһаҡ, бөлдөрөп ҡуйыуы ла ихтимал.

Рухи ныҡлыҡты һаҡлау өсөн меҫкенлек ауырыуы менән яфаланғандарға идаралыҡ теҙгенен тоттормау сараһын күрергә кәрәк.

Меҫкендәрҙе үргә үрләтмәйек,
Меҫкен йәндәр ҡалһын түбәндә.
Меҫкендәр бит үргә үрләгәндә
Сабатаһын түргә элгәндәр.

Минеңсә, үҙ милләтен кәмһеткән кеше шул милләт вәкиле булып өлгөрмәгән. Башҡортто кәмһетә икән, тимәк, ул кеше башҡорт булып өлгөрмәгән. Үҙен ысын башҡорт итеп тойған кеше бер ваҡытта ла улай тип әйтмәҫ. Уларҙы халыҡ менән бутарға ярамай. Халыҡ бөйөк ул. Иң бөйөгө Алла, унан ҡала - халыҡ. Башҡорт халҡының рухи мәҙәниәте донъя культураһында урын алған. Ундай халыҡ бахыр буламы ни?!

**Морат БАЙДӘҮЛӘТОВ, шәхси эшҡыуар:** Ундай фекерҙе ялҡауҙар, эскеселәр, эшкинмәгәндәр үҙҙәренең йүнһеҙлеген аҡлар өсөн әйтәлер. Байтаҡ йылдар Нижневартовск ҡалаһында нефтсе булып эшләнем. Башҡорттарҙың тырышлығын, эшкә һәләтле булыуын юғары баһалай торғайнылар. "Беҙ бахыр инде" тип бахырлананалар икән, был уларҙың эше, ләкин "беҙ" тигән урынға "башҡорт" тип өҫтәргә хаҡы юҡ уларҙың.

**(Дауамы 12-се биттә).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**"Киске Өфө" гәзитендә уҙғарылған түңәрәк ҡорҙа ("Башҡорт йөрәге уяныр, әгәр ҙә ул диненә, ғаиләһенә, зат-араһына ҡайтһа") Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты белгесе Фәнзил Әхмәтшин милләттең һанын арттырыр өсөн үҙенең демографик модулен тәҡдим иткәйне. Бының өсөн ул 12 мең ғаиләне ала. Әгәр һәр ғаиләлә тыуыр балаларҙың һаны мотлаҡ 5-әү булһа, 115 йылдан 12 мең ғаиләнән тыуа башлаған халыҡтың дөйөм һаны 168 миллионға етә, тигән һүҙ. Тимәк, милләттең һанын арттырыу бер ни тормай. Әгәр ҙә халыҡ үҙе ойошоп, үҙенсә йәшәһә, иманлы, аңлы булһа, демография мәсьәләһе үҙенән-үҙе хәл ителә. Ошо фекергә нисек ҡарайһығыҙ?**

# МИЛЛӘТТЕҢ ҺАНЫН АРТТЫРЫУ...

## бер ни тормай!



**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА:** Мин был фекер-тәҡдимде шул тиклем ҡыуанып ҡабул иттем һәм был исемлектә беҙҙең дә ғаилә булырға тейеш, тип уйланым. Шәп идея был. Тик ошо күп бала тәрбиәләйәсәк 12 мең ғаиләне тәшкил иткән башҡорт милләтле атай-әсәйҙәр үҙҙәре аң-белеме, аҡылы, милли рухы, иманы, сәләмәтлеге менән камил инсандар булырға тейеш. Унан һуң, был демографик модулде төҙөйәсәк ғаиләләр бала тәрбиәләүҙә дәүләт ярҙамына түгел, үҙ көстәренә ышанырға тейеш. Әгәр эш матди мәсьәләләргә ҡайта башлаһа, был программаның ниәте үҙгәреп китеүе ихтимал һәм ул беҙгә кәрәкле һөҙөмтәне бирмәйәсәк. Был программаның нигеҙендә, ысынлап та, милләтемә лайыҡлы шәхестәр тәрбиәләп ҡалдырам, тигән эскерһеҙ уй менән янған, аяғында ныҡлы баҫҡан энтузиастар торорға тейеш. Ҡоро һандар артынан ҡыуыу беҙҙең файҙаға түгел. Тағы ла шул: милләт көсөн арттырыу өсөн, минә ҡалһа, иң тәүҙә атай, ир дәрәжәһен күтәрергә кәрәк. Нәҫел көсө атайға ҡарап билдәләнһә, нәҫел ҡотон әсәй һаҡлай. Аҡыллы, рухы менән көслө ҡатын был көсөн лидерлыҡҡа түгел, ә ир абруйын үҫтереүгә, бала тәрбиәләүгә, ғаилә усағының йылыһын һаҡлауға йүнәлтер. Минеңсә, шулай эшләһә, ул милләтенә күберәк файҙа килтерә аласаҡ.

**Айҙар СӘЛИХОВ, 4 бала атаһы:** Ысынлап та, демографик хәлде үҙгәртерлек бик ҙур программа был. Мин дә ошо түңәрәк өҫтәлдә булған һөйләшеүҙе уҡығандан һуң, ҡыҙыҡ күреп, олатайым менән өләсәйемдең милләтте арттырыуға ниндәй өлөш индергәнен һанап ҡараным. Улар биш балаға ғүмер биргән һәм ул балаларҙың һәр береһе күп бала үҫтергән, йәғни өләсәйҙең 23 ейән-ейәнсәре, әлегә 20 бүлә-бүләсәре бар (тағы ла 10 ейән-ейәнсәре әле ғаилә ҡормаған). Бына, күрәһегеҙ, бер нисә быуын алмашынып та өлгөрмәгән, ә милләт күпме кешегә артҡан. Шуныһы мөһим: уларҙың һәр береһе кеше һаны ғына булып йөрөмәй, ә мәғариф, мәҙәниәт өлкәләрендә лайыҡлы эшләгән, үҙ эштәрен асып, ауылдаштарына ярҙам иткән, дин тотоп, дин таратып йәшәгән, милләтенә файҙа килтергән кешеләр. Һан түгел, сифат мөһим, тиҙәр. Беҙ ҙә иңебеҙгә милләтте арттырыу бурысын йөкмәгәндә сифат тураһында онотторға тейеш түгелбеҙ. Бының өсөн беҙ алдынғы ҡарашлы, көслө рухлы, һау-сәләмәт, яҡшы белемле, иманлы, отҡор, сос, ҡыйыу, намыҫлы балалар тәрбиәләргә тейешбеҙ. Күп бала табыуы, уларға тәғәйен тәрбиә биреүе ағинәйҙәр мәктәбен үткән, өләсәйҙәрҙән күркәм тәрбиә алған, уларҙың өлгөһөн күреп үҫкән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына бер ни тормай ул, тик ир-аттар яҡшы атай, йүнсел, хәстәрлекле ғаилә башлығы булһын. Шул ваҡытта был программаны тормошҡа ашыра башлауы бер ни ҙә тормаясаҡ.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА, уҡытыусы:** Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа аҡса, дәүләт ярҙамы алыр өсөн генә бала тапҡандар ҙа барлыҡҡа килде. Улар араһында бала табып та, уларҙы ҡарамаған эскесе ғаиләләр ҙә етерлек. Ундай ғаиләләге балаларҙың һирәктәре генә уҡыу һәм тәртип буйынса яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтә. Шәжәрәләргә иғтибар итһәк, элек һәр башҡорт ғаиләһендә кәмендә 5 бала булған. Улар балаларҙы бер ниндәй дәүләт ярҙамы өмөт итмәй, үҙ ихтыяры менән, милләтте арттырабыҙ, нәҫел ҡалдырабыҙ, тигән изге ниәт, маҡсаттар менән үҫтергән. Тимәк, әгәр беҙ милләтебеҙҙең һанын арттырыр өсөн был программаға мөрәжәғәт итәбеҙ икән, уға бер ниндәй ҙә сәйәсәттең ҡыҫылышы булмаҫҡа тейеш. Үҙ ихтыярыбыҙ, үҙ теләгебеҙ менән башҡарырға тейешбеҙ быны. Шарт берәү генә булыуы мөмкин: ғаилә ҡороусыларҙың икеһе лә башҡорт милләтенән булырға тейеш. Шул саҡта ғына сифат өҫтөнлөк итер, шул саҡта ғына халҡыбыҙҙың киләсәген туплай алған рухлы йәш быуын тәрбиәләй алырбыҙ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә һыу инеү урындарын әҙерләү тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, әлегә ун пляж урынының дүртәүһе генә ял итеүселәрҙе ҡабул итергә әҙер. Һыу инеүселәрҙе профессиональ ҡотҡарыусылар контролдә тотасаҡ. Өфөлә барлығы 13 ҡотҡарыу посы ойошторолған.

✓БР Президенты баш ҡаланың Киров районында 50-се балалар баҡсаһының реконструкциянан һуң файҙаланыуға тапшырылыу тантанаһында ҡатнашты. 180 бала ҡабул ителәсәк балалар учреждениеһына спорт залы, физкультура -һауыҡтырыу комплексы ла ингән. Кескәйҙәр өсөн музыка залы, инглиз теле, хореография түңәрәктәре, тикшереңеү лабораторияһы, театр студияһы эшләйәсәк. Шулай уҡ психолог һәм методик кабинеттар эшләйәсәк. Әле баш ҡалала 221 балалар баҡсаһы, ете балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәп бар. Уларҙа 39 меңдән ашыу бала тәрбиә һәм белем ала.

✓Һаулыҡ һаҡлау буйынса республика күсмә советы ултырышына әҙерлек сиктәрендә баш ҡалала дауаханалар яңыртыла, яңынан төҙөлә. Ошо көндәрҙә капиталь ремонттан һуң 17-се ҡала балалар дауаханаһының төп корпусы асылды. Уны асыу тантанаһында БР Президенты Мортаза Рәхимов һәм баш ҡала етәкселәре, башҡа рәсми кешеләр ҡатнашты.300 койка-урынға иҫәпләнгән дауаханала урология, нейрохирургия, ортопедия, травматология, педиатрия, неврология, хирургия һәм реанимация бүлексәләре урынлашҡан.

✓Республиканың йәш яҡташтар ойошмалары ассоциацияһы Өфө ситендәге Ташкисеү майҙанында йәштәр һабантуйы үткәрҙе. Башҡорт йәштәре инициативаһы менән икенсе тапҡыр үткәрелгән был сара, бер ниндәй иҫерткес эсемлектәрһеҙ ҙә күңел асып, аралашып була, тигәнде тағы бер тапҡыр раҫланы. Барыһын да йәштәр үҙҙәренсә, йәштәрсә ойоштorған. Баймаҡ, Хәйбулла райондары йәштәре был эштәрҙең башында торған. Хатта тирмәләр конкурсы ойошторорға ла батырсылыҡ иткәндәр.

✓"Ҡайҙа үлем менән һатыу итәләр, хәбәр ит!" тигән Бөтә Рәсәй акцияһы башланды. Тәүлек әйләнәһенә эшләүсе "ышаныс телефоны"на (8-800-347-20-30) шылтыратып, наркотиктар әҙерләү, һатыу, һаҡлау факттары тураһында хәбәр итегеҙ.

✓ Унҡурийа иленә барып еттем, бында йәшәүсе халыҡты башкирд тип атайҙар. Төркиҙәр иленән сығып, франк иленә беренселәрҙән булып барып еткән ҡәүемдән улар, иҫәпһеҙ күптәр һәм бик ҡыйыуҙар.



ВИРТУАЛЬ ҠОР

**Үҙ халҡының тарихы менән ҡыҙыҡһынмаған һәм уны белергә теләмәгән инсандарҙы аңлауы ҡыйын. Тарихҡа ҡарата битарафлыҡ маңҡортлоҡҡа илтә. Ә башҡорт тарихы шундай боронғо, ҡатмарлы һәм серле, уға бер эҫенһәң, һис айырылырлыҡ түгел. Тарих ҡабатланмай, уның барса хәл-ваҡиғаларын беҙ төрлө яҙмаларҙан уҡып ҡына күҙ алдына килтерәбеҙ. Мине бигерәк тә башҡорттар тураһында хәбәрҙар булған, улар тураһында үҙ ҡараш-баһаларын аҡҡа төшөргән шәхестәр ҡыҙыҡһындыра.**

**Тарихнамәләр менән танышҡанда уйланаһың да, хисләнәһең дә, хыялға ла биреләһең. Ҡай сағында күңелеңде күтәрһә, бәғзе осраҡта йөрәгеңде лә һыҙлата ул. Мин шәхсән ошондай мәлдәрҙә быуаттар томаны эсендә ҡалған шәхестәр, үҙ заманы хаҡында бәйән иткән сәйәхәтселәр, уҡымышлы заттар, тарих ҡаҙанында ҡайнаған башҡа зыялылар менән осрашҡандай булам. Уй-фекер аша, хәҙергесә әйткәндә, виртуаль ысынбарлыҡтың түңәрәк ҡоронда уларҙы замандаштарыбыҙ менән осраштырып, бына тигән әңгәмә ҡороп була бит! Әйҙәгеҙ, был юлы "Киске Өфө"нөң виртуаль ҡорона саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙҙы тыңлап ҡарайыҡ.**

# МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ,

## йәки Яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы ынйыы бөртөгөләй йыйыу фарыз



**Хәҙерге Башҡортостан Көньяҡ Уралды, Урал алды һәм арьяғын, уның көньяғындағы далаларҙы биләй. Тарихи Башҡортостан күпкә ҙурыраҡ булып, уны төйәк иткән ҡәүемдәр меңәр йылдар элек үк донъяның төрлө тарафтарында көн иткән халыҡтарға билдәле булған. Һеҙ, Ислам нурынан аҡыл һәм иман алып йәшәүсе боронғо ғәрәп уҡымышлылары, башҡорттар тураһында ниҙәр беләinегеҙ?**

**ИБН ХОРДАДБЕК (IX быуат):** Бөйөк Ғәрәп хәлифәтенең танылған инсаны Сәлләм Тәрджемән ошо быуаттың 40-сы йылдарында Хазар иленә һәм артабан унан көнсығышта булған илдәргә сәйәхәт ҡылды. Ул бәйән иткәндәрҙән Итил йылғаһының тамағынан 27 көнлөк юл үтеүгә, Башҡорт иле башланыуы тураһында хәбәрҙар инек.

**ӘЛ МАСУДИ (X быуат):** Мин баджғардтар тураһында бер аҙ мәғлүмәтте "Китаб әт Тәнбих" тигән әҫәремде яҙған саҡта таптым.Төрки ҡәүемдәр араһында 840 йылдар тирәләрендә низағ сығып, Джурджания күле (һеҙ уны Арал диңгеҙе тип беләһегеҙ) янында орош булды. Ғуздар, ҡарлуҡтар һәм ҡимаҡтарға ҡаршы дүрт төрки ҡәүеме - бәджнәк, бәджнә, баджғард һәм нәүкәрдтәр берләшеп һуғышты. Һуңғылары еңелеүгә дусар булғас, Хазар өлкәһенә сигенергә мәжбүр булды. Һуңынан бәджнәктәр, баджғардтар Византияға ла йыш ҡына һөжүм итеп торҙо.

**ӘБҮ ЗӘИД ӘЛ БӘЛХИ (X быуаттың беренсе яртыһы):** Эске башджарҙарҙан Булғарға тиклем 25 көнлөк юл. Башджарҙар ике ҡәбиләгә бүленә, уларҙың береһе Ғуздар (ҡомандар иле) сигендә, булғарҙарға яҡын йәшәй. Ул 2000 кешенән хасил булып, үҙҙәренең урмандары менән шул тиклем яҡшы ҡурсаланған, хатта уларҙы бер кем дә баҫып ала алмай икән, тип һөйләйҙәр. Улар булғар ҡулы аҫтында йәшәй. Икенсе башджарҙар бәшәнәктәр менән сиктәш. Улар һәм бәшәнәктәр - төркиҙәр.

**ӘБҮ ХӘМИТ ӘЛ ҒАРНАТИ (XII быуат):** Илдәр буйлап сәйәхәт ҡылғанымда Күйәв ҡалаһына барып сыҡтым. Бында төркисә һөйләшкән, улар кеүек үк атырға маһир мәғриб кешеләре йәшәй ине. Был илдә уларҙы беджнәк тип атайҙар. Ҡайһы бер юлдаштарымды шунда ҡалдырып, был илдән өҫтәрәк ҡырҡ көн юллыҡ алыҫлыҡтағы башкирдтарға юлландым. Иҫәпһеҙ күп булған мәжүси ҡәүемдәр эргәһенән үтергә тура килде. Улар бейек ағастар һәм баҡсалар араһында йәшәй, бындай ҙур ағастарҙы минең бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ ине, ә уларҙың емештәре лә күренмәне. Унҡурийа иленә барып еттем, бында йәшәүсе халыҡты башкирд тип атайҙар. Төркиҙәр иленән сығып, франк иленә беренселәрҙән булып барып еткән ҡәүемдән улар, иҫәпһеҙ күптәр һәм бик ҡыйыуҙар.

**Ә хәҙер Урта быуаттарҙа киң мәғлүмәтле географ булып танылған мөхтәрәм ғәрәп ғалимы әл Иҙриси әйткәндәргә ҡолаҡ һалайыҡ.**

**ӘЛ ИҘРИСИ (XII быуат):** Мин үҙ заманымдағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донъя гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс" исемле китап яҙҙым. Басджирттар тураһында ла байтаҡ мәғлүмәт йыя алдым. Китабымда алтынсы климаттың етенсе секцияһында Хазар диңгеҙенең бер өлөшө, эске һәм тышҡы басджирт илдәренең территорияһы һәм уларға төньяҡтан сиктәш булған Аскутийа иле ерҙәре тураһында бәйән ителә. Алла ярҙамы менән беҙгә тиклем яҙылған китаптарҙан ошо илдәрҙең ябай һәм билдәле кешеләре тураһында өйрәнеп белдек.

Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер көсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон ҡуртаҡ. Басджирттар булғарҙар арьяғында гуз иле сиктәренә яҡын йәшәүсе ике ҡәбиләгә бүленә. Уларҙың ғәскәрендә ике мең тирәһе яугир бар. Урман араларына инеп боҫһа, уларҙы сиктәш йәшәгәндерҙең береһе лә таба алмай. Улар тәүәккәл һәм көслөләр. Басджирт халҡы бәджнәктәргә сиктәш. Басджирт ерҙәре Һаҫыҡ ергә (Себер һаҙлыҡтарына) тиклем йәйрәп ята. Тышҡы басджирт ере көнсығышҡа табан шулай уҡ Һаҫыҡ ергә тиклем етә.

**Хөрмәтле географ әфәнде! Беҙҙең замандың зыялылары араһында башҡорттарҙың ҡалалары булмаған, улар цивилизацияһыҙ күсмә дала халҡы ғына булған икән, тип фекерләүселәр бар. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

**ӘЛ ИҘРИСИ:** Тышҡы басджирттар иленә Ҡаруҡийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был илдәр уңдырышлы, мул үҫемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм еренә, Шаш иленә һәм ғуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ көсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй.

Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан.

**НИЯЗ МӘЖИТОВ (тарихсы, башҡорт академигы):** Ҡалалар тиҙ генә барлыҡҡа килмәй, шуның өсөн әл Иҙриси һәм уның информаторҙары һүрәтләгән башҡорт ҡалаларының оҙайлы тәү тарихы V-VIII быуаттарға, бәлки, унан да әүәлерәк ваҡыттарға барып тоташалыр. Ҡалалары булыу факты башҡорттарҙың башында билдәле хандар торған үҙ дәүләтселеген, властың нәҫел буйынса тапшырылыуын раҫлай.

**ӘЛ ИҘРИСИ:** Эйе, мәҫәлән, Нәмджан ҡалаһы менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә ине. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә.

**НИЯЗ МӘЖИТОВ:** Баш ҡалабыҙ үҙәгендә Өфө-II тип исемләнгән боронғо ҡаласыҡ тирәһендә ҙур ҡала булып, уның IV-V быуаттарҙан XVI быуат баштарына тиклем тарихи-географик сығанаҡтарҙа телгә алынған Башҡорт ҡалаһы икәнлегенә шик юҡ. Баш ҡалабыҙҙың боронғолоғо тураһында төрлө быуатта, төрлө илдәрҙә йәшәгән ғалимдар бер үк фекерҙе хуплап торғанда, иң тәүҙә беҙ, Башҡортостан ғалимдары быны танырға һәм халҡыбыҙға еткерергә тейешбеҙ. Икенсенән, боронғо Өфөнө ентекле өйрәнеү, киләсәк быуындар өсөн уны һаҡлап ҡалыу бурысы ла беҙҙең намыҫта. Ғалим булараҡ, шуны ғына әйтә алам : Өфө-II ҡаласығының боронғо Башҡорт ҡалаһы икәнен иҫбатлар өсөн беҙҙә Ҡаҙандың мең йыллығын иҫбатлауға ҡарағанда ун тапҡырға күберәк, тағы ла төплөрәк, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр һәм материалдар бар.

(Дауамы 6-7-се биттәрҙә).

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Полиартрит



Ҡара торманы ит турағыстан үткәреп, быяла банкаға һутын һығырға, ярты стакан бал, ҡалаҡ ярым тоҙ һәм 150 грамм араҡы ҡойоп, яҡшылап болғатырға. Ошо ҡатнашманы төнгөлөккә ауыртҡан урынға һылап, йылы шәл менән бәйләргә. Дауалау курсын ай кәмей барған көндәрҙә үткәреү мотлаҡ.

### Ауыҙҙан еҫ килһә

Әле генә ҡайнап сыҡҡан бер стакан һыуға 1-2 балғалаҡ аҡ әрем үләне һалып, 20 минут тирәһе төнәтәһең, һөҙәһең һәм әҙ генә һыуытып, көнөнә 4-6 мәртәбә ауыҙҙы сайҡатаһың. Аҡ әрем урынына бөтнөктө файҙаланырға ла була.

### Ҡолаҡ шаулаһа

Байтаҡ кеше ҡолаҡ шаулауы менән яфалана. Ә унан ҡотолоу юлы ябай ғына: тауышлы бүлмәләргә инмәҫкә; йоҡларға ятыр алдынан аҡҡан һыу тауышын тыңларға (яҙмалар етерлек хәҙер); душ аҫтында йыуынырға; һис юғы көнөнә бер тапҡыр йәшелсә йәки емеш һуты эсеп ғәҙәтләнергә.

### Ҡан баҫымы түбән булһа

Бер ҡалаҡ шайтан таяғы япрағын 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә, һыуынғас, һығырға һәм көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Ҡан тамыры тараймаһын өсөн

2 баш һарымһаҡты таҙартып турап, 2 стакан таҙартылмаған үҫемлек майына һалырға, болғатырға, һыуыҡкыста һаҡларға. Ҡулланыр алдынан бер балғалаҡ майға бер балғалаҡ яңы ғына һығылған лимон һуты ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда ярты стакан алда эсергә.

### Йүкә ағасы күмере

Күп ашағандан һуң сәләмәт кешенең дә эсенең уң яғы ауыртып китә. Был бауыр сирен аңлата. Ошо мәлдә йүкә ағасы күмерен порошок итеп төйөргә һәм ярты балғалаҡ самаһы йоторға кәрәк. Ул тәндәге барлыҡ ағыулы матдәләрҙе ҡыуып сығара. Бер ай дауамында йоҡлар алдынан ҡулланырға.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

*✓ Миңә "Девону луғат әт турк" тип аталған төрки ҡәүемдәре телдәренең һүҙлеген төҙөү насип булды. Башҡорттар тураһында ла хәбәрҙар булдым. Улар - төп һәм беренсел булған 20 төрки ҡәүеменең береһе.*

*ВИРТУАЛЬ ҠОР*

# МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ,

## йәки Яҙып ҡалдырылған тарихыбыҙҙы ынйы бөртөгөләй йыйыу фарыз

**(Дауамы. Башы 5-се биттә).**

**▸ Әңгәмәбеҙҙә боронғо башҡорттар тураһында һүҙ барғас, халҡыбыҙ тарихы буйынса үтә ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ҡарашын 1852-1855 йылдарҙа "Башҡорт-мишәр ғәскәрен тарихи һәм статистик яҡтан байҡау" тип аталған документҡа яҙып ҡалдырған билдәһеҙ рус зыялыһын да тыңлап ҡарайыҡ.**

**АНОНИМ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Хәҙер Ырымбур крайында көн иткән төрлө ҡәүемдәр араһында башҡорттар үҙҙәре билгән ерҙәрҙә борон-борондан йәшәгән берҙән-бер халыҡ булып тора. Уларҙың Волга аръяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт Христос тыуғандан һуң X быуат башында уҡ билдәле булһа, бында осраған башҡа ҡәүемдәрҙең барыһы ла тарихи ҡомартҡыларҙа XVI быуат урталарынан, Грозныйҙың Ҡаҙанға яһаған походтарынан да иртәрәк иҫкә алынмай.

X быуат башҡорттары тураһында Хиванан (Джорджак) Волга булғарҙары батшаһына барышлай уларҙың ерҙәре аша үтеп сыҡҡан Моҡтадир хәлиф илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан аша хәбәрҙарбыҙ. Ул ошо халыҡтың атамаһы Башғырд булыуын билдәләй һәм, башҡорттарҙы төрки ҡәүемдәр иҫәбенә индереп, уларҙың иң көслөһө һәм уҫалы булыуы тураһында яҙа. Артабан ул, башҡорттарҙың мәжүси диндәре тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп, уларҙың ҡайһы берҙәренең мосолман булыуын да иҫкә ала...

**▸ Һеҙҙе, олуғ хәлиф Әл Моҡтадир тарафынан Булғар ханы Алмышҡа 921 йылда ебәрелгән илселек кәтибе Әхмәт ибн Фаҙланды, ошо дәүерҙән бирле мең йылдан артыҡ ваҡыт үтеүенә ҡарамаҫтан, белмәгән башҡорт һирәктер. Һеҙҙең юлъяҙмағыҙҙы күп ғалимдар уҡып тикшерҙе, ә үҙен Көҙән башҡорто тип атаған арҙаҡлы затыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди ошо хеҙмәт буйынса Берлинда докторлыҡ диссертацияһы яҡланы. Һеҙ үҙ күҙҙәрегеҙ менән күргән һәм башҡаларҙан һорашып белгән башҡорттарҙан ни эшләп хәүефләндегеҙ һуң?**

**ӘХМӘТ ИБН ФАҘЛАН (922 йыл):** Беҙгә "Башғырдтарҙан ҡурҡығыҙ!" тинеләр. Уғыҙ урҙаһынан китеп, Яғынды йылғаһына еткәс, каруанды аръяҡҡа турһыҡтар өҫтөндә сығарыр алдынан, башғырдтарҙың һөжүменә эләкмәҫ өсөн, һағауылдарҙың бер өлөшөн йылға аша алдан сығарып, һаҡлыҡ сараларын күрҙек. Джайих йылғаһы аша сыҡҡас, башғырд тигән ошо төрөк ҡәүеменең илендә булдыҡ. Беҙ уларҙан хәтәр ҡурҡтыҡ, сөнки улар төрөктәрҙең иң яманы һәм ҡыйыуы, шулай уҡ кеше үлтереүҙә аяуһыҙы; шулай, әгәр бер кеше дошманын осратһа, уның башын өҙә, башты үҙе менән ала һәм кәүҙәһен үлтергән урында ҡалдыра.

**▸ Замандаштарыбыҙға Әхмәт ибн Фаҙландың башҡорттарҙың ҡайһы бер инаныстары тураһында яҙып ҡалдырыуы бик ҡәҙерле. Шул уҡ сыңрау торна тураһындағы риүәйәт бынан мең йыл элек уҡ башҡорттарҙа боронғолар һүҙе булып, торна бөгөн дә изге ҡоштар иҫәбендә йөрөй...**

**ӘХМӘТ ИБН ФАҘЛАН:** Эйе, әйткәндәрегеҙ хаҡ. Беҙ башҡорттарҙан торналарға табыныусы бер таифә күрҙек. Улар миңә шулай аңлатты: үҙҙәренә дошман булған бер ҡәүем менән һуғыш алып барғанда дошмандары уларҙы еңелеүгә дусар итә. Шул саҡта дошмандарының артында торналар ҡысҡыра башлаған, ә улары ҡурҡыуға төшөп, инде еңдем тигәндә, үҙҙәре еңелә. Ошо арҡала улар торналарҙы ололайҙар һәм шулай тиҙәр: "Быларҙы беҙҙең раббыларыбыҙ ебәрҙе, сөнки улар дошмандарыбыҙҙы ҡыйратты".

**БИЛДӘҺЕҘ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Вәлиди әфәнде әйткәнсә, ибн Фаҙландан һуң башҡорттар һәм Башҡортостан XIII быуатта Көнбайыш Европанан Урта Азияға бөйөк монгол хандарына Папа илселәре сифатында килеп йөрөгән католик миссионерҙар яҙмаларында телгә алына. Уларҙың береһе, Плано Карпини, Половецтар (Ҡыпсаҡ) ере тураһында бәйән итеп, уның төньяҡтан "башҡорттар иле, венгрҙарҙың ватаны менән" сиктәш булыуы тураһында әйтә. Икенсеһе, Руисбрек (Рубрук), Башҡортостандың Волга менән Урал араһында, Волга булғарҙары еренә күрше булыуын иҫкә ала. Шулай уҡ ул Паскатир кешеләре "венгр телендә һөйләшә", тип билдәләй.

**▸ Ысынлап та, тарих фәнендә Дунай тамағында йәшәгән Мадъярстан башҡорттары тураһында мәғлүмәт байтаҡ. Ҡасандыр мадъяр һәм башҡорттарҙың аралашҡанда бер-береһен еңел аңлай алыуы хаҡында ла яҙыусылар бар...**

**БИЛДӘҺЕҘ РУС ТАРИХСЫҺЫ:** Башҡорттарҙың венгрҙар менән оҡшашлығы тураһында иҫкә алынған миссионерҙар тарафынан әйтелгәндәр хәҙер ошо хаҡтағы күп тикшеренеүҙәрҙән һуң аҙ ғына булһа ла шик тыуҙырмай. Былары ла, тегеләре лә бер үк боронғо Урал ҡәбиләһенән килеп сыҡҡан. Хәҙерге заман этнографтары аңлатыуынса, был ҡәбилә тәү тормош дәүере ҡәбиләһе булып, бик боронғо замандарҙа уның нигеҙендә фин, монгол һәм төрки ҡәбиләләре, ә унан да һуңыраҡ бөтә хәҙерге фин-татар халыҡтары тип аталып йөрөлгәндәре барлыҡҡа килгән. Ул Урал ҡәбиләһе тип аталған, сөнки Урал тауҙары уның тәү төйәге итеп һаналған... Ҡәбиләнең үҙ Ватаны булған тауҙарҙа, Көньяҡ Урал һырттарында тороп ҡалған өлөшө иң кәмендә X быуаттан алып хәҙерге ваҡытҡа тиклем башҡорттар тип аталып йөрөүсе халыҡты барлыҡҡа килтергән...

**ӘБҮ ХӘМИТ ӘЛ АНДАЛУЗИ (XII быуат):** Мин Мадъярстан башҡорттарын яҡындан беләм инем, улар араһында байтаҡ йылдар йәшәнем. Ике улым башҡорт ҡыҙҙарына өйләнде, уларҙан ейәндәрем дә булды. 1135 йылда Итил болғарҙарына сәйәхәт иткән саҡта башҡорттарға ла барҙым. Улар мәрхүмдәрҙе оҙон итеп ҡаҙылған ҡәберҙәргә күмә, 1160 йылда Анатолиялағы Конья ҡалаһы янында Дауыт ибн Ғәли исемле башҡортто күреп һөйләшкән саҡта ул да ошоно дөрөҫләне. 1158 йылда беҙ Гур Керман тип йөрөткән Киевҡа, унан Итилдәге Саҡсын ҡалаһына, Хорезм юлы менән Бағдадҡа һәм Һижазға килдем, хаж ҡылдым. Дунай мадъярҙары башҡорттар менән бер үк ҡәүемдән, уларҙың королен беҙ "башҡорт падишаһы", тип атайбыҙ.

**ИБН СӘЙЕТ ӘЛ МӘҒРИБИ (XIII быуат):** Дунайҙың көнсығышында йәшәгән мадъярҙарҙы һунғар, тип тә атайҙар. Улар ошо уҡ йылғаның көньяғында ерләшкән мосолман башҡорттар менән ҡәрҙәш ҡәүем. Һунғарҙар пайтәхете Торобтыуа тип аталһа, мосолман башҡорттарҙың баш ҡалаһы Ҡорат исемле. Уларҙы бер төркмән фәҡихы (дин ғалимы) мосолманлыҡҡа йөгөндөргән.

**ЯҠУТ ӘЛ ХАМАУИ (XIII быуат):** Миңә Халебҡа уҡырға килгән Мадъярстан башҡорттарының берәүһе менән һөйләшергә тура килде. Уның әйтеүенсә, ундағы мосолман башҡорттар барыһы ла хәнәфи мәҙһәбенә ҡарай, имеш. Уларҙы мосолманлыҡҡа бик борон заманда Болғар мәмләкәтенән килгән ете кеше өйрәткән. Ул был риүәйәтте атай-олатайҙарынан ишеткән. Дунай башҡорттары 30-ға тиклем ҡәрйә тәшкил итеп йәшәй. Уларҙың һәр береһе ҡала хәтле ҙур, тик Мадъяр падишаһтары, башҡорттарҙың күтәрелешенән ҡурҡып, ҡәлғә төҙөргә рөхсәт итмәй икән. Телдәре лә инде төрксә түгел, мадъярса булып бөткән, ҡиәфәттәре лә европаса, имеш. Ғәскәр сифатында мадъяр короле хеҙмәтендә мосолман булмаған ҡәүемдәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашалар; һаҡалдарын ҡыралар, бәғзеләре Ислам ғилемдәрен өйрәнеп фәҡих булыу өсөн Халебҡа килә икән.

**▸ Хөрмәтле тарихсыларыбыҙ, XX быуатта башҡорт халҡының тарихи этнографияһына нигеҙ һалған арҙаҡлы рус ғалимы Сергей Руденконың бик нигеҙле фекерҙәрен дә иғтибарға алыу фарыздыр.**

**СЕРГЕЙ РУДЕНКО:** Этник яҡтан боронғо башҡорттарҙы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш территорияһы буйынса Геродоттың тиссагеттары, ә уның көньяҡ һәм көнсығыш яғында савроматтар һәм иирктар менән бәйләү мөмкин, тип иҫәпләйем. Шулай ҙа беҙҙең эраның I мең йыллығының беренсе быуаттарынан ғына башҡорттарҙы көнкүреше дала яғында күсмә малсылыҡ менән ҡуша алып барылған һунарсылыҡ, таулы һәм урманлы тарафта - өҫтөн торған һунар итеү һәм ҡортсолоҡ шөғөлдәре, билдәле кимәлдә ер эшкәртеү менән ҡуша барған ултыраҡ малсылыҡ менән бәйле берҙәм ҡәбиләләр төркөмө, тип ҡарап була.

Башҡорттарҙың ҡатмарлы тарихи үткәне, бигерәк тә халыҡтарҙың бөйөк күсеше тип аталған дәүерҙән башлап, ниндәйҙер кимәлдә уларҙың физик тибында, шулай уҡ телендә һәм көнкүрешендә сағылыш тапмай ҡалмаған. Әммә төньяҡ фин-уғыр ҡәбиләләре менән бәйләнешкә инеү ҙә, Башҡортостан территорияһына һундарҙың, һуңынан татар-монгол, ҡаҙаҡ ҡәбиләләренең үтеп инеүе лә, ҡалмыҡтар менән үҙ-ара бәйләнеш тә, һәм, ахырҙа, һуңғы осорҙа көнбайыштан Ҡаҙан татарҙарының, мишәр кеүек халыҡтарҙың үтеп инеүе лә башҡорттарҙың физик тибын да, телен дә, көнкүрешен дә тамырҙан үҙгәртә алмаған.

**▸ Боронғо башҡорттарҙың теле тураһында ниҙәр әйтер инегеҙ?**

**СЕРГЕЙ РУДЕНКО:** Моғайын, ошо заманда уҡ Башҡортостан халҡының күпселеге аралашҡан тел әлегә беҙгә билдәле булмаған урындағы телдәрҙе ассимиляциялаған боронғо башҡорт теле булғандыр. Уларҙың үҙенсәлектәрен башҡорт телен күрше халыҡтарҙың телдәре менән тәрәндән сағыштырып, лингвистик тикшереү юлы аша ғына асыҡлап буласаҡ. Башҡорт халҡы составына ингән ҡәбиләләргә хас диалекттар, урындағы һөйләштәр булыуына ҡарамаҫтан, халыҡтың берҙәм һәм уртаҡ теле был диалекттарҙан өҫтөнлөк алып, уларҙы үҙенә бойһондорорға тейеш була. Бынан башҡа башҡорттар халыҡ булып йәшәй алмаҫ ине. Башҡорт теле, башлыса үҙенең элекке замандарҙан урынлашҡан грамматик төҙөлөшөн һаҡлап ҡалып, һүҙлек фонды яғынан байый барған.

**МӘХМҮТ ҠАШҒАРИ (XI быуат):** Аллаһы Тәғәләнең тәҡдире һәм мәрхәмәте менән миңә "Девону луғат әт турк" тип аталған төрки ҡәүемдәре телдәренең һүҙлеген төҙөү насип булды. Төрки телле халыҡтарҙы бик ихлас һәм ентекләп өйрәндем. Башҡорттар тураһында ла хәбәрҙар булдым. Улар - төп һәм беренсел булған 20 төрки ҡәүеменең береһе. Башҡорт теле ҡырғыҙ, ҡыфджаҡ, уғыҙ, тухси, яғма һәм башҡа төрки ҡәүемдәренең теленә яҡын. Башҡорт һөйләше төрксәнең йемек (кимәк-ҡыпсаҡ) һөйләше лә ингән тел төркөмөнә ҡарай.

**ФИРҘӘҮЕС ХИСАМИТДИНОВА (филология докторы):** Беҙҙең эраға тик-



*✓ Күп кенә халыҡтарҙың үҙҙәренең тәүсығанағы итеп ошо төбәкте күрергә тырышыуы ла юҡҡа ғына түгел. Сөнки бында тере саҡтарында уҡ Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған суфыйҙар, әүлиәләр ерләнгән.*





**"Киске Өфө"нөң тәүге һаны II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәндән һуң донъя күрҙе. Һәм, күп һанлы уҡыусыларыбыҙ фекеренсә, ҡоролтайҙа күтәрелгән милләтебеҙ проблемалары, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ниндәйҙер кимәлдә ошо гәзиттә сағылыш тапты. Гәзит журналистары бындай типтағы сығыштарҙы "Милли идея эҙләйбеҙ" тип атап, ошоғаса туған телебеҙҙәге баҫмаларға әллә ни илтифат итеп бармаған баш ҡалабыҙҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙҙе гәзит янына туплауға өлгәште. Шулай итеп, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфөнөң тәүге башҡортса баҫмаһы тик ошо йүнәлештә үҙ эшен башлап, ҡала гәзите генә түгел, баш ҡала гәзите статусын яулаbы. Һеҙҙең иғтибарға билдәле шәхестәрҙең 2004 йылдан алып гәзиттең "Диалог", "Монолог", "Түңәрәк ҡор" рубрикаларында баҫылып килгән милләтебеҙ тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәге, рухи һәм дини булмышы, менталитеты, сәнғәте һәм мәҙәниәте хаҡындағы фекерҙәренән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

# ХАЛҠЫБЫҘ

## беҙ унан йылынабыҙ,

### БЕҘ - БӘЙҒӘМБӘРЛЕ МИЛЛӘТ

**Илшат НАСЫРОВ ("Суфыйсылыҡ һуҡмаҡтары, йәки Батырлыҡҡа илтер рухилыҡ..." 2008, 22-се һан):**

- Зәйнулла ишан Рәсүлев Аллаһы Тәғәлә асылын белеүҙең иң юғары рухи бейеклегенә етеп, "Ҡотоп Заман" титулына лайыҡ булған. Был исем уның Хоҙай тарафынан һайлап алынған вәли зат (Хоҙайға яҡын) булыуын аңлатҡан. Бындай титуллы суфыйға мосолман донъяһында контроллек итеү хоҡуғы бирелгән. Зәйнулла ишан бар Рәсәй мосолмандары мөхитендә оло абруй ҡаҙанған...

Башҡорттар үтә дини халыҡ булмаған, тип әйтәләр. Әммә халҡыбыҙҙа борон-борондан уҡ инсафлыҡ, ихласлыҡ вә ихсанлыҡ (изгелек) хөрмәт ителгән. Былар - Ислам талаптары. Үзбәкстандан килгән бер танышым: "Башҡорттар мәсеткә йөрөп, биш тапҡыр намаҙ уҡымаһа ла, мосолманлыҡ, Аллаһтың барлығына ышаныу уларҙың күңелендә йәшәй. Халҡығыҙ мосолманлыҡ йолаларын формаль рәүештә атҡарған ҡайһы бер ҡәүемдәрҙән үҙенең ихласлығы менән күпкә динлерәк", - тип әйткәйне. Башҡорт иман һәм ихсандан ваз кисмәһә, Исламдан айырылмаҫ.

**Нуретдин ИГЕБАЕВ ("Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ..." 2008, 36-сы һан):**

- Халыҡ, милләт үҙ-үҙен күтәрергә өйрәнһен өсөн Аллаһы Тәғәлә уға арҙаҡлы шәхестәр, дин әһелдәре, аҡыл эйәләре, сәсәндәр, шағирҙар булыр өлөшлө бәндәләрен ебәрә. Хоҙай уларҙы һәм халыҡты донъялыҡта ла, әхирәттә лә һынай. Әгәр ҙә халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылған заттар ер аҫтында ятҡан саҡта ла халҡы өсөн берҙәй үк ҡәҙерле булһа, уларҙың әруаҡы өсөн аяттар уҡылһа ғына, ул халыҡҡа Хаҡ Тәғәлә мәрхәмәт һәм сауап ебәрә. Ер аҫтында ятыусы Зәйнулла, Ғатаулла ишандарҙың, Мөжәүир хәҙрәттең изге һөйәктәре ана шундай мәрхәмәткә мохтаж. Ҡасандыр Аллаһы Тәғәлә хозурына олға-ша алған ошондай заттарыбыҙға аяттар уҡып, уларҙың изге рухына ҡорбандар салып, дин юлына йөҙ бороп, иң тәүҙә уларҙың рәхмәтенә өлгәшә алһаҡ ҡына, беҙҙең киләсәгебеҙ булаcаҡ.

Беҙ "Рәхмәт" һүҙенә үтә ябайлаштырып ҡарайбыҙ. Белгегеҙ килһә, "Рәхмәт" фатихаға торошло мөғжизәле, доғаға тиң һүҙ ул. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ был донъяла "Рәхмәт" һүҙе өсөн йәшәйбеҙ. Бында рәхмәтте яулаған кеше хаҡында ғына һүҙ бармай, был һүҙҙе ваҡытында әйтә белеү ҙә бәндәне мең бәләләрҙән ҡотҡара. "Рәхмәт"те яулап ала белергә лә кәрәк. Был һүҙ ваҡытында һәм урынлы әйтелергә тейеш. Уны урынлы-урынһыҙ ҡулланыуҙың да, ваҡытында әйтә белмәүҙең дә зыяны бар. Сөнки барыһын да Аллаһы Тәғәлә күреп тора, "рәхмәт"һеҙгә яҙаһын бирә тора.

Башҡорттар Урал төбәгендәге иң рәхмәтле халыҡтыр. Күпме халыҡ вәкилдәрен сукындырыуҙан, крепостнойлыҡ ҡоллоғона төшөүҙән, аслыҡ-яланғаслыҡтан, ҡырылып бөтөүҙән йолоп ҡалған, үҙ еребеҙгә һыйҙырған милләт беҙ. Әммә "Рәхмәт" һүҙенән бигерәк, күберәк әр һүҙҙәре, беҙҙе кәмһетергә тырышыусыларҙың нахаҡ яҡмаларын, уйҙырма фәлсәфәһен дә ишетергә тура килә. Әлбиттә, "Рәхмәт"те һорап алмайҙар, әммә рәхмәтле булмағандар барыбер Аллаһы Тәғәлә хөкөмөндә. Рәхмәтле булмаған хет мең тапҡыр хажға барһын, шәриғәт ҡанундарын теүәл үтәп йәшәһен, уның был ғәмәлдәре барыбер ҙә монафиҡлыҡ булып һаналасаҡ.

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы һәр ауылда, һәр тауында тиерлек изге әүлиәләр зыяраттары бар. Беҙ уларға барып, аят уҡыу ғына түгел, күптәренең урындарын да белеп бөтмәйбеҙ әле. Был беҙҙең оло гонаһҡа тиң етешһеҙлегебеҙ. Кемдәр һуң улар әүлиәләр? Әүлиәләр - улар үҙҙәре йәшәгән дәүерендә Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә лайыҡ булған изге заттар. Был рәхмәткә улар Аллаһы Тәғәләгә һәм үҙ ырыуына, халҡына йәнен фиҙа ҡылыуы менән ирешкән. Һуңғы ваҡытта төрлө яҡтарҙан, бигерәк тә Урта Азиянан һәм Кавказдан ошо әүлиә ҡәберҙәренә йөрөүселәр күбәйеп китте. Изге әүлиәләребеҙҙең Аллаһы Тәғәлә алдында оло рәхмәткә ирешә алыуы хаҡында ситтәр белә, сауабын алып ҡалыр өсөн улар ер аяғы ер башынан килеп, ҡәберҙәрен табып, аят уҡый, ясин сыға. Ә беҙ, ошо ерҙең хужаһы булараҡ, был хаҡта хатта белмәйбеҙ ҙә. Әүлиә ҡәберҙәрен тапап йөрөйбөҙ, таштарын ҡутарып, өй нигеҙенә һалабыҙ, һыйыр аҙбарҙары тәҙөйбөҙ. Ундай нигеҙгә ҡот бер ваҡытта ла ҡунмай. Бының өсөн беҙгә Аллаһы Тәғәлә рәхмәтле булмаясаҡ бит. Минең уйымса, нәҡ ошо көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе башҡорттарға башҡорт милләте алдында ғына түгел, барлыҡ мосолман донъяһы, кешелек алдында оло миссия һалынған. Һуңғы ваҡытта күп кенә халыҡтарҙың үҙҙәренең тәүсығанағы итеп ошо төбәкте күрергә тырышыуы ла юҡҡа ғына түгел. Сөнки бында тере саҡтарында уҡ Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған суфыйҙар, әүлиәләр ерләнгән. Был ерҙә йәшәү, ғүмер итеү - өҫтөнлөк түгел, оло яуаплылыҡ. Арҡайым ҡаласығы ла юҡҡа ғына ошонда түгел, юҡҡа ғына "Урал батыр" эпосы ла ошо төбәктә һаҡланып яҙып алынмаған. Әгәр ҙә изге әүлиәләребеҙҙең һөйәктәре һаҡланған ерҙе башҡаларға һатһаҡ, уны ситтәргә мыҫҡыл итергә бирһәк, Аллаһы Тәғәлә бының өсөн беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, беҙҙең дә, кешелектең дә һәләкәте ошонан башланасаҡ. Был төбәктең ана шундай әһәмиәтҡә эйә булғанлығын башҡаларға аңлатыр өсөн иң тәүҙә үҙебеҙгә быны тәрән итеп аңларға һәм инанырға кәрәк. Ә инде инаныуҙың берҙән-бер һәм хаҡ юлы - дин юлы.

**Салауат ҒӘЛЛӘМОВ ("Милли фәлсәфә нигеҙе диндәме, әллә мифологиялами?". 2004, 47-се һан):**

- Беҙҙең милләт диндән дә иртәрәк барлыҡҡа килгән һәм, әйтәйек, Ислам дине йоғонтоһондағы тормош халҡыбыҙ ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн генә тәшкил итә. Теләһә ниндәй халыҡтың милләт булып ойошҡанлығын күрһәтеүсе билдә - тарихтың теләһә ниндәй осрағында тиҙ генә ғәскәр тәҙөй алыуы. Ғәскәр - ул бер үк ваҡытта дәүләтселек күрһәткесе лә булып тора. Башҡорттар Рәсәй өсөн кәрәк саҡта үҙаллы ғәскәр туплап, күп тапҡырҙар хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан, һуңғылары - XX быуат башында Әхмәтзәки Вәлиди төҙөгән Башҡорт ғәскәре һәм Бөйөк Ватан һуғышында барлыҡҡа килгән Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы. Ғәскәр тәҙөй алыу дәүләт кимәлендәге аңдың үсешеп етеүе хаҡында ла һөйләй бит.

Байтаҡ дәүләт ҡоролоштарынан айырмалы рәүештә, дәүләтселегебеҙ милләтебеҙҙең ҡоролошонда уҡ - ирекле ырыуҙарҙың конфедерацияһы принцибында - йәшәп килгән. Шундай миҫал килтереп үтергә кәрәк - башҡорттар монгол ғәскәренә ҡаршы ун дүрт йыл һуғыша, байтаҡ яуҙарҙа еңеүгә ирешә. Монголдар ата-бабаларыбыҙ менән килешеү төҙөргә мәжбүр була. Дәүләтселегебеҙ булмаһа, тырым-тырағай ырыуҙар үҙҙәрен яҡлай алмаҫтар ине. Миҫал өсөн әйтеп үтәйем - бөйөк империяны тәшкил иткән ҡытайҙар монголдар тарафынан ун ике йылда, Урта Азия - алты йылда, рус кенәзлектәренең төп өлөшө өс йылда баҫып алына.

Рус батшалығы менән шул уҡ дәүләтселегебеҙҙе яҡлау өсөн дә һуғышҡанбыҙ. Иван Грозныйҙың аҫабалыҡ хоҡуғы биреүе лә Рәсәйҙең беҙҙе айырым милләт һәм дәүләт итеп таныуынан килә. Аҫабалыҡ башҡа берәүгә лә, шул иҫәптән рустарҙың үҙҙәренә лә бирелмәгән хатта. Тап шул йылдарҙа башҡорттар үҙ иҫәбенә, үҙҙәренән йыйылған һалым иҫәбенә ғәскәр туплаған һәм уны тотҡан. Үҙ иҫәбенә үҙ ғәскәрен тик үҙ дәүләтселеге булған ил генә тота ала.

### ТӘБИҒӘТТӘЙ КҮРКӘМ АСЫЛЫБЫҘ

**Хәлил БАРЛЫБАЕВ ("Төп һыҙатыбыҙ - ихласлыҡ, фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ, эскерһеҙлек, алсаҡлыҡ..." 2009, 42-се һан):**

Башҡорттоң идеяға тоғролоҡ (диненә, тыуған иленә һәм халҡына) һыҙатын нисек аңлатырға була һуң? Өҫтәүенә, башҡорттар суҡындырыуҙы ҡабул итмәгән, һуғыш мәлдәрендә улар араһында һатлыҡ йәндәр аҙ булған. Башҡорттар күндәм, бер үк ваҡытта фиҙаҡәр һәм хәрби тормошта ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ өлгөһө күрһәтеүгә һәләтле.

Былдарҙың барыһын да яугирлеккә бәйле дәлилдәр менән генә аңлатып буламы? Өлөшләтә генә булалыр. Бында халҡыбыҙҙың рухи-романтик булмышынан хасил булған алсаҡлыҡ, әҙәплелек һыҙаттары, бай күңел донъяһы, эске мәҙәниәте хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Былдарҙың нигеҙендә, әлбиттә, ихласлыҡ ята. Беҙҙең халыҡтың менталитетының төп һыҙаты ла ошо ихласлыҡта бит, йәғни башҡа барлыҡ күркәм һәм төрлө ситуациялар күҙлегенән етешһеҙлек булып күренгән һыҙаттарыбыҙ ҙа ошо ихласлыҡтан килә. Әммә ихласлыҡ - беҙҙең халыҡтың иң ҙур көскә эйә һыҙаты.

Ә инде ябайлыҡ, түҙемлелек, йыуашлыҡ, баһымсаҡлыҡ, һәлмәклек, күндәмлек, үпкәселлекте беҙҙең менталитеттың айырым һыҙаттары итеп түгел, ә айырым кешеләрҙең етешһеҙ яҡтары итеп кенә ҡарау кәрәктер. Был һыҙаттар башҡорттарға ғына хас түгел. Бер тормош ситуацияһынан (ауылдан ҡалаға) икенсеһенә күскән ваҡытта төрлө хәл-ваҡиғаларҙа төрлө милләт вәкилдәрендә күрергә була бындай һыҙаттарҙы. Күп осраҡта кеше яңы шарттарға адаптация осорон үткәндән һуң бындай һыҙаттар юҡҡа сыға.

Беҙгә үҙебеҙҙең халыҡтың менталитетын өйрәнергә кәрәк, әлбиттә. Нимә менән ғорурланырға, нимәнән ҡотолорға кәрәк икәнде лә билдәләр өсөн кәрәк бындай фекер алышыуҙар. Беҙҙең күптәребеҙгә, мәҫәлән, дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ, тәкәбберлек, көнлә-



# ҠОЯШ КЕҮЕК,

## нур һәм көс алабыҙ…

шеү, биргән һүҙҙә тормау, эреләнеү, сабатаны түргә элеү кеүек бик күп халҡыбыҙ менталитетына хас булмаған, ҡайһылыр бер осорҙа ҡылыҡтарыбыҙға "йоҡҡан" сифаттарҙан да ҡотолорға кәрәк.

**Ноғман МУСИН ("Мәңгелек урман йәки Башҡорттар улар урман характерлы халыҡ…" 2006, 29-сы һан):**

- Тау-урман ерендә йәшәгән кеше - ул тәбиғәт балаһы. Ул киң күңелле, хуш күңелле, ситтән килгән әллә кемдәрҙе ҡосаҡына ала, ҡунаҡсыллыҡ күрһәтә. Сағыштырып ҡараһаң, башҡорттарҙы урман характерлы кешеләр тип тә атап була. Элек урман бөтә ерҙә лә булған һәм урмандарыбыҙҙың йәйләп ҡырҡылыуы, ҡола-яланға әүерелеүе милләттең характерында ла сағылыш таба кеүек. Тимәк, милләтебеҙҙе һаҡлау өсөн уның характерын ҡылыҡһырлаған урманын да һаҡларға кәрәк булып сыға. Шул уҡ ваҡытта урманды тик милләт кенә һаҡлай ала. Улар бер-береһенә шул тиклем бәйле. Тәбиғәт менән кеше араһындағы гармоник мөнәсәбәттең емерелеүе лә кеше күңеленең һайығыуынан, йәғни тәбиғәттең юҡҡа сыға барыуынан килә.

**Салауат КИЛДИН ("Киләсәктең аҫҡысы - үткәндә. Милләттәшебеҙ тарихтағы һәр еңеүебеҙҙе белһен". 2005, 11-се һан):**

- Беҙҙең киләсәгебеҙҙең аҫҡысы - халҡыбыҙҙың тарихында, үткәнендә. Халҡыбыҙҙың тарихы тәрән, ул 4-5 мең йыллыҡтарҙы тәшкил итә. Күп ғалимдарыбыҙ Ибн-Фаҙландан ары китә алмаһа ла, халҡыбыҙ уға тиклем үк ҡеүәтле һәм ҙур ил булып йәшәгән. Ошо меңәр йыл тәшкил иткән юлда халҡыбыҙ күпте кисергән, ҙур тарихи тәжрибә туплаған, ғөрөф-ғәҙәте бай, рухы көслө. Халыҡҡа ҡаршы эшләгән көстәр шуны онотторорға тырыша, инде нисә быуат тарихи аңыбыҙҙы юйырға ынтыла. Һәр халыҡтың көсө тамырында. Тамырҙарыбыҙҙы тергеҙергә кәрәк. Һәр бер милләттәшебеҙ тарихтағы һәр бер ЕҢЕҮЕБЕҘ хаҡында белергә тейеш, Шуға ҡарап рухын яңыртһын, ғорурлығын арттырһын!

Меҫкенлек психологияһын күңелебеҙҙән йолҡоп алып ташларға кәрәк. Бөтөн донъяны яулап алған монгол-татарҙарға 14 йыл буйына ҡаршы тора алған һәм еңелмәгән, уларҙы Урал менән Каспий араһынан үткәрмәй торған берҙән-бер халыҡ вариҫтары бит әле беҙ.

Үҙебеҙҙән һәм башҡаларҙан кәмселек, етешһеҙлек эҙләгәнсе, күберәк "Беҙгә нимә эшләргә кәрәк?" тигән һорауға яуап эҙләргә, уларҙы бойомға ашырыу кәрәк. Иң тәүҙә, йәштәребеҙҙе маҡсатлы йәшәргә өйрәтеү фарыз. Әйләнә-тирәбеҙҙә тырышҡан, маҡсатлы йәшәгән кешеләрҙе күрә һәм күрһәтә белеү журналистың төп шөғөлө булырға тейеш. Ә эскән, йүнһеҙ, маҡсатһыҙ, кәмһетелгән кеше хаҡында күпме генә яҙма, күпме генә һөйләмә, уның файҙаһы юҡ. Минеҫә, илауларға, меҫкенләнергә яратҡан, өмөтһөҙ, ялҡау, бөхәл кешеләрҙе телевидение һәм радио, гәзит һәм журнал тирәһенә яҡын ебәрергә ярамай. Күңелде төшөрә торған һүҙ - йоғошло сирҙән дә алама. Ялҡаулыҡ, меҫкенлек - кешенең үҙ-үҙен юҡ итеү программаһы.

**Сәйфулла ӘМИРОВ ("Милләтем, йөрәгеңде ас, бына мин килдем…" 2009, 24-се һан):**

- Беҙ бер-беребеҙгә һәм үҙебеҙҙә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә ҡараш, мөнәсәбәт буйынса бөгөн Европаның Швеция, Швейцария, Финляндия кеүек илдәре менән типә-тиңбеҙ. Эйе, беҙҙә сауҙагәргә хас өҙгөслөк, йолҡҡослоҡ, кеше алдау сифаттары юҡ, уның ҡарауы, беҙ башҡаларға оло сабырлыҡ менән ҡарай беләбеҙ.

Мин хәҙерге йәштәребеҙгә һоҡланып бөтә алмайым. Беҙ кредитҡа ун мең һум аҡса алырға ла баҙнатсылыҡ итмәгән быуын вәкилдәре. Ә бына беҙҙең балалар был йәһәттән бик тәүәккәл. Ҙур суммала кредит алырға баҙнатсылыҡ иткән кеше - ул киләсәгенә, тимәк, үҙ көсөнә ышаныусы кеше. Йәштәрҙә хәҙер ҡурҡыу тойғоһо юҡ һәм был сифат бик ҙур әһәмиәткә эйә. Милләт ошо юлды үтергә тейеш.

Аллаға шөкөр, ошондай ҡатмарлы трансформация ваҡытында милләтебеҙ үҙенең йөҙөн юғалтмай сығып килә. Беҙ ошо йәштәребеҙ арҡаһында яңы баҫҡысҡа күтәрелдек. Ауылда колхоз-совхоздар һаҡланмағандан ғына, кемдер ер һөрөп сәсмәгәндән генә милләтебеҙ юғалып ҡалмаясаҡ.

**Рудоль ӘҮСӘХОВ ("Беҙ - татар булып бөтмәгәндәр, башҡортлоҡтан китмәгәндәр…" 2010, 16-сы һан):**

- Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары беҙҙең, илештәрҙең, башҡортлоғона һәр ваҡыт көләмһерәберәк ҡараны һәм ҡарай. Улар был осраҡта иң тәүҙә тел айырымлығын төп фактор итеп ала. Миңә лә шулай әйткәндәре бар. Мин ундайҙарға: "Кемебеҙ күберәк башҡорт икән, әйҙә, башҡорт халҡының тарихын ниндәй кимәлдә белеүебеҙ менән, һис юғы, ҡурай уйнап ярышып ҡарайыҡ", - тием. Уларға ҡурайҙа уйнап күрһәтһәм, аптырайҙар. Бына шулай, Илеш, ғөмүмән, көнбайыш башҡорттарының үҙ асылынан ситләшеүенең төп сәбәптәренең береһе - әҙәби телдә һөйләшеүсе башҡорттар тарафынан үҙенеке итеп ҡабул ителмәүе лә.

### ТАРИХЫБЫҘ - КЕШЕЛЕК ЯРАЛҒАНДАН…

**Ринат ЙОСОПОВ ("Һөлдәләрҙең теле булмаһа ла, тарихҡа тел аҫҡысы улар…" 2010, 9-сы һан):**

- Һәр бер халыҡтың генетик мәғлүмәтен ҡыҙ-ҡатындар йөрөтһә лә, генетик популяция ирҙәр арҡаһында ҡеүәт йыя. Шул уҡ ваҡытта ирҙәр аша күскән иң көслө үҙенсәлекте, генетик мәғлүмәтте ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрендә алып ҡала. Тап ошо рәүешле көсәйеү арҡаһында беҙҙең башҡорт халҡында биш антропологик тип формалашҡан. Быны 1967 йылда Мәскәү антропологы Мария Степановна Акимова иҫбат итеп: "Башҡорт халҡының генетик фонды төбәктә иң көслөһө, сөнки улар үҙҙәренең ата-олаталарының, сарматтарҙың, савроматтарҙың, уғыҙҙарҙың, ҡыпсаҡтарҙың һәм башҡаларҙың генофондын үҙҙәрендә берләштергән", - тип белдерҙе. Беҙҙең халыҡтың милләт булараҡ көсө лә тап ошонда. Ундай үҙенсәлек төрҙәре беҙҙең ирҙәрҙә йәшәй, ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙа иһә асылда ике генә - Урал һәм боронғо Урта Азия тибы һаҡлана. Ә ирҙәребеҙҙә иһә, ошо ике типтан тыш, көньяҡ Себер, понтик, Алтай, Каспий, Алғы Азия һәм башҡа типтар йыш осрай. Типтарҙың төрлө-төрлө булыуы тоҡомдо көсәйтә, генофондты арттыра.

Аҙаҡҡы өс йөҙ йыл эсендә, бигерәк тә башҡорттарҙың ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төркмән халыҡтары менән элеккесә киң һәм даими аралашыу мөмкинлеге юҡҡа сыҡҡас, күберәген этник берәмек эсендә генә ҡан аралашыуы күҙәтелә. Шулай ҙа боронғо сарматтар, савроматтар йәшәгән ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар һаман да иң боронғо генетик кодты йөрөтөүселәр булып иҫәпләнә. Шул уҡ бөрйән, үҫәргән, түңгәүер ырыуҙары башҡорттары көньяҡ Европа расаһының понтик тибына ҡарай. Шулай уҡ ҡыпсаҡтар менән тамъяндар ҙа күберәген европеид расаһына ҡарай. Көньяҡ Себер тибы, йәғни монголоид расалылар беҙҙең халыҡҡа Алтын Урҙа заманында килеп ҡушылған.

Беҙҙең милләттә ырыуҙарҙың күплеге һәм уларҙың донъяның дүрт тарафы менән бәйле булыуы башҡорттоң этник тотороҡлоғон барлыҡҡа килтереүсе фактор ҙа булып тора. Башҡорт милләте донъялағы бик күп халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең иң көслө һәм күркәм сифаттарын үҙендә берләштерә алған. Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки милләт-ара никахлы ғаиләләрҙә ҡала шарттарында башҡорт позицияһы көслө түгел. Беҙҙең милләттең милләт эсендәге ырыу-ара никах потенциалы милләтебеҙгә яңы һулыш бирер ине.

**Йыһат СОЛТАНОВ ("Ҡайһы милләт боронғораҡ, уртаҡ дингә йәбешкәнеме, эпосы булғанымы?". 2005, 21-се һан):**

Башҡорттарҙың бик-бик борондан дәүләтселек ҡоролоштары булған. Әммә улар береһе лә, әлегәсә тарихтан билдәле булыуынса, "башҡорт" этнонимы менән аталмаған. Ни өсөн улай һуң? Эш шунда: дәүләт башына ниндәй хан йәки ҡаған килеп ултырһа, дәүләтселеккә уның ырыу атамаһы бирелгән. Миҫалға ҡыпсаҡтарҙың "Дәшт-е ҡыпсаҡ", ҡатайҙарҙың "Көҙән", үҫәргәндәрҙең "Сәр", табындарҙың "Табын" дәүләтселеген генә алайыҡ. Улар шулай төрлөсә аталһа ла, асылда, барыһы ла башҡорт дәүләттәре булған, сөнки башҡорт ырыуҙарынан торған. Башҡорттар хатта Ҡытай, Иран, Көнбайыш Европа, Скандинавия илдәрендәге дәүләттәрҙең нигеҙен һалыуҙа ҡатнашҡан. Ул дәүләттәр ғәмәлдә Әтилле бабабыҙ империяһының ярсыҡтары бит. Ә иң боронғо дәүерҙәге Шумер, Египет батшалыҡтары тарихына ҡағылып та тормайыҡ. Минең ҡарашымса, бөтөн яҡлап тикшереүемсә, тәрән инаныуымса, дәүләтселек башҡорт халҡының ижады ул, беренсе дәүләт төшөнсәһе беҙҙең ерлектә ята... Халҡыбыҙҙың ҡанында һәм аңында дәүләтселек рухы, тәжрибәһе булмаһа, Әхмәтзәки Вәлиди ҡыҫҡа ғына арала Башҡорт ғәскәре төҙөй алмаҫ ине. Ул - Рәсәйҙәге берҙән-бер милли ғәскәр туплай алмаҫ ине.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН ("Тарихты үҙгәртеп булмай, уны өйрәнеп, үҙеңде үҙгәртеп була…" 2006, 44-се һан ):**

- Салауат яуынан алып XX быуат баштарына тиклем башҡорттар тарих ихтыярына ҡуйылған, тинек. Йәғни ихтилалдар тынып ҡала, башҡорттарҙы ирекһеҙләгән кантон системаһы индерелә. Ошо мәлдә башҡорт донъяһында Зәйнулла ишан Рәсүлев атлы шәхес барлыҡҡа килә һәм уның Троицк ҡалаһында асылған мәҙрәсәһе суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тариҡәтен өйрәнеүгә ҡорола. Ихтилалдар тынып ҡалған, тиһәк тә, улар ошо тәриҡәтте өйрәнеүгә һәм башҡорттар араһында таратыуға күсерелеп, икенсе формала дауам итә. Азатлыҡҡа ынтылыу, донъяны аңлау һәм Аллаһы Тәғәләне халыҡҡа яҡынайтыу итеү булып дауам итә башҡорт ихтилалы. Һәм һуңынан ошо интеллектуаль, дини һәм рухи тупланманы Әхмәтзәки Вәлиди файҙалана. Тиҙ арала Башҡорт хәрәкәтенең интеллектуаль үҙәген төҙөй, башҡорт ғәскәр булдыра һәм башҡорт халҡына автономия яулай. Ҡыҫҡаһы, Әхмәтзәки Вәлиди өсөн интеллектуаль, дини һәм физик потенциал Троицк мәҙрәсәһе "тимерлегендә" әҙерләнә. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, мәҙрәсәлә уҡыған шәкерттәрҙең "Эске башҡорт автономияһын" Вәлиди тышҡа сығарып бойомға ашыра. Ошоларҙан сығып, Әхмәтзәки Вәлидиҙең төп идеологы итеп Зәйнулла Рәсүлевты атарға була. Беҙ бөгөн Башҡортостан Республикаһында йәшәүебеҙ менән дә иң тәүҙә Зәйнулла ишанға бурыслыбыҙ. Беҙ генә түгел, 1917 йылдан автономия яулаған Рәсәй составындағы башҡа халыҡтар ҙа бурыслы Зәйнулла ишанға һәм уның "Троицк" мәҙрәсәһенә. Киләсәктә Зәйнулла ишан Рәсүлев исеме Рәсәй кимәлендә лә үҙенең лайыҡлы урынын алыр, тип ышанабыҙ.

(Дауамы 10-11-се биттәрҙә).

✓ *Белемле, телдәрҙе һәм закондарҙы яҡшы белгән, иҡтисадта балыҡ кеүек йөҙгән, күп аҡса эшләй алған яңы башҡорт образын булдырыу зарурлығы тыуҙы хәҙер. Шундай образ тыуҙырғанда күптәр үҙ асылына ҡайтыр ине.*





(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Ғәзим ШАФИҠОВ ("Рәсәйгә ниңә ҡушылғанбыҙ? Атай-олатайҙарыбыҙ бик зирәк булған, киләсәкте алдан күргән..." 2006, 16-сы һан):**

- Башҡорт халҡы быуаттар буйына Рус дәүләтенең аяуһыҙ иҙеүенә ҡаршы баш күтәргән, ихтилал ҡуптарған, көрәшкән, ҡан ҡойған, шул уҡ ваҡытта ул дәүләттең үҙенә ситтән ҡурҡыныс янағанда иң беренселәрҙән булып уны һаҡлар өсөн атҡа атланған. 1774-1775 йылғы Салауат күтәрелешен генә алайыҡ. Батырҙарыбыҙ дарға аҫыла, Салауаттар мәңгелек каторгаға ебәрелә, ил ут эсендә яна һәм өс тиҫтәнән ашыу йыл да үтеп өлгөрмәй, Рус дәүләтенә ҡаршы яҫҡынған Наполеонға ҡаршы шул уҡ башҡорттар 28 полк яугирҙарын ебәрә. Тарихта тағы ла ниндәй халыҡ ошондай сифаты менән айырылып торғаны бар һуң? Ер йөҙөндә ундай тарих һәм ундай халыҡ юҡ! Минеңсә, башҡорттар, үҙ-ара ниндәй генә ҡаршы тороуҙар булыуға ҡарамаҫтан, асылда, халыҡтың халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу даирәмөхитен Рус батшалығы менән мөнәсәбәттә күргәндер. Икенсе яҡтан, тәрбиә, характер, антҡа тоғролоҡ кеүек төшөнсәләр ҙә сағылалыр был тоғролоҡта.

Шулай ҙа бында иң мөһим аңлатма барыбер ҙә тарихи хәтергә бәйлелер. Әйтәйек, башта әйткәнсә, халҡыбыҙ өсөн хәл иткес мәл - Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хан һуғышын алайыҡ. Әгәр ҙә шунда башҡорттар Туҡтамыш яғында һуғышҡан булһа, аҙаҡтан еңеүсе Аҡһаҡ Тимер башҡорттарҙы ла аямаҫ ине һәм халҡыбыҙ тап шул дәүерҙә тарих арбаһынан төшөп ҡалған булыр ине. Кем белә? Хәҙер инде 1812 йылда Наполеон еңде икән, ти... Тимәк, башҡорттарҙың Рус батшалығын яҡлап, ҡон-үсен эсенә йотоп, тешен ҡыҫып булһа ла атҡа атланыуы иң тәүҙә халыҡтың яҙмышын алдан ҡайғыртыуҙан, һаҡланыу ихтыяжынан килеп сыҡҡан бит. Был бәхәсһеҙ.

**Роза БУКАНОВА ("Дошмандан ҡурҡҡан ҡәлғә төҙөгән, ә башҡорттарға ундай ҡәлғәләр төҙөүҙең кәрәге булмаған..." 2009, 21-се һан):**

- Башҡортҡа ундай таш ҡәлғәләрҙең бер кәрәге лә булмаған. Аяуһыҙ киң ерҙәрҙе биләп йәшәгән халҡыбыҙ таш ҡәлғәләргә мохтажлыҡ кисермәгән. Ҡәлғә төҙөүҙең башында ҡурҡыу ята. Дошманымдан ҡасып ҡотолам, тип фекер йөрөткәндәр ҡәлғә төҙөргә тырыша. Европала тап ошо маҡсатта замок-ҡәлғәләр, рус дәүләте сиктәрендә күскенсе дала кешеләре һөжүменән һаҡлана торған пост-ҡәлғәләр ҡалҡып сыға. Башҡорт ерҙәренең урталығында ятҡан Өфө тарафтарында башҡорттарға ҡәлғә һалыу өсөн ихтыяж булмаған.

## БЕР АҘЫМ АЛҒА БАҪАМ ДА...

**Фәнзил ӘХМӘТШИН ("Башҡорт йөрәге уяныр, әгәр ҙә ул диненә, ғаиләһенә, зат-араһына ҡайтһа..." 2010, 17-се һан):**

- Тарихыбыҙ ни тиклем бай, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ ни тиклем сағыу, юғары зауыҡлы булмаһын, беҙ һан буйынса артмаһаҡ, Уралтауыбыҙҙы үҙебеҙҙән халыҡ менән тултырмаһаҡ, уны башҡалар яулаясаҡ. Изге урын буш булмай, тиҙәр был осраҡта. Ә үҙебеҙ иһә экзотик хәлдә генә тороп ҡалыуыбыҙ бар...

Яңыраҡ үҙемсә бер демографик модуль төҙөп ҡараным. Бының өсөн 12 мең ғаилә алдым. Әгәр ҙә һәр ғаиләлә тыуыр балаларҙың һаны мотлаҡ 5-әү булһа, 115 йылдан 12 мең ғаиләнән тыуа башлаған халыҡтың дөйөм һаны 168 миллионға барып етә, тигән һүҙ. Тимәк, милләттең һанын арттырыу бер нәмә лә тормай. Быға ирешер өсөн мейеләге йәки йөрәктәге бер кәртәне ватырға кәрәк.

**Рөстәм РӘЖӘПОВ ("Яугирлек беҙгә миҙалмы? Ә бит башҡорттарҙа яугирлектән бигерәк, дипломатлыҡ көслө булған..." 2006, 22-се һан):**

Башҡорттарҙың Рус дәүләтендәге хоҡуҡи хәле мәсьәләһенә туҡталып үтәйек. Рус дәүләтендә шәхси азатлыҡ баярҙарҙа, кенәздәрҙә, бер аҙ сауҙагәрҙәрҙә генә булған. Унда төп халыҡ - крепостной, йәғни - хоҡуҡһыҙ йән эйәһе. Ә башҡорттар иһә һәр ҡайһыһы шәхси яҡтан азат кенәз һаналған. Һәр башҡорт баяр статусында, тотош милләт баяр статусында йөрөгән булып килеп сыға! Сөнки ергә аҫабалыҡ хоҡуғы баярҙарҙа һәм кенәздәрҙә генә булған. Беҙҙә иһә бындай хоҡуҡ һәр башҡортҡа бирелгән, сөнки башҡорттар ергә дөйөм халыҡ милке тип ҡараған. Тимәк, беҙҙең ул саҡтағы хоҡуҡи статусыбыҙ рустарҙың кенәз, баярҙары кимәлендә тип танылған. Бына нимәгә тиңләнгән Рус дәүләте менән берләшеү. Тотош милләттең аҡһөйәк титулын йөрөтөүе - тарихтың уникаль күренеше.

**Илдус ИЛЕШЕВ ("Һандар артында хәҡиҡәт бар..." 2005, 5-се һан):**

- Хәҙер заман үҙгәреүгә бәйле күп кенә илдәрҙә һәм халыҡтарҙа "Дәрәжә" һәм "Образ" проблемаларына иғтибар көсәйҙе. Пушкин ҡалдырған "телһеҙ, танауҙары ҡырҡып алынған башҡорт" образы быға саҡлы беҙҙә йәлләү булып ҡына яңғыраны. Ул образдың нығыныуына ҡайһы бер үҙебеҙҙең милләттәштәр ҙә булышлыҡ итте. Белемле, телдәрҙе һәм закондарҙы яҡшы белгән, иҡтисадта балыҡ кеүек йөҙгән, күп аҡса эшләй алған яңы башҡорт образын булдырыу зарурлығы тыуҙы хәҙер. Шундай образ тыуҙырғанда, үҙенең башҡортлоғонда шикләнгән күптәр, шул иҫәптән маргиналдар ҙа, үҙ асылына ҡайтыр, үҙ милләтенән ситләшмәҫ һәм оялмаҫ ине.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА ("Әҙәбиәт ысынбарлыҡтан ҡурҡмаһын..." 2005, 10-сы һан):**

- Әлеге ваҡытта "башҡорт аристократы" тигән вакант урын буш. Ул урынға барыһы ла дәғүә итә ала. Тик уның өсөн нимә эшләргә кәрәк? Эсмәҫкә, тартмаҫҡа, маҡсатлы һәм лайыҡлы йәшәргә. Беҙ хәҙерҙән үк тормоштағы һәм әҙәбиәттәге тарихи ролебеҙҙе аңлап эш итергә бурыслыбыҙ. Шунһыҙ йәшәүебеҙҙән дә, ижад итеүебеҙҙән дә фәтеүә юҡ. Мәҫәлән, Ата Төрөк бер көн телселәр, икенсе көн тарихсылар менән кис ултырған. Улар был ултырыуҙарҙа Төркиәнең киләсәге хаҡында фекер алышҡан. Ә беҙгә барыбер шундай һөйләшеүҙәр етмәй.

**Зөфәр ТИМЕРБУЛАТОВ ("Китап ҡына төплө белем бирә, әммә ул бөгөн өсөнсө-дүртенсе мәғлүмәт сығанағы..." 2006, 26-сы һан):**

- Башҡортостандың Рәсәй диңгеҙендә сағыштырмаса һил йәшәүе иң тәүҙә республикаға исем биргән халыҡтың башҡаларҙы бер-береһен аңлап, кисереп, түҙеп йәшәй алыуынан килә. Республикаға Башҡортостан исеме бирелгән икән, уның нигеҙен тәшкил иткән милләткә иғтибар һис шикһеҙ күберәк булырға тейеш. Ошо хәлде башҡаларҙың аңлауы ла уларҙың толерантлыҡ сифаты хаҡында һөйләй. Бынан нимә аңлашыла: толерантлыҡ бер яҡ позицияһынан ғына аңлашылған, бер яҡтың ғына сифатын билдәләгән төшөнсә түгел. Нисек кенә тиһәк тә, донъяла башҡорттарҙың үҙ-үҙен һаҡлай һәм үҫтерә торған бүтән иле, ере юҡ. Ҡасандыр башҡалар төрлө сәбәптәр арҡаһында беҙгә килеп үҙ төйәген тапҡан һәм ошо ерҙең төп халҡы уларҙың милли һәм социаль ихтыяжына аңлы ҡараш менән йәшәй икән, башҡалар ҙа төп халыҡҡа шундай уҡ мөнәсәбәттә булырға тейеш. Был - толерантлыҡтың үҙе һәм Башҡортостандың милли идеяһын тәшкил итә лә инде.

**Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН ("Үҙ эштәреңдең сағылышын халҡың күҙендә күреп йәшәү генә дөрөҫ булыр..." 2007, 18-се һан):**

- Милли идеяны мин халыҡты һаҡлауға һәм уның һанын арттырыуға йүнәлтелгән эшмәкәрлектә күрәм. Бөгөн беҙ бер һорауға аныҡ яуап эҙләргә һәм шул йүнәлештә маҡсатыбыҙҙы билдәләргә бурыслы: Рәсәйҙә һәм унда йәшәүсе халыҡтарҙы һаҡлау өсөн беҙ нимәләр эшләргә тейешбеҙ? Беҙ халҡыбыҙҙың күҙенә тура ҡарарлыҡ эштәр башҡарып ҡалырға тейешбеҙ. Ә ундай эштәрҙе тик ҡояшҡа ҡарап йәшәгәндә генә атҡарып була. Етәкселәр килә лә китә, ә халыҡ ҡала. Бөгөнгө етәкселәр иртәгә китһә, исемдәре онотола, бары тик халыҡ өсөн башҡарған ғәмәлдәре булғандары ғына халыҡ хәтерендә ҡала.

Бер аҙым алға баҫам да,
Әйләнәм мин артыма,
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма,

тигән Мәжит Ғафури. Беҙҙең халыҡ ҡояш кеүек бит ул, беҙ шунан йылынабыҙ, нур, йылылыҡ һәм көс алабыҙ. Тик үҙеңдең сағылышыңды халҡың күҙендә күреп йәшәгәндә генә, ошо дөрөҫ йәшәү булалыр ул.

Мин халҡыбыҙҙың йәшәйеш көсөнә тәрән ышанған кеше булараҡ, оптимисмын. Социология менән шөғөлләнә башлауым да юҡтан түгел: халыҡ фекерен белергә теләүҙән ул. Әгәр ҙә тарихыбыҙға тарихса ҡараһаҡ, әлеге күп кенә етешһеҙлектәр, кире күренештәр ваҡытлыса ғына. Барыбер яҡшылыҡ өҫтөнлөк аласаҡ, барыбер матурлыҡ балҡыясаҡ, барыбер халҡыбыҙҙың рухи байлығы вулкан һымаҡ урғылып килеп сығасаҡ.

## ТЕЛ ТАРИХЫ - ХАЛЫҠ ТАРИХЫ

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ ("Беҙ яулап алынған халыҡ түгел, - Рус дәүләте менән һәр ваҡыт килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорҙоҡ..." 2007, 39-сы һан):**

- Башҡортостан - яулап алынған ил түгел. Был турала 1-се Дәүләт Думаһы трибунаһынан Сәйфетдинов, Сыртланов фамилиялы башҡорт депутаттары сығыш яһай. "Башҡорт халҡы яулап алынған халыҡ түгел", тип белдерә улар. Башҡорттар рус дәүләтселегә менән һәр ваҡыт килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорған. Иван Грозный биргән грамоталар ана шундай мөнәсәбәттең асыҡ миҫалы булып тора. Башҡорттарҙы казачий ғәскәр рәүешендә ҡулланыу ҙа башҡорт старшиналарының Рус батшалығына мөрәжәғәте арҡаһында тормошҡа ашырыла һәм шул уҡ килешеүҙең артабан да дауам ителеүе хаҡында һөйләй. Шул уҡ традицияны дауам итеп, 1917 йылдарҙа хатта большевиктар Башҡорт автономияһын танырға мәжбүр була. Был да килешеү һөҙөмтәһе.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ ("Нимә ул этногенез? Ул - халыҡтың яралғандан алып, тыуғанға тиклемге йәшәү араһы..." 2007, 11-се һан):**

- Башҡорт телендә бик борондан килгән фарсы ҡатламы бар. Беҙ хатта ул һүҙҙәрҙең фарсы һүҙҙәре икәнен дә белмәйбеҙ. Йәғни тел факторы ла халҡыбыҙҙың фарсылар менән бер тамырҙан булыуын аңлата. Тимәк, төркиләшкәнгә тиклемге боронғо башҡорт теле хәҙерге фарсы теле менән бик яҡын булған да, ҡыпсаҡтар килгәнгә тиклем халҡыбыҙ асылда шул телдә һөйләшкәндер...

Беҙҙең телдә үҙенсәлекле һаңғырау өндәрҙең булыуы боронғолоғобоҙҙо раҫлаусы күрһәткес. Күп кенә сит милләт кешеләре беҙҙең телде өйрәнеүҙәге ҡыйынлыҡты нәҡ шул өндәрҙең булыуына бәйләп аңлатырға маташа. Ул өндәр бит инглиз телендә лә бар, улайһа, ниңә инглиз теле өйрәнеүгә ҡулай тел иҫәпләнә. Икенсенән, инглиз телендә лә был өндәрҙең булыуы уртаҡ тарихи тамырҙарыбыҙ булыуын да күрһәтә.

Беҙҙең телдә үҙенсәлекле өндәрҙең һаҡланып ҡалыуында Урал тауҙарының да әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ булғандыр. Европанан - Азияға, Азиянан - Европаға һундар ҙа, монгол-татарҙар ҙа үткән. Тик тигеҙ урында ғына һуғышырға өйрәнгән империялар ғәскәре тауҙарға инеп тә тормаған. Тимәк, Уралтауыбыҙ бер үк ваҡытта халҡыбыҙҙы ла, уның ғөрөф-ғәҙәтен дә, телен дә һаҡлаған бер урын...

Һинд-иран теленең боронғолоғон асыҡлай торған тағы бер фактор - мифология. Беҙҙең боронғо башҡорт мифологияһы иран һәм фарсыныҡы менән тулыһынса тап килә. Аждаһа, енпәрей, дейеүҙәр барыһы ла ике мифологиянан килә. Был бит осраҡлы күренеш түгел...

Һәр кемдә үҙ милләтен боронғораҡ, әһәмиәтлерәк итеп күрергә теләү тенденцияһы йәшәй. Татарҙар, мәҫәлән, һуғышҡа тиклем, унан һуң да "Беҙ - болғарҙар" тигән идея менән йәшәп алғайны. Хәҙер татар фәне Алтын Урҙа осоро менән мәшғүл, йәғни монгол-татарҙарҙы хәҙерге татарҙарҙың ата-олаталары итеп күрергә теләү тенденцияһы көсәйҙе. Тарихтан билдәле булыуынса, монголдар менән алда, авангардта килгән татар ырыуы төркисә һөйләшмәгән ят телдәге халыҡ. Улар Алтын Урҙа дәүерендә урындағы монголдар шикелле, төп халыҡтың, төрки теленең ҡыпсаҡ нигеҙен үҙләштергән, төркиләшкән. Киләсәктә тарихҡа һәм фәнгә объектив ҡараған ғалимдар ошо тарихи хәҡиҡәтте таныясаҡ. Быға тиклем тарихты үҙгәртергә теләүселәр булды-булыуға, әммә тарих ул шундай төшөнсә: уны төрлө яҡҡа тартып, йә үҙгәртеп булмай. Ысын тарих яҡын киләсәктә барыбер аяҡҡа баҫтырыласаҡ...

**Вәкил ХАЖИН ("Тел теорияһын ғына уҡытыу милләтебеҙ алдындағы енәйәт ул". 2007, 23-се һан):**

- 2-3 мең генә һүҙ белгән балаға ғүмерендә лә кәрәк булмаясаҡ тел теорияһын I кластан алып



XI класҡа тиклем тылҡыу - милләт алдында эшләгән енәйәтебеҙ. Мин уны 20-30 йыл һаман да енәйәт тип иҫәпләйем. Беҙ ҡурылатә тороп балаларыбыҙҙы телдән биҙҙерәбеҙ. Тел теорияһы бына минә, уҡытыусыларға, тел ғалимдарына ғына кәрәк, сөнки беҙ телдән уҡытабыҙ, фәнни эш менән шөғөлләнәбеҙ. Хатта олимпиадаға барған иң алдынғы балалар ҙа килештәрҙе айыра алмай яфаланып ултыра. Башҡорт теленең грамматикаһы фән булараҡ йәшәргә тейеш, мин уға ҡаршы түгел, әммә уның менән шөғөлләнеү ғалимдарҙың, филология факультетында уҡыған студенттарҙың эше. Беҙҙең балалар алдында тел теорияһын түгел, телде белеү бурысы тора.

Телгә өйрәтеү һәм башҡорт кешеһе тәрбиәләү маҡсатын иң беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Икенсенән, һәр бала тыумыштан ижади һәләткә эйә була. Илленсе йылдарҙа мин мәктәптә уҡығанда бөтә ҡыҙҙар ҙа таҡмаҡ сығара ала торғайны. Бер таҡмаҡ икенсе тапҡыр ҡабатланмай. Бөгөн таҡмаҡ сығарыу бик һирәк күренешкә әүерелде. Ул саҡтағы кешеләрҙең теле иҫ китмәле бай ине...

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ ("Беҙ әйтмәһәк, кем әйтер, хәҙер әйтмәһәк, ҡасан әйтербеҙ?" 2010, 4-се һан):**

-Телдәренең фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәре буйынса ҡыпсаҡ һәм уғыҙ тармаҡтарына айырылған төрки халыҡтары Ер шарында 200 миллионға яҡын. Был сама менән урыҫ халҡының бөгөнгө һанынан 50 миллионға күберәк, тигән һүҙ. Айырма тик шунда: Рәсәйҙәге урыҫ милләте йыл һайын яҡынса 1 миллионға кәмей, ә төрки халыҡтары, киреһенсә, арта бара.

Үрҙә әйтелгәндәр беҙгә шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә: башҡорт этносы яңғыҙлыҡ синдромына дусар булған милләт түгел, ә 200 миллионлыҡ ҡәрҙәш халыҡтар ғаиләһенән айырып алғыһыҙ бер өлөшө. Тимәк, уның теле лә йотолоуға, тормоштан алып ташлауға хөкөм ителгән кескәй тел итеп түгел, ә ҙур һәм мөһабәт төрки донъяһының үҙенсәлекле бер кисәге рәүешендә ҡаралырға тейеш.

## МӨҒЖИЗӘЛӘРЕБЕҘ

**Спартак ИЛЬЯСОВ "Халҡыбыҙ йәне яралған ер - Уралтау, ҡурайы ла, йыры ла - Уралтау бейеклегенән..." (2009, 42-се һан):**

- Мин Башҡортостан мөғжизәләре исемлегенең иң башында торорға тейеш башҡорт үҙе, тим. Башҡорт, тигән мөғжизәне беҙ Рәсәй империяһының төрки халыҡтары тарихы менән сағыштырып ҡына баһалай алабыҙ. Унан һуң... Башҡорттоҡо кеүек йырҙары, бейеүҙәре, бик бай фольклоры булған башҡа халыҡтар донъяла күпме икән? "Урал батыр"ға тиң эпос бармы? Булһа, ҡайһы халыҡта? Төрки-ҡырғыҙҙың Манасы күләме менән Урал батырҙан ҙурыраҡ, тик ул Урал батыр кеүек үк боронғо түгел, сағыштырмаса йәш эпос. Ә "Урал батыр" - башҡорт халҡыныҡы!

Донъяла әле уға тиң киң фәлсәфәле башҡа эпос юҡ.

Ата-бабаларыбыҙҙың киләсәк быуындар ҙа һоҡланырлыҡ тарихи ғәмәлдәре бар. Рәсәй барлыҡ һуғыштарында ла башҡорттан ғәскәр төҙөгән. Ниңә ул башҡа халыҡтарҙан айырым ғәскәр төҙөмәгән? Ә уларҙың батырлыҡтары? Наполеон фельдмаршалы Мюрат тикте юҡҡа ғына башҡорттарҙың тәүәккәллеге, ҡылыс һуғышында бик оҫта булыуы хаҡында ғәжәпләнеп яҙып ҡалдырмаҫ ине, моғайын. Ә Кутузовтың "любезные мои" тигән һүҙҙәрен һәр берегеҙ беләләр. Унан һуң, Хиуа, Аҡ мәсет һуғыштары, Ҡырым, Кавказ, Бохара походтары, үҙ азатлығы өсөн империя сәйәсәтенә ҡаршы 200 йылдан ашыу көрәшеүе ни хаҡта һөйләй һуң? Ә 1917-1920 йылдарҙа тағы ла үҙ ғәскәрен төҙөп, үҙ ере, үҙ азатлығы өсөн ҡан ҡойоп һуғыш алып барыуы? Ысынбарлыҡта Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт хөкүмәтенең иҫ китмәле көрәше Рәсәй шовинистарын федератив дәүләт төҙөү юлына баҫтыра, һуңынан ул СССР-ға әүерелә. Был - ысынбарлыҡ. Быны йә тарихты белмәүселәр, йә тарихыбыҙға көнләшеп ҡараусылар ғына инҡар итеп маташасаҡ. "Беҙ аҡ та түгел, ҡыҙыл да түгел, беҙ - башҡорттар" тигән оран халҡыбыҙҙың милли асылына тап килә. Башҡорт ҡаһарманлығы мөғжизә түгелме ни?

**Закирйән ӘМИНЕВ:**

- Бик боронғо башҡорттоң һаман да ошо ерҙә йәшәп ятыуын үҙе парадокс һымаҡ, тип уйлай торғайным. Донъяла боронғо халыҡтар бик аҙ. Уларға, мәҫәлән, әрмәндәрҙе индерергә була. Башҡорттарҙың бәшәнәктәр менән бергә Арал диңгеҙе буйында бик боронғо дәүерҙәрҙә үк һуғышып йөрөгәнлеге тураһында мәғлүмәттәр һаҡланған. Башҡорттар менән һуғышып йөрөгән ул халыҡтар хәҙер күптән юҡ. Беҙҙең халыҡ Ҡара диңгеҙ буйында Византия империяһына ҡаршы ла һуғышып йөрөгән. Ул саҡта йәшәгән бәшәнәктәр ҙә, мөңгелек тип иҫәпләнгән Византия халҡы ла, болғарҙар ҙа юҡ хәҙер. Ә шул халыҡтар менән иңгә-иң терәп йәшәгән башҡорт һаман да тырышып-тырмашып йәшәп ята. Беҙҙең оҙон ғүмерле булыуыбыҙҙы ғалимдар башҡорттоң Уралда формалашып, уны бер ҡасан ташлап китмәүенә бәйләй.

**Рәшит ШӘКҮР:**

- Башҡорттоң ҙур көсө - уның тәрән тамырҙарында. Беҙ әле ул тәрәнлеккә төшөп тә китә алмайбыҙ, ул өйрәнелмәгән дә. Халҡыбыҙ үҙ тарихын бик яҡшы белгәндәр, ниндәй тамыры, көс-ҡөҙрәте булыуын аңлап йәшәгәндәр. Әгәр ҙә шулай булмаһа, беҙ Рәсәй дәүерендәге аяуһыҙ һынауҙарҙы үтә лә алмаған булыр инек. Күп халыҡтар үтә алманы ул һынауҙарҙы, шуға улар бөгөн юҡ. Ә беҙ үттек. Быны-бына бөләбеҙ тигәндә, Салауат кеүек алға әйҙәүсе, берләштереүсе батырҙар һәр осорҙа тыуа торған бит. Был йәһәттән беҙ XIX быуатҡа янынан баһа бирергә тейешбеҙ. Әйтәйек, Зәйнулла ишан Рәсүлев һәм уның мөриттәре етәкләгән суфыйсылыҡ хәрәкәтен генә алайыҡ. Улар яңы дәүерҙә, бик ауыр мәлдә, башҡорт халҡында яңы рухи көс тыуҙыра алған. Һәр дәүерҙә юлбашсыларыбыҙ халыҡ алдында дәүергә ярашлы маҡсат ҡуя белгән. Был маҡсатты улар рухи көс аша тапҡан. Ошо рухи көс хәрби көскә лә әүерелгән. Үкенескә ҡаршы, совет дәүерендә үткәндә ирешелгән юғарылыҡ-киммәттәребеҙҙең ҙур өлөшө юҡҡа сыҡты. Әгәр ҙә беҙ боронғолоғобоҙҙа ниндәй көс ятҡанын, "башҡорт феномены" мөғжизәһенең серен аңлаһаҡ, шуны ҡайтара алһаҡ, XXI быуат башындағы дәүергә лә үҙебеҙҙе әҙерләй алыр инек. Беҙ хәҙер янынан яңырыу кисерергә тейешбеҙ. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы бар икән, ул башҡорт халҡы булған өсөн генә бар. Был фекерҙе республикабыҙҙа йәшәүсе башҡа халыҡтар ҙа аңлай башланы хәҙер.

## БАШҠОРТ ҺӘМ ЕР - ИКЕҺЕ БЕР

**Мазһар ИҪӘНБАЕВ ("Маҡсат асылды аҡлай, йәки Колхозды һаҡлау - ерҙе, тимәк, милләтте һаҡлау ул..." 46-сы һан):**

- Бөгөнгө Әбйәлил районы ере - ул шул урында йәшәүсе әбйәлилдәрҙең генә ере түгел, ул - башҡорт халҡының ере. Ер һатыусы кеше унда үҙ ерен түгел, башҡорт халҡының ерен һата. Бындай хоҡуҡты уға кем биргән? Нисәмә быуаттар буйы ҡан ҡойоп һаҡлаған башҡорт ерен Әбйәлилдең бөгөнгө эскеселәре йә башҡалары көндәлек хәжәте, йәғни йәшәү сығанағы өсөн һата икән, был мәсьәләне хатта суд кимәлендә лә ҡарарға кәрәк. Башҡорт халҡы, уның ижтимағи ойошмалары был йәһәттән әбйәлилдәргә дәғүә белдерә ала. Ер һатыусыға һәм быға булышлыҡ итеүсе кешеләргә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булдырғанда ғына был хәлде туҡтатып буласаҡ.

**Риф ИҪӘНОВ ("Боронғонан боронғораҡ башҡорт, бөгөнгөнән бөгөнгөрәк башҡорт..." 2007, 28-се һан):**

- Әле беҙгә тарихи мөмкинлек бирелде. Шуны иҫтә тотоп, һәр беребеҙ тыуған еребеҙҙә нимәлер эшләп өлгөрөргә, ергә нығынып ҡалырға бурыслыбыҙ. Нимә генә тимә, киләсәгебеҙҙе донъялағы йәки Рәсәйҙәге сәйәсәт түгел, үҙебеҙҙең аралағы белемле һәм бай кешеләр, үҙ-ара мөнәсәбәтебеҙ билдәләйәсәк. Киләсәктә Мәскәүме, башҡамы, беҙҙе кем һәм нимә генә тип атамаһын, "губерна" тиһенме, "республика" тиһенме, яҙмышыбыҙҙы белем һәм капитал билдәләйәсәк. Барлыҡ аҡыллы һәм бай кешеләребеҙ бергә тупланып, яңыса фекерләгән башҡорт йәмәғәтселеген төҙөп кенә, ҡотолоп ҡала алаҫаҡбыҙ.

**Зәки ХӘММӘТОВ ("Беҙҙең көс - тамсы көсө, таштарҙы, граниттарҙы ярып сығырлыҡ көс..." 2007, 21-се һан):**

- Антейҙың аяҡ табаны ерҙән айырылһа, ул еңелгән. Шуның кеүек, беҙҙең халыҡты әлегә йәшәтеп торған нәмә - ул ер. Бил көрәшендә лә дәғүәсеһенең аяғын ерҙән айыра алған көрәшсе һәр саҡ еңеүгә өлгәшә. Беҙҙең ерҙә урғылған һыуҙы эскән, тәбиғәт емешен өҙөп ашаған кеше ауырымаған. Һыу ҙа, һауа ла, ризыҡ та элек-электән беҙҙә дарыу урынына йөрөгән. Шуға күрә, ерҙәребеҙгә дәғүә итеүселәр һәр ваҡыт беҙҙе Уралыбыҙҙан айырырға теләгән. Мазһар Иҫәнбаев дөрөҫ әйтә: элек башҡортто ҡулына бығау һалып, һөргөнгә ебәрһәләр, хәҙер үҙ илендә йәшәрлек шарттарын юҡҡа сығарып, үҙ теләге менән китергә мәжбүр итәләр. Көсөн кәметер өсөн. Ике осраҡта ла - "Себергә ебәреү", тик ысулдары ғына айырыла. Әммә шуны ла онотторға ярамай: пружинаны ни тиклем нығыраҡ ҡыҫһаң, уның эске ҡаршылашыу көсө арта ғына. Ҡыҫылған пружина, ҡасан да булһа бер килеп, ҡыҫыусының ҡулына атасаҡ, сөнки уны һәр ваҡыт ҡыҫҡан килеш тотоп тороп булмай.

Халҡыбыҙҙың йәшәү көсөнә, оло ихтыярына, ҡаһарманлығына һоҡланмау мөмкин түгел. Крондштадта большевистик Рәсәйҙең яҙмышы хәл ителгән саҡта башҡорттар революцияны һаҡлап ҡала. Бының өсөн Петроградтың ҡала байрағын башҡорттарға бүләк итәләр. Ҡала хакимдары байраҡ һынлы байраҡтарын беҙгә биргәс, был хәл күп нәмә хаҡында һөйләй. Был байраҡ әле Өфөләге музейҙа һаҡлана.

**Зөфәр ЕНИКЕЕВ ("Башҡорт ер мәсьәләһен күтәрергә хоҡуҡлы, сөнки ул был ергә тамырҙары менән бәйле..." 2010, 21-се һан):**

- Әле ауылдарҙағы күпселек халыҡ ике формация араһында тороусы маргиналдарҙы тәшкил итә. Беҙгә был хәлдән ҡотолор өсөн Рәсәй программаһына ярашлы казачествоны индерергә кәрәк. Беҙ шул нигеҙҙә генә ауыл йәштәрен бергә туплай аласаҡбыҙ. Башҡорт борон-борондан атлы казак булғанын да онотторға ярамай. Казачество - ул йәшәү рәүеше лә. Әйҙә, мал көтһөндәр, атҡа менеп, төрлө хеҙмәттәр алып барһындар. Казачествоға объекттарҙы, иген баҫыуҙарын, урмандарҙы һаҡлауҙы, урындағы тәртип һаҡсылары вазифаларын йөкмәтергә була. Уларҙы хатта предприятиеларҙың шәхси һаҡсылары итеп тә эшкә алырға мөмкин. Рәсәйҙең ҡайһы бер өлкәләрендә был тәжрибә бар. Уларҙың хатта урядниктары, заряд хорунжийҙары бар. Эсеп, тыңламай йөрөүселәрҙе ҡамсы менән һуктырып торалар хатта. Беҙ, гәҙиттә, ҙур идеялар хаҡында һөйләйбеҙ, бына ошондай халыҡты күтәрә торған сараларға бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ.

**Әхтәр БОҪҠОНОВ ("Башҡорт ер мәсьәләһен күтәрергә хоҡуҡлы, сөнки ул был ергә тамырҙары менән бәйле..." 2010, 21-се һан):**

- Беҙ бәләне юғарынан эҙләргә яратабыҙ. Күп кенә бәләләр үҙебеҙҙә ята. Бөгөн Мәскәүҙә йә башҡа урында ултырыусылар: "Был башҡорттарҙы, татарҙарҙы йә сыуаштарҙы нисек бөтөрөргә икән?" - тип уйланып ултырмай. Ана, татарҙар ошо йылдар эсендә үҙҙәрендә дәүләтселектәрен нығытыу нигеҙендә байтаҡ ҡына эштәр башҡарып өлгөрҙө. Раил Кузеев Башҡортостанда башҡорт потенциалының 35 проценттан да кәм булмауы хаҡында һүҙ алып бара торғайны. Беҙ йүнәлешле эшләй алһаҡ, тиҫтә йыл эсендә башҡорт потенциалын 50 процентҡа ла еткерә алаҫаҡбыҙ. Башҡорт имиджы күтәрелһә, беренсенән, икенсе милләткә ауышҡандар үҙ асылына ҡайтасаҡ, икенсенән, бер яғы башҡорт булған ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙәге балалар беҙҙең позицияны һайлаясаҡ. Мин ҡатнаш никахлы ғаиләләрҙә тыуған балаларға йәлләп ҡарайым. Һорашһаң, уларҙың күптәре аныҡ итеп ниндәй милләткә ҡарауын әйтеүҙән тартына.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гәзиттә донъя күргән милләтебеҙ яҙмышына бәйле фекерҙәрҙең кәттәләрен бер епкә теҙҙек тә, атыбыҙҙы III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына туғарабыҙ. Был фекерҙәрҙең ҡоролтай трибунаһынан яңғыраясағына ла иманыбыҙ камил. Һүҙҙәр әйтелер, фекерҙәр яңғырар ул, сираттағы ҡоролтай ҙа үтеп китер, тик улар милләтебеҙ тормошон балҡытыр аныҡ ғәмәлдәр менән нығытылһын!**

**Фекерҙәрҙе бер епкә**
**Әмир ҒҮМӘРОВ теҙҙе.**

ӘЙТӘГҮР!

# БАХЫР ХАЛЫҠ...

## Ер йөҙөнән юҡ ителә

**"Беҙҙең башҡорт заманға яраҡлаша алманы", тип бахырланған, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән милләттәштәргә нимә әйтер инегеҙ?**

**Мөхәмәтйән ҠАҘАҠБАЕВ, йыраусы:** Етмеш йыл буйы ҡиммәттәребеҙгә дөрөҫ баһа бирелмәне. Эшсән, ни тотһа, шуны гөл итеп ҡуйыр оҫта ҡуллы, ер эшен һәйбәт белгән бынамын тигән крәҫтиәндәрҙе "кулак" тип кәмһеттеләр, ә ситән үреп өй ҙә ултырта алмағанын "Ул - батрак балаһы!" тип күтәрҙеләр. Улары йөрөнө күкрәк һуғып. Шул эшкинмәгән батрак балалары донъяны пыранзаран килтерҙе лә, бөтөн бәлә-ҡазаны халыҡҡа япһарҙы. Ни эшләп бахыр булһын ул башҡорт! Донъя һоҡланырлыҡ ҡобайырҙары, йырҙары булған, уны бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлай алған, ниндәй ауыр замандарҙа ла бөгөлмәгән яҡты зиһенле халыҡ бахыр буламы! Тотош халыҡ бер ваҡытта ла бахыр була алмай. Ҡайһы бер әтрәгәләмдәр генә халыҡҡа тап төшөрә.

**Фәнис ӘЛМӨХӘМӘТОВ, шәхси эшҡыуар:** Миңә лә ишетергә тура килгеләй бындай фекерҙәрҙе. Әммә мин ундай ҡарашҡа һәр ваҡыт ҡаршы сығам һәм үҙ фекеремде иҫбатларға тырышам. Дәлилдәр килтерәм. "Бахыр булған халыҡ күптән инде ер йөҙөнән юҡ ителер ине. Бахырлыҡ ҡанында булған халыҡ оҙаҡ йәшәй алмай. Ә бахырлыҡ ҡанында булмаға с, бөгөнгө заман башҡорттарында ҡайҙан булһын?" - тип уйлайым да, ундай фекер килеп сығыуының төрлө сәбәптәренә төшөнөргә тырышам.

Төрлө милләт кешеләре менән бергә эшләргә һәм йәшәргә тура килә. Мин башҡорттарҙың бик күп һәйбәт сифаттарын һанап китә алам. Башҡорттар хеҙмәт ярата һәм бер саҡта ла ваҡыты менән иҫәпләшмәй. Уға эштең һөҙөмтәһе кәрәк. Шуның өсөн дә совет заманындағы 9-ҙан 6-ға тиклем тигән ҡалыпҡа ауыр яраҡлашҡандыр. Үҙ эшен баштан алып аҙағына тиклем үҙ ҡулдары менән башҡарырға өйрәнгән башҡорт заводтарҙа фәҡәт эш хаҡы өсөн генә машинаның йәки сәғәттең бер генә детален эшләп тороу менән ҡәнәғәтләнә алмағандыр. Быға ла ауыр яраҡлашҡандыр. Күңел төшөнкөлөгө кисергәндер.

Башҡорт үҙен күрһәтергә түгел, ә иң элек эшен күрһәтергә тырыша. Ул самаһыҙ байлыҡҡа ҡарағанда, күңел тыныслығын артығыраҡ күрә, рухи байлыҡты өҫтөнөрәк ҡуя. Мин үҙем дә, мәҫәлән, мөмкинлегем булһа ла, мал ишәйтергә тырышмайым, ә ғаиләмә белем алырға, рухи йәһәттән байырға шарттар булдырырлыҡ ҡына матди байлыҡ табыу сараһын күрәм. Башҡарған эштәрем хаҡында уйлағанда ла алған эш хаҡтарымдың күләме түгел, ә эшемдән ҡәнәғәт ҡалған кешеләрҙең ҡыуаныуы иҫтә ҡалған.

Заманға оҙаҡ яраҡлашыу ҙа ялҡаулыҡтан түгел. Ә аҡрын уйлап, төплө эшләй, халыҡ әйтмешләй, еренә еткереп башҡарыу сифатынан киләлер. Шуның өсөн дә башҡорттоң эше аҡрын барған һымаҡ булһа ла, төплө килеп сыға. Ундай сифаттары булған халыҡты бахырҙар рәтенә индермәҫ инем. "Мин бахыр, халҡым бахыр", тип йөрөгәнсе, тот та эш башла. Бөгөнгө заманда холоҡ-фиғеленә тотош тап килгән эштәр башларға мөмкинлек тыуҙы. Тик хәрәкәт ит, зиһенеңде эшкә ҡуш. Тик тороу ялҡаулыҡҡа килтерә. Юғары маҡсатлы, эшенән ҡәнәғәт кеше бер ҡасан да үҙен дә, милләтен дә кәмһетмәҫ. Ә үҙ милләтен кәмһеткән кеше башҡаны ла ҙурламай.

**(Аҙағы. Башы 2-се, 4-се биттәрҙә).**

ӘСӘЙҘӘР ҠОРО

**Өфөлә йыш күҙәтелә был: ҡайһы бер йәш ҡатын-ҡыҙ үҙ балаһы менән урамда башҡортса һөйләшергә, унан "әсәй" тип әйттерергә ояла. Бала "әсәй" тип әйтергә оялдымы, тимәк, артабан башҡортса һөйләшергә лә тартынасаҡ. Милләтебеҙҙең үҙ-үҙен кәмһетеүе ошонан башлана түгелме? Үҙ-үҙен, тимәк, халҡын, тимәк, халыҡҡа ҡараған бөтөн нәмәне лә инҡар итеү бер ҡарашҡа ябай ғына күренгән "әсәй" тип әйттерергә оялыуҙан башлана. Ошо хәҡиҡәтте аңлаған һәм балаларына ғына түгел, ейәндәренә лә көслө башҡортлоҡ тойғоһо һалыуға өлгәшкән өләсәйҙәрҙе саҡырҙыҡ бөгөн ҡоробоҙға. Улар республикала билдәле йырсы һәм яҙыусы - Нәжиә АЛЛАЯРОВА менән Мәрйәм БУРАҠАЕВА. Әңгәмә ҡороусы - Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

# ЕЙӘНЕҢ НИНДӘЙ ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШӘ?

▸ **Баш һүҙҙе дауам итеп, һеҙгә ошондай һорауҙар бирге килә: бына һеҙ Өфөгә ауылдан килгәнһегеҙ. Ошонда ғаилә ҡороп йәшәй башлағанһығыҙ һәм башҡалабыҙҙағы күпселек башҡорт ғаиләләре башҡортса балалар баҡсаһы, башҡорт мәктәбе юҡлығына һылтанып, үҙ балаларын иң ҙур байлыҡтан - туған теленән мәхрүм иткән йылдарҙа балаларығыҙҙы, хәҙер инде ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙе лә халҡыбыҙҙың рухи байлығына "сумдырыу" йәһәтенән күп көс һалғанһығыҙ. Быға нисек өлгәштегеҙ һәм өлгәшәһегеҙ?**

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Әлбиттә, мин Миләүшә ҡыҙым тыуғас, Мәскәүгә уҡырға киттем һәм ҡыҙымды әсәйем ҡараны. Миләүшәмдең тел байлығы - әсәйемдән. Аҙаҡ инде әсәйем беҙҙең менән йәшәне. Әммә ейәнсәрҙәремде бағыуҙа өлөшөм тос булды, тип әйтә алам. Өләсәйлек бурысымды, ысынлап та, үтәйем. Туған телдә һөйләштереүгә килгәндә, мин уның башҡаса булыуын күҙ алдына ла килтермәйем. Нисек инде атай-әсәйең, балаларың, ейәндәрең менән Хоҙай биргән туған телеңдә түгел, ят телдә һөйләшмәк кәрәк? Өйҙә үҙ балаң, ейәнсәрҙәрең менән ят телдә аралашыу башыма һыймай минең. Туған тел - ул берберең менән күңел яҡынлығы, туғанлыҡ теле бит ул.

**М. БУРАҠАЕВА.** Мин район үҙәгендә тыуҙым, шунда йәшәнек. Ысынлап та, урамда мөхит русса, мәктәптә лә, ғаиләлә лә рус телендә генә һөйләшеүҙе талап итәләр. Иң тәүге булып асылған башҡорт класына уҡырға килдем. Унда уҡыуға барымы булмаған балаларҙы ғына туплағандар икән. Был кластар иғтибарҙан ситтә, балаларға кәмһетеп ҡарайҙар. Бына ошондай шарттарҙа әсәйем иҫ китмәле рухи батырлыҡ күрһәтте. Өйҙә фәҡәт башҡортса ғына һөйләштертте. Ул да беҙ башҡортса һөйләшкәнгә



*Туған телдә һөйләштереүгә килгәндә, мин уның башҡаса булыуын күҙ алдына ла килтермәйем. Нисек инде атай-әсәйең, балаларың, ейәндәрең менән Хоҙай биргән туған телеңдә түгел, ят телдә һөйләшмәк кәрәк? Өйҙә үҙ балаң, ейәнсәрҙәрең менән ят телдә аралашыу башыма һыймай минең. Туған тел - ул берберең менән күңел яҡынлығы, туғанлыҡ теле бит ул.*

аптырап ҡарағандарға: "Минең Хоҙай биргән туған телем бар. Ни эшләп үҙ балам менән вата-емерә ят телдә һөйләшәйем, " - тип кенә ҡуя ине. Әле уйлап ҡарайым да аптырайым - беҙ үҫкән заманда Иҫәнғолда беҙҙең ғаиләлә генә балалар башҡортса һөйләшкән. Һәм шуныһы ҡыҙыҡ - фәҡәт беҙҙең ғаиләлә генә (атайым ат ҡараусы, әсәйем - колхозсы) иң ауыр замандарҙа дүртебеҙ ҙә юғары уҡыу йортона ингәнбеҙ. Туған тел - ул аралашыу теле генә түгел. Ул - күңел нуры. Ул - беҙҙең ҡан теле, һәр күҙәнәгебеҙ, ҡан тамырҙарыбыҙ, булмышыбыҙ теле. Ошоно тойған әсәйем. Ошо хәҡиҡәт минең дә зиһенемә килеп ингән. Шуның өсөн дә балаларымды ла, ейән-ейәнсәрҙәремде лә ошо байлыҡтан айырмаҫҡа тырыштым. Әле инде туған телдең әһәмиәте тураһында мәғлүмәттәрем артҡан һайын, был фекеремдең дөрөҫлөгөнә инана барам.

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Баланы туған телдән аҙ ғына ла айырмаҫҡа кәрәк. Теле асылған мәлдә, усҡа һыйған сағында туған телдә һөйләштереп була әле. Ә бына өс-дүрт йәше тулып, башҡа балалар менән аралашып, балалар баҡсаһына йөрөй башланымы - тәртәнән ысҡынырға ғына тора. Теле руссаға әйләнә лә китә. Иртәнсәк кейенеп торған мәлендә абайламаҫтан, ашыҡтырайым әле, тип уйлап: "Одевайся скорей", - тип кенә әйтеп ҡал - юлда барғанда инде башҡорт теленә ҡайтарыуы ҡыйынлаша. Бик һаҡ булырға кәрәк ул осорҙа. "Мин - өләсәй. Өләсәй менән башҡортса һөйләшәләр", - тип кенә тора инем. Артабан инде үҙҙәре лә: "Өләсәй, матур итеп башҡортса һөйләшәйек әле", - ти башланылар. Хәҙер ҙә ҡайһы ваҡытта, үҙҙәре лә абайламаҫтан, руссаға күсеп китәләр ҙә, бер-береһен иҫкәртә һалып, тиҙ генә башҡортса һөйләшә башлайҙар. Руссаға күсеп китеүҙең үҙ сәбәптәре бар: бөтәһе лә музыка өлкәһендәләр. Шуға эш тураһында һөйләшә башлаһалар, терминдар русса бит, күсә лә китәләр.

▸ **Бала теле - рус теле, тигән фекер һалынған йәштәрҙә. Иҫемдә, ауылдан килгән инәйҙәр, олатайҙар атайым, әсәйем менән башҡортса иҫәнләшә, ә беҙгә русса һүҙ ҡушалар ине. Беҙ: "Беҙҙең өйҙә башҡортса ғына һөйләшәләр", - тиһәк: "Атаҡ-атаҡ, ҡалала кеше башҡортса һөйләшәме?" - тип аптырай торғайнылар.**

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Учалыға ҡайтһам, өләсәй булған һеңлем ейәндәре менән русса һөйләшеп маташа. Аптырап киттем. Түҙмәнем: "Ни эшләп үҙ ейәндәрең менән башҡортса һөйләшмәйһең?" - тием. Ә ул быны ғәҙәти хәл итеп ҡабул иткән: "Ҡалала шулай инде", - ти. Ә мин уларҙа ейәнсәрҙәрем менән башҡортса һөйләшәм. "Учалы - ҡала, ә мин Өфө тигән ауылдан килдемме ни һеҙгә? Туғаным, балаларыңды юғалтҡың килмәһә, туған телдән айырма", - тинем.

**М. БУРАҠАЕВА.** Яныраҡ Өфөгә бөтөн республиканан "Йыл уҡытыусыһы" конкурсына иң-иң алдынғы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары йыйылды. Уларҙы "Зәки Вәлиди" спектакленә алып килделәр. Минең янымда бер нисә уҡытыусы ултырҙы. Бер саҡ береһе кеҫә телефонынан шылтырата башланы: "Камиллочка, сейчас мы будем смотреть спектакль, выключаем телефоны. Пока не звони", - ти. Минең аптыраулы ҡарашымды тойҙо ла: "Үҙ балаларым менән башҡортса һөйләшәм ул, Мәрйәм апай. Улар ауылда үҫте. "Ә быныһы - ейәнсәрем. Өфөлә йәшәйҙәр", - ти. "Бәй, Өфө теле - рус теләме ни?" - тип һорайым аптырап. "Бөтөн шәхестәрҙең дә балалары русса һөйләшә бит. Телевизорҙан күрәбеҙ ҙә инде. Бер һеҙҙең балалар ғына башҡортса һөйләшә ул ни эшләптер?"- ти был. Был һүҙҙәрҙе бит иң алдынғы тип һаналған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ауыҙынан ишетәм. Тимәк, был уҡытыусы туған телдең кеше, милләт, халыҡ өсөн әһәмиәтен аңлап бөтмәй йәки башҡа ҡайһы бер әһелдәр кеүек халыҡты абстракт төшөнсә тип уйлай. Трибунанан: "Халыҡ туған телен, дәүләт телен белергә тейеш", - тип ялҡынлы телмәр тотҡан күп кенә әһелдәребеҙ өсөн дә бит үҙ балалары, үҙ ғаиләһе "туған телен белергә тейешле" халыҡҡа инмәй.

▸ **Ә беҙ үҙебеҙ ундайҙарҙан культ яһайбыҙ. Беҙҙең телевидениенан да йыш ҡына төрлө данлы ғаиләләр, династиялар тураһында тапшырыу ой-**

**ошторалар. Үрнәк итеп күрһәтелгән ғаиләләрҙә башҡорт әһелдәренең балалары һәм ейәнсәрҙәре русса һөйләшә. Түҙмәнем, ошондай тапшырыуҙа ҡатнашҡан бер әһелебеҙгә "Нишләп балағыҙ, ейәнегеҙ русса һөйләшә ул?" - тинем. "Балам совет заманында үҫте бит, беҙ ул саҡта тел кәрәклеген аңламағанбыҙ", - ти. "Ә хәҙер аңлайһығыҙ бит, ейәнегеҙ менән башҡортса һөйләшеп, уға тел кәрәклеген һеңдерә алмайһығыҙмы ни?" - тием. "Беҙ уны башҡорт мәктәбенә бирҙек ул биреүгә..." - тип яуаплай ағай кеше. Бына һиңә тәрбиә, бына һиңә үрнәк! Беҙ, киреһенсә, ҡала шарттарында ғаиләһендә башҡорт балалары, ейәндәре үҫтергәндәрҙе даими күтәрһәк кенә ауыл халҡына башҡорт теле лә - ҡала теле икәнлеген аңлата аласаҡбыҙ. Быныһы - бер юл. Тағы ниндәй ысулдар менән, нисек аңлатырға йәштәргә?**

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Ҡала шарттарында туған телгә өйрәтеү ҡыйын, тиҙәр. Дөрөҫ түгел ул. Теләк булһын да, инаныуың көслө булһын. Туғандар араһында туған тел өҫтөнлөк итһә, өйөңдә башҡорт мөхите булдырһаң, башҡортса һөйләш, башҡортса әйт, тип, даими иҫкә төшөрөп, теңкәһенә тейеп тороуҙың кәрәге лә юҡ. Әйтәйек, таныштарың осрап, ул эргәңдәге балаңа русса һүҙ ҡуштымы: "Минең балам рустар менән - русса, башҡорттар менән бик матур итеп башҡортса һөйләшә ул", - тип маҡтап ебәреү ҙә етә. Бала әллә кем булып китә. Унан һуң, башҡорт моңо, көнкүреш әйберҙәре, музыка ҡоралдары, башҡорт халыҡ ижады, милли аштарыбыҙ менән даими таныштырыу кәрәк. "Һинә быларҙы белеү кәрәк, сөнки ошо өлгөләрҙе башҡа милләт кешеләре лә, сәнғәт әһелдәре лә һоҡланып ҡарай, сит милләт араһында һин үҙеңде түгел, ә халҡың сәнғәтен күтәреп танылыу, һоҡланыу таба алаһың", - тип, зиһененә һалып ҡуйыу ҙа яҡшы. Ошолай аҡрынлап һалына инде башҡортлоҡ тойғоһо. Тик һуңламаҫҡа кәрәк.

**М. БУРАҠАЕВА.** Балам рус телен яҡшы белмәй ҡуйыр, тип, күп ғаиләләр башҡортса ла, русса ла һөйләшә башлай. Тик тора-бара башҡорт теле үтә ябай, көнкүреш теленә генә әйләнә. Ә инде фәлсәфәүи йәки ҡатмарлы, юғары төшөнсәләр хаҡында һөйләшкәндә, руссаға күсәләр. Былай ғаиләләрҙе башҡорт телен ихтирам итмәй, тип тә әйтеп булмай. Тик былай ғаиләләрҙә башҡорт матбуғатын инҡар итеү, балаларға башҡортса китап уҡымау күҙәтелә. Башҡорт теле ҡатмарлы фекерҙәрендә, тойғо-кисерештәрендә еткереүгә эшкинмәй торған тел, тигән фекер һалына. Икмәк-тоҙлоҡ башҡорт теленән моң һеңмәй, телгә һөйөү уянмай. Был ғаиләләрҙе рухһыҙ, тип әйтеп булмай, әммә тел таҙалығы - иң мөһим шарт, балаларың менән бергә үҙ телеңдә лә, башҡортса уйлау ҡеүәһен дә үҫтерергә кәрәклеген аңларға кәрәк.

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Телдән айырманым, моңдан айырманым балаларымды. Күңеленә туған моң наҙы һалынған бала үҙ халҡына ылыға. Бәләкәйҙән туған телендә һөйләшкән бала тел моңон тоя. Аҙаҡ ҡына туған телендә һөйләшеп маташҡандарҙы һөйләшеүеңән үк белеп була. Башҡорт һүҙҙәрен әйтә генә беләләр, ә тәмләп, нескәлеген тойоп һөйләшмәйҙәр. Ә минең ейәнсәрҙәрем йырлағанда ла телде, моңдо тойоп йырлайҙар. Был үҙенсәлек юғары баһалана. Ике ейәнсәрем дә йыр буйынса конкурстарҙа еңеүсе, бына әле генә Диләрәм "Ирәндек моңдары"нда "Таштуғай"ҙы башҡарып, Гран-при алып ҡайтты. Асиям ҡартатаһы юлынан китте, скрипкала уйнай. Ул да ярыштарҙа алдынғылыҡты бирмәй. Баланы телгә ылыҡтырыу өсөн әкиәттәр һөйләргә, китаптар уҡырға кәрәк. Әлбиттә, атай-әсәйҙең ваҡыты бик тығыҙ. Йәш саҡта эш күп була. Өләсәйҙәр ярҙамға килһә, шәп булыр ине.

▸ **Бала - атай-әсәй күңеленең көҙгөһө. Һөйләгән һүҙеңә иң элек үҙең инаныуға тейешһең. Һин үҙең инанған төшөнсәне генә балаңа һеңдерә була. Үҙең һөйләгәнгә үҙең инанмайһың икән, ҡоро һүҙ - ҡуналтаҡ итек, балаң туған теленә кәмһетеп ҡараясаҡ.**

**М. БУРАҠАЕВА.** Дөрөҫ. Туған телһеҙ кешене рухи зәгиф, тип ҡарайым мин. Күпме башҡорт әһелдәре - ғалимдары, яҙыусылары туған телһеҙ ҡалған рухи зәгиф балаларын, буй еткергәс кенә, башҡорт мөхитенә, фәненә, сәнғәтенә, әҙәбиәтенә ылыҡтырып маташа. Килеп сыҡмай бит. Инә һөтө менән инмәгән тана һөтө менән генә инмәй. Өлкән быуын башҡорт мәктәптәре юҡлыҡҡа һылтанды. Шунан башҡорт теленә дәүләт статусы бирелмәгән, тип зарланыусылар ҙа булды. Ә хәҙер һылтанныр һылтауҙары юҡ. Ейәнең ниндәй милләт телендә һөйләшә - һин шул милләткә хеҙмәт итәһең. Ейәнеңде етәкләп, шул милләт шәжәрәһенә юл алырға ғына ҡала. Мин сығыштарымда әйткәнем бар: һинең башҡортса белеүең атай-әсәйеңдән, ә башҡортлоғоң ейәнеңдә күренә, тип.

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Аҡыл өйрәтеү ғәмәли эш башҡарыуға ҡарағанда еңелерәк шул. Мин кешегә аҡыл өйрәтеп торманым. Үҙ балаларымды тәрбиәләүгә көс һалдым.



***Ейәнең ниндәй милләт телендә һөйләшә - һин шул милләткә хеҙмәт итәһең. Ейәнеңде етәкләп, шул милләт шәжәрәһенә юл алырға ғына ҡала. Мин сығыштарымда әйткәнем бар: һинең башҡортса белеүең атай-әсәйеңдән, ә башҡортлоғоң ейәнеңдә күренә, тип. Әгәр беҙҙең иҫ китмәле таланттарыбыҙҙан башҡорт йөрәкле, башҡорт телле таланттар ҡалһа, ни тиклем мәртәбә булыр ине.***

▸ **Уның ҡарауы, халҡыбыҙға ике телдә лә һәйбәт белгән бынамын тигән музыка белгесе Миләүшә Иҙрисованы, йырсы ейәнсәрҙәр Диләрә Иҙрисованы, телевидение өлкәһендә уңышлы аҙымдар эшләгән музыка белгесе Айгөл Вәхитованы, скрипкасы Асияны тәрбиәләгәнегеҙ. Әле бүләрегеҙ үҫә. Ул да, моғайын, музыканттар династияһын дауам итер. Иң мөһиме - башҡортса һөйләшкән, башҡортса уйлаған, өләсәһен - өләсәй тигән, олатаһын - олатай тигән Ибраһим атлы ейәнегеҙ ҙә һәр тарафтан еңеүсе булыр.**

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Ул яҡтан шөкөр итерлек ғаиләләр була башланы хәҙер Өфөлә. Бына беҙҙең артистар, таныштар араһында Фәрзәнә Сәғитова, Зәйтүнә Гәзизова, Роза Аҡкучукова, Хәйрулла Мортазиндар балалары менән генә түгел, ейәндәре менән дә башҡорт телендә генә аралашалар.

**М. БУРАҠАЕВА.** Әгәр беҙҙең иҫ китмәле таланттарыбыҙҙан башҡорт йөрәкле, башҡорт телле таланттар ҡалһа, ни тиклем мәртәбә булыр ине.

▸ **Башҡорттан башҡорт тыуһын тигән теләк булды инде был.**

**М. БУРАҠАЕВА.** Башҡорттан башҡорт тыуа ул, тик аҙаҡ әле беҙ әйткән сәбәптәр менән юғала. Башҡорттан башҡорт телле башҡорт тыуһын. Туған телле бала тәрбиәләүҙе бер кем дә тыймай, бер кем дә ауыҙға һуҡмай. Үҙебеҙҙең күләгәбеҙҙән үҙебеҙ ҡурҡып, баланы кәмһенеүсе күңел менән тәрбиәләп, милләткә бик оло зыян килтерәбеҙ. Ә бит донъялағы халыҡтарҙың береһенән дә кәм түгелбеҙ. Башҡорт булыу - ояла торған сифат түгел. Башҡорт булыу - ғорурлана торған сифат.

**Н. АЛЛАЯРОВА.** Бөтөн юғалтыуҙар телһеҙ зәгифлектән башлана. Телгә битарафлыҡ - халҡына битарафлыҡ ул. Ҡайһы берәүҙәрҙең туған тел белмәүен бәләкәй саҡта өйрәнмәүгә һылтаныуы оят хатта. Сит телде лә өс-дүрт айҙа өйрәнеп була. Ә улар тиҫтәләрсә йылдар буйы зарланып йәшәй. Тел белмәгәс, халҡың күңелен дә аңлап булмай. Бөтөн ғиллә - туған телдә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Кәмһенеүле йомоҡ күңелле башҡорт үҫтереп, күпме юғалтыуҙар кисерҙек, кисерәбеҙ. Әлегәсә бынамын тигән йыр-көйҙәребеҙҙе ырыуҙарға, осорҙарға бүлеп, классификациялап, үҙенсәлеген тикшергән белгестәребеҙ, иҫ китмәле кейем өлгөләренең ырыу үҙенсәлеген, биҙәнеү әйберҙәренең, ғәжәп шифалы ашамлыҡтарыбыҙҙың дауалау сифаттарын, үҙебеҙҙең ҡот тигән йәшәйеш нигеҙен тикшергән ғалимдарыбыҙ юҡ. Ярай әле ҡымыҙҙың шифаһы тураһында Геродот, Даль әйткән, ярай әле Руденко, Лебединский, Рыбаков, Никольскийҙар, әлеге ваҡытта Шитова, Гвоздиковалар бар. Сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ тураһында һүҙ әйтерлек ғалимдарыбыҙ бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Юғиһә, ысынлап та, "әсәй" тип әйтергә лә оялырлыҡ милләткә әйләнеп, Мамин-Сибиряктың, Глеб Успенскийҙың әйткәндәре дөрөҫкә сығып, иҫ китмәле ижадыбыҙҙы пыран-заран килтереп талауға ҡалдырып, үҙебеҙ ер йөҙөнән юғалыр инек. Ҡасанға тиклем башҡорттоң ҡаҙанышы тураһында ситтән килеп әйтеүҙәрен көтөп ятырға уйлайбыҙ беҙ? Ҡасанға тиклем үҙебеҙҙе үҙебеҙ кәмһетеп, ике башҡорт үҙ-ара русса һөйләшеп, бер-беребеҙгә төшөнсәләрҙе русса аңлатып йәшәргә уйлайбыҙ? Ҡасан трибунанан һөйләгән аҡыллы һүҙҙәребеҙҙе үҙебеҙ тота башларбыҙ?**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Кем аҙ хаталана, шул асыштарҙы ла аҙ яһай

Инжилда үҙенең өс ҡолона аҡса ҡалдырған бер кеше тураһында ошондай риүәйәт һөйләнелә. Ул бер ҡолона - биш һәләт (аҡса менән иҫәпләгәндә яҡынса биш мең доллар), икенсеһенә - ике һәләт, өсөнсөһөнә бары тик бер һәләт ҡалдыра. Кире әйләнеп ҡайтыуына аҡсаларын нимәгә тотонғандарын һораясағын белдерә. Биш һәләт алған ҡол был сумманы инвестиция ярҙамында ике тапҡырға арттыра, ике һәләт алғаны ла шулай эш итә. Ә бына бер һәләт эләктергән ҡол уңышһыҙ инвестициялар менән янып ҡуйыуҙан ҡурҡып, уны ергә күмеп ҡуя. Теге ике ҡол хужалары биргән аҡсаларын арттыра алғаны өсөн бүләкләнә, өсөнсө ҡол иһә хөкөм ителеп, яза ала.

Ә һин күпме тапҡыр, хаталаныуҙан ҡурҡҡан теге ҡол кеүек, ыңғай мөмкинлектәреңде ҡулыңдан ысҡындырҙың? Күпме тапҡыр тиңдәштәрең араһында көлкөлө йәки иҫәр булып күренеүҙән ҡурҡып, үҙеңде сикләргә тура килде? Хәүеф нигеҙендә тыуған үҙ-үҙеңде сикләүҙәрҙе емереүе ауыр. Былай ҡурҡыуҙарҙы еңергә ни тиклем тиҙерәк өйрәнһәң, шул тиклем матди яҡтан отасаҡһың, йәғни "кем аҙ хаталана, шул асыштарҙы ла аҙ яһай".

Тормош - ҡыҙыҡ әйбер һәм һәр ваҡыт беҙҙе асыштарға әйҙәй. Билдәле уйҙар һәм ғәмәлдәр сиктәрендә генә йөрөү хаталарҙы кәметергә булышлыҡ итә ала, әммә шуның менән бер рәттән, ул һинең тормошоңдо бай һәм ҡыҙыҡлы итеү мөмкинлегенән дә яҙҙыра. Ғәҙәти уйҙар, тойғолар һәм ғәмәлдәр сиктәренән сығып, һин бығаса тиклем бер ваҡытта ла булмаған урындарға әләгеп ҡуйыуҙан ҡурҡаһың. Былай ерҙәрҙә тиҙ генә хаталанырға мөмкин. Әммә артабан үҫергә ҡамасаулап торғандары, ысынында иһә, берән-бер емергес хата булып тора. Әгәр һин ниндәйҙер бер ҡатмарлы мәсьәләгә ҡарата хаталаныуҙан ҡурҡып, яңы фекер йәки яңы алым ҡулланыуҙан баш тартаһың икән, шуның менән һин, бәлки, иң ҙур хатаны яһарһың. Әгәр һин артабан үҫергә ҡарар иткәнһең икән, һәр яңы ситуация уның менән яҡшыраҡ эш итә алыу мөмкинлеге бирә алыуын да аңларға тейешһең. Былай осраҡта йә интуицияң, йә ситтән берәйһе ярҙам итеүе ихтимал, әммә ярҙам мотлаҡ буласаҡ.

Хаталар һине тынысһыҙландырыуы йәки күңелеңде яралауы ихтимал, әммә шуның менән бер рәттән, бөтәнсә былай хаталар яһамаҫҡа өйрәтәләр ҙә бит. Үҙ хаталарыңда өйрәнеү ысулы бөйөк уҡытыусы булып тора.

Һинең быны ниндәй дәрәжәлә аңлауыңа ҡарап, һин риүәйәттән килтерелгән теге ҡолдарҙың береһенә оҡшаш булаһың: һинә тормошта күпкә өлгәшергә ярҙам итеүсе күп һәләт бирелгән. Әммә берүк теге ҡурҡаҡ ҡолдоң хатаһын ҡабатлай күрмә, юғиһә, бер көн килеп теге йәки был мөмкинлек менән ҡуллана алмауыңа үкенеп, үткән тормошоңа аяныс менән ҡарарға тура килер. Һәләтеңде үҙеңә ышанып, аҡыллы итеп ҡуллан, шул саҡта муллыҡ менән тулы тормошоңдан кинәнес алырһың!

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

# КӨСЛӨ НӘҪЕЛ СЕРЕН...

## көслө күскә ҡарап бел

**"Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Әмир Миңлеәхмәт улы ИШЕМҒОЛОВ халҡыбыҙҙың төп кәсептәренең береһе һаналған умартасылыҡ өлкәһен үҫтереүҙәге ҡаҙаныштары, йәшәйеше менән кешелеккә өлгө булып торған бал ҡорто фәлсәфәһе тураһындағы уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты. Һүҙ - Әмир Миңлеәхмәт улына:**

### Юғалтыуҙан һаҡлап ҡалдыҡ

Беҙҙең "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" Рәсәйҙә генә түгел, донъя кимәлендә лә тиңе булмаған уникаль структуралы һәм эшмәкәрлек итеү системаһы булған берҙән-бер дәүләт учреждениеһы. Ул ойошторолғандан алып ауланған ҡайһы бер ҡаҙаныштарыбыҙҙы барлап китәйем.

1996 йылда Бөрйән районында экспедицияла йөрөгәндә башҡорт бал ҡорто үрсетеүсе 30 ғына умарта таптыҡ һәм был хәл барыбыҙҙы ла хафаға һалды. Башҡорт бал ҡортона юғалыу ҡурҡынысы янауы асыҡланды шул саҡта. Быға тиклем ғалимдарҙың ғилми эштәрендә "Башҡорт бал ҡорто урта рус ҡортоноң популяцияһы" тип яҙыла ине. Ә был термин ниҙән килеп сыҡҡан һуң? 1927 йылда Мәскәү профессоры Кожевников Бөрйәнгә килеп, ундағы ҡара бөрйән ҡорттарын "Ҡара Европа бал ҡорттары" тип атай һәм ул әкренләп "Урта рус ҡорттары" тигән исем ала. Мин иһә былдай фекер менән бер ваҡытта ла килешмәнем. Ғүмер буйы ата-бабаларыбыҙ ошо ерҙә тыуып үҫкән, ошонда көн иткән, уларҙың төп шөғөлдәренең береһе умартасылыҡ булған. Халҡыбыҙҙың "башҡорт" тип аталыуы ла уның бал ҡорттарына бәйлелер, тигән фекерҙәмен. Башҡорт атамаһының "баш умартасы" тигәнде аңлатыуы ла бик ихтимал. Был турала мин тарихсыларға ла өндәшкәнем булды. Тап шуға ла башҡорт бал ҡорто урта рус ҡорто менән бер нисек тә бәйле була алмай. Беҙ был йүнәлештә тикшеренеү эштәре алып барҙыҡ һәм башҡорт бал ҡортоноң урта рус бал ҡортонан айырмалы сифаттарын таптыҡ. Шуға ярашлы, башҡорт бал ҡортона яңы маҡсатлы стандарт ҡабул иттек һәм Мәскәү комиссияһы алдында уны айырым тоҡом булараҡ иҫбатлап сығып, документтар менән нығыттыҡ. Беҙҙең ҡорттар Рәсәйҙә рәсми рәүештә раҫланған берҙән-бер бал ҡорто тоҡомо булып тора. Бөгөн башҡорт бал ҡортон һаҡлау буйынса Нуриман, Архангель, Ғафури, Күгәрсен, Ейәнсура райондарында биш станция эшләп килә. Беҙҙең умартаныҡтар шулай уҡ Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып, тоҡом үрсетеү заводы тигән статус алды. Был - беренсенән.

Икенсенән, беҙ умартасылыҡ продукттарынан аҙыҡ-түлек, дауалау-профилактика һәм косметика тауарҙарының яңы төрҙәрен етештереү буйынса ныҡышмалы рәүештә эш алып барҙыҡ һәм ул үҙ һөҙөмтәһен бирҙе. Ете йыл элек үҙебеҙ етештергән 200-ҙән ашыу продукцияны ҡулланыуға сығарҙыҡ һәм сертификат алдыҡ. Умартасылыҡ продукттары нигеҙендәге былдай киң ассортименттағы тауарҙар донъялағы бер илдә лә етештерелмәй. Уларҙың 70-тән ашыуы Рәсәй төбәктәренә, АҠШ, Франция, Япония, Монголия һәм Кувейтка һатыуға сығарыла. Беҙҙең был тауарҙарыбыҙ бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә 400-ҙән ашыу миҙал яуланы.

Өсөнсөнән, балды урынлаштырыу, һатыу республикабыҙ умартасыларының төп проблемаһы булып торҙо. Был йүнәлештә лә әүҙем эш алып барҙыҡ һәм бөгөнгә көндә донъя кимәлендәге стандартҡа яуап биргән 100-ҙән ашыу төрҙәге бал тултырыу һауыттары булдырҙыҡ, был беҙгә хеҙмәтләндереү мәҙәниәтен яҡшыртыу мөмкинлеге бирҙе. Ошо һауыттарға һалып, хәҙер беҙ Башҡортостан, Рәсәй, донъя баҙарына бал алып сығабыҙ.

Дүртенсенән, беҙҙең үҙәктең бер тармағы булараҡ, Сипайлово биҫтәһендә Республика халыҡ медицинаһы һәм апитерапия үҙәге үҙ эшен башларға тора.

### Башҡорт балы тигән даны бар

Беҙ төрлө күргәҙмәләрҙә йөрөгәндә бүтән балды "башҡорт балы" тип алдап һатҡандарын да осратҡаныбыҙ булды. Шуға күрә, башҡорт балына патент алдыҡ һәм Мәскәү, Санкт-Петербургта "башҡорт балы" исеме менән алдап бал һатыусы фирмаларҙы судҡа бирә башланыҡ. Улар, үҙ сиратында, башҡорт балы Рәсәйҙә йыйылған бүтән балдан бер нимәһе менән дә айырылмай, шуға ла был патентты ғәмәлдән сығарырға кәрәк, тип, башҡорт балына ҡаршы фекер белдерергә ҡыйыулыҡ итте. Беҙ быларҙың барыһына дәлил итеп ошоларҙы еткерҙек: башҡорт балы 1900 йылда - Парижда, 1961 йылда - Германияла һәм 1971 йылда Бөтә Донъя күргәҙмәһендә Мәскәүҙә алтын миҙал алған ваҡытта бүтәндәр ни өсөн былдай баһаны яулай алмаған? Сит илгә сыҡҡанда ла халыҡ телендә беҙҙең продукцияның, башҡорт балы, тигән даны бар. Әгәр бөгөн ниндәйҙер фирма башҡорт балы бүтән балдан бер нимәһе менән дә айырылмай, тип иҫбат итергә тырыша икән, ни өсөн был исем аҫтында бал һата, тигән һорау ҙа тыуа бит.

Ә беҙҙең башҡорт балына килгәндә, беҙ уның буйынса тикшеренеү эштәре алып барып, күп нәмәләр асыҡланыҡ. Уның төп сифат айырмаһы еребеҙгә, унда үҫкән сәскәләргә бәйле. Беҙҙең Башҡортостан ерендә 400-ҙән ашыу төр сәскә үҫә. Әйтәйек, былтыр йылдың ҡоро килеүенә ҡарамаҫтан, балдың сифаты 2008 йылға ҡарағанда бик юғары булды. Ни өсөн? Был нектар бүлеп сығарыусы сәскәләр, ошо сәскәләр үҫкән тупрағыбыҙ, ҡояш нуры, һауа дымлылығы һәм температураһы менән бәйле. Уйлап ҡараһаң, Татарстанда ла, Алыҫ Көнсығышта ла, Алтайҙа ла шул уҡ йүкә үҫә кеүек, ә бына беҙҙең йүкә балының тәме барыбер айырыла. Беҙҙең йүкә ағасы сәскәһенең сифатлы һут бүлеп сығарыуы уның беҙең тәбиғәт шарттарына нығыраҡ ҡулайлашыуы тураһында һөйләй.

Мин һәр кешенең өҫтәлендә ике төрлө бал: йүкә һәм сәскә балы булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Уларҙы бер ваҡытта ла бергә ҡуйып сағыштырып ҡарарға ярамай. Йүкә балы үҙенә хас үҙенсәлектәре менән ҡиммәтле һәм шифалы булһа, сәскә балы төрлө сәскәләрҙән йыйылғас, унда кеше организмына кәрәкле булған файҙалы элементтар, витаминдар күберәк.



### Бал ҡорто фәлсәфәһе

Беҙгә бал ҡортоноң йәшәйешенән өйрәнәһеләр ныҡ күп. Әгәр беҙ улар алып барған йәшәү рәүеше юғарылығына барып етһәк, халҡыбыҙҙың мәҙәниәте һәм көнкүреше ни тиклем яҡшырып ине. Ә беҙ бөгөн, үкенескә ҡаршы, унан бик алыҫта торабыҙ. Мәҫәлән, умартала бер инә идара итә, беҙҙең дә бер президентыбыҙ бар. Күсте һаҡлаусы ҡорттар бар, беҙҙә лә милиция һаҡлай. Бала тәрбиәләүсе айырым ҡорттар булған кеүек, беҙҙең дә атай-әсәйҙәребеҙ бар. Бал ташыусы эшсе ҡорттар булған кеүек, беҙҙең дә ғаиләне ир-аттар аҫрарға, ризыҡ менән тәьмин итергә тейеш. Ике осраҡта ла бер үк система ҡүҙәтелһә лә, ҡорттар беҙгә ҡарағанда әүҙем, берҙәм йәшәй һәм һәр береһе үҙ бурысын теүәл башҡара.

Унан һуң, элек беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ырыу-ырыу айырым йәшәгән һәм нәҫел-нәсәбенә ҡарап, бер-береһенә ҡыҙ бирешкән, улын өйләндергән. Хәҙер был күренеш беҙҙең халыҡта юғалып бара: шәжәрә тамырына ҡарап тормайынса, өсөнсө-дүртенсе быуын туғандарҙың өйләнешеүен дә күҙәтәбеҙ, ҡатнаш никахтар ҙа йышайып китте. Ә бына бал ҡорто тормошона күҙ һалһаҡ, хайран ҡалырлыҡ: инә ҡорт бер ваҡытта ла үҙ умарталығында аталанмай. Ул, беренсенән, үҙенең нәҫелдәшенән аталаныуҙан, туған ҡан ҡатышыуҙан һаҡланып, 5-15 километр алыҫлыҡҡа китеп, күрше умарталыҡтарға бара һәм аталаныу өсөн юғары тиҙлек менән осоп китә. Уны бары тик иң көслө ата ҡорт ҡына ҡыуып етә. Быны ул сәләмәт һәм көслө нәҫел ҡалдырыу өсөн шулай эшләй. Бөгөн беҙ халҡыбыҙҙы арттырыу буйынса милли идеяны тормошҡа ашырабыҙ тиһәк, бал ҡортонан һабаҡ алыу ҙа етә.

Тағы ла бал ҡорттары тормошондағы бер хәл аптырата ла, һоҡландыра ла. Бал ҡорто йәшәйеше фәлсәфәһен аңлағандар һәм быға төшөнә ала. Бал ҡорттары араһында ҡорт талпаны аша йоға торған вирус йөрөй. Был сиргә дусар булған бал ҡорто ғаиләһе башҡа ҡорттарға вирус күсмәһен өсөн умарталарын ташлап, ситкә сығып китеп үлә. Шулай итеп, улар был үлемесле сирҙән бүтәндәрҙе һаҡлап ҡала. Ә беҙ грипп менән ауырыһаҡ та, йә башҡа сиргә дусар булһаҡ та, һаман да кеше араһында йөрөйбөҙ, уны бер-беребеҙгә йоҡторабыҙ, шунлыҡтан дөйөм халыҡ был эпидемияға дусар була.

Бал ҡорттарының тағы ла бер аҡылы: бала киләсәген ҡайғыртыу. Яҙын инә ҡорт йомортҡаны аҙ һала. Ни өсөн? Сөнки уның балаларын туйындырыр өсөн тәбиғәттең мөмкинлеге булмай. Шулай итеп, ул балаларын аслыҡтан ҡурсалай. Ә йәй айҙары сәскәләр күбәйеүе менән йомортҡа һалыуын арттыра. Тап шуға ла беҙ инә ҡорт яҙҙан күпләп йомортҡа һалһын өсөн уға ярҙам итеп шәкәр ҡомо бирәбеҙ. Тимәк, беҙгә лә, бал ҡортонан өлгө алып, бала табыуҙан алда, уны ашатыу, кейендереү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу хәстәрен күрергә кәрәктер.

Тағы ла бал ҡорттары балаһын башҡа сығарыу өсөн әҙерләнә, тик ул был осраҡта кешеләрҙән айырмалы, бөтөнләй башҡаса эш итә. Йәй башында бал ҡорто күс айыра, тибеҙ. Был ваҡытта өлкән инә ҡорт йәш инәне бөтә шарттары булған әҙер ояға ҡалдырып, үҙе йәш ҡорттар менән айырылып осоп сығып китә. Осоп сығып китер алдынан йәшәр урын тапҡансы улар үҙендә биш көнгә етерлек туҡланыу ҡатламы йыя. Ошонан сығып, атай-әсәй өйләнгән улына башҡа сығыр өсөн айырым йорт төҙөп бирергә ярҙам итергә тейеш, тигән һығымта яһарға була.

Бал ҡорто донъяһынан тағы ла бер фәлсәфә. Ата ҡорттар, уларҙы "әре ҡорттар" тип йөрөтәләр, ҡорт айырған осорҙа бер генә эш башҡара: инә ҡорттарҙы аталандыра һәм балалар ҡараша. Шунан башҡа уларҙың бер эше лә юҡ, йәй буйы бал ашап тик ята. Ләкин тәбиғәттән бал килеү кәмеү менән эшсе ҡорттар уларҙы умартанан ҡыуа башлай. Ундай әрәмтамаҡтарҙың ҡышҡылыҡҡа ҡорттар өсөн һис кәрәге юҡ. Ә ҡыш үткәс, һәйбәт бал ҡорто ғаиләһе яңынан әре ҡорттар сығарып ала. Бал ҡорттары бына ниндәй тәбиғи, ҡаты, әммә ғәҙел биологик ҡанундар һәм үҙенсәлектәр менән йәшәй. Ә беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең эскән, эшһеҙ әрәмтамаҡ ирҙәренә ғүмер буйы ла түҙеп йәшәй ала. Был кешелектең ыңғай сифатымы, әллә был осраҡта ла бал ҡорттарынан өлгө алырға кәрәкме икән?

Тағы ла шул: халыҡтар бер-береһенән айырылып торған кеүек, төрлө тоҡомло ҡорттар ҙа бер-береһенән айырыла. Әйтәйек, беҙҙең халыҡ ышаныусан, ихлас. Элек халҡыбыҙ йәйләүҙәрҙә йәшәгән, ишектәрендә йоҙаҡ булмаған, килгән кешегә ишеге асыҡ торған, шуның кеүек үк, уның күңеле лә асыҡ. Хәҙер бал ҡорттары менән сағыштырайыҡ. Мәҫәлән, кавказ ҡорттары үҙенең умарталарына бал йыя ла, бүтәндекенән урлаша башлай. Шул рәүешле ул умартаны тулыһынса юҡҡа сығара. Ә беҙҙең башҡорт бал ҡорто бер ваҡытта ла был юлға бармай. Шул уҡ ваҡытта уны яңылыш рәнйетһәң, умартаһын һелкетһәң, ҡаҡлыҡтырһаң, ул ҡуҙғый һәм ныҡ итеп саға башлай. Был сифат беҙҙең халыҡҡа ла хас: уның да асыуына тейһәң, ныҡ сәмләнә бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Изге китабыбыҙ Ҡөрьәндәге "Бал ҡорто" сүрәһендә былай тип әйтелә: "Раббың бал ҡортона әйтте: "Тауҙарҙа-ҡаяларҙа, ағас ҡыуыштарында һәм кешеләр ҡорған ҡаралты-ҡураларҙа үҙеңә оялар яһа. Унан һуң емештәрҙең һәр береһенән ауыҙ ит, Аллаһ күрһәткән юлдар буйлап ос". Уларҙың эсенән кешеләр өсөн шифа булырлыҡ төрлө төҫтәге шәрбәт сыға. Был эштәрҙә уйлай белгәндәр өсөн бөйөк хикмәтдәлилдәр барҙыр". Әлеге һөйләшеүҙән дә, аяттарҙан да күреүебеҙсә, беҙ ҙә бал ҡорттары кеүек Аллаһ юлында йөрөһәк, уларҙың йәшәйеш фәлсәфәһенән фәһем алһаҡ, милли идеябыҙҙы тормошҡа ашырып, берҙәм һәм етеш йәшәй алаҫаҡбыҙ, иншаллаһ.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# КИЛЕР БЫУЫНДАРҒА ТОРАТАУҘЫ

## мираҫ, тиеп, васыят итәйек...

**12 июндә Ишембай районы Торатау буйында "Салауат йыйыны" үтәсәк. Унда республика райондарынан башҡа, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡунаҡтары ла ҡатнашасаҡ. Байрам программаһының иң иҫтәлекле мәле, әлбиттә, Торатауҙа "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексына нигеҙ ташы һалыу буласаҡ. Тарих ҡабатлана, йола яңы һулыш ала. Ысынлап та, борон-борондан башҡорт ырыуҙары Торатау янына йыйылып, кәңәш ҡорған, ил-йорт мәсьәләләрен хәл иткән, төрлө йолалар атҡарған, ир-егеттәрҙе яуға оҙатҡан, ырыу-ара туйҙар үткәргән. Был йоланы яңыртыу халҡыбыҙҙы был донъяла үҙен һаҡлап ҡалыу өсөн атҡарасаҡ уртаҡ бурыстар, уртаҡ маҡсаттар тирәләй тағы ла нығыраҡ берләштереүгә, рух ныҡлығына булышлыҡ итер, тип ышанайыҡ.**



*"Александр I тарафынан башҡорттарҙың яуға саҡырылыуы" И.И. Ғаянов, Ф.А. Исмәғилов.*

Әишембай менән Стәрлетамаҡ ҡалалары араһында урынлашҡан Торатау - уникаль тәбиғәт ҡомартҡыһы ул. Ул беҙҙең заман ғалимдары, белгестәре тарафынан күптән инде шулай тип ҡағыҙға теркәлеп ҡуйылған: "Торатау һәм Йөрәктау - бөтөн донъяға билдәле уникаль тәбиғәт объекттары. Улар бынан 250 миллион йылдар самаһы элек, Урал тауҙары формалашыуҙың иң башланғыс осоронда уҡ хасил булған һәм Ер йөҙөндәге иртә перм йәшендәге берҙән-бер тау массивтары иҫәпләнә. Улар фәнни, экологик, тарихи, мәҙәни һәм эстетик йәһәттән иң ҡиммәтле тәбиғәт ҡомартҡылары". Ошо хәҡиҡәт 1965 йылдың 17 авгусында БАССР Министрҙар Советының 465-се һанлы ҡарарында ла теркәлә һәм Торатау республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһы тип яҙып ҡуйыла.

Ата-бабаларыбыҙ күнеленә бынан меңәр йылдар элек үк яҙылып ҡуйылған Торатауҙың изге тау, изге урын икәнлеге. Халҡымда тау культы ныҡ һаҡланған, тигәндә, беҙ, юрматылар өсөн, ул культ, әлбиттә, Торатауыбыҙ һынында булған. Шуға ла олатайҙарыбыҙ ошо изге тау эргәһенә насар уйҙарынан таҙарынмайынса, бурысын үтәмәйенсә яҡынламаған. "Бурыс үтәмәйенсә, тауға яҡынлама" тигән был иң мөһим ҡағиҙә ҡанына һеңгән, бар йолаларында сағылған уларҙың. Башҡортостан буйлап бик күп сәйәхәт итеп, башҡорттарҙың ырым-ышаныуҙарын да өйрәнгән урыҫ ғалимы Иван Лепехин ошо хаҡта яҙып ҡалдырған. 1770 йылдың 14 майында Стәрле пристанына, буласаҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһына килә. Күпте белгән Исмаҡ ҡарттан ғалим пристандан 11 саҡрым алыҫлыҡта күренеп торған Торатау тураһында һораша. Ҡарт башҡорттарҙың был тауҙы изге тау тип иҫәпләүҙәре хаҡында әйтә. Шунан Лепехин, бик ҡыҙыҡһынып, тауға үҙе менеп ҡарамаҡсы була, әммә урындағы башҡорттар уның менән был изге тауға менеүҙән ҡырҡа баш тарта. Ғалим уларҙы нисек кенә өгөтләһә лә риза булмайҙар. "Тау алдында үтәргә тейешле бурыстарыбыҙ бар, әммә улар әле үтәлмәгән, ә шуларҙы үтәмәйенсә, тауға берәү ҙә менә алмай", - тиҙәр.

Үҙҙәренең хаҡлығын иҫбатлау өсөн ошондай миҫал да килтерәләр. Икенсе милләт кешеһе, башҡорттарға үс итеп, уларҙың изге урынын мыҫҡыл итер өсөн, тауға менеп, оло ярау иткән. Ләкин ошо гонаһы үҙенең һәм бөтә нәҫеленең башына етә. Икенсе берәү, үҙенең тау алдындағы бурысын онотоп, төлкө ҡыуалап барып, тауға менеп китә һәм шунда айыуҙан талана. Ошондай дәлилдәр килтерә башҡорттар. Ләкин Лепехин өгөтләүен дауам итә, тауға менгәндән уларға бер нәмә лә булмаясаҡ, тип ышандырырға тырыша. Аптырағас, урындағы халыҡтың сәйәхәтселәргә мотлаҡ ярҙам итергә тейешлеге хаҡында губерна түрәләренең фарманын иҫтәренә төшөрә. "Шунан башҡорттар беҙҙе тауға оҙатып барырға риза булды, - тип яҙа ғалим. - Текә булғанлыҡтан, тау башына менеп еткәнсе бер ун биш мәртәбә туҡтап, хәл йыйып алырға тура килде. Тау башы - ҙур ғына тигеҙлек, унда йөҙләгән өй ултыртып булыр ине. Бына бер саҡ бер башҡорт, ҡулын болғай-болғай, беҙгә табан йүгерә. Килеп еткәс:" Ни өсөн артышты һындыраһығыҙ, - тине асыуланып. - Тауға көсләп артылдырыу етмәгән, хәҙер икенсе гонаһ эшләйһегеҙ. Был һеҙгә бушҡа китмәйәсәк".

Боронғо яҙмаларҙа, легендаларҙа Торатауҙың Хоҙай үҙе һәм бәйғәмбәрҙәр ҡурсалаған изге урын булыуы әйтеп ҡалдырылған. Ислам ҡанундарынан бер тамсы ла ситләшмәй, изге китаптарынан, доғаларынан айырылмай йәшәгән аҡ күңелле әбейсәйем Мөкәрәмә Вәлидова аҡ һаҡаллы әүлиә рухының гел генә ошо Торатау буйҙарын ҡурсылап йөрөүенә ышандырғайны мине бала саҡта. "Иң ауыр саҡтарымда ике тапҡыр юлыма тап булды был әүлиә һины, һинма, түҙ, тип кәңәш бирҙе", - тигәйне өләсәйем. Әлбиттә, мин өләсәй һөйләгәндәрҙе әкиәт итеп ҡабул иткәнмендер. Уның барлыҡ һөйләгәндәре, доғалары, хатта күҙҙәргә йәш алдырырлыҡ итеп көйләгән мөнәжәт-бәйеттәре лә әкиәт итеп ҡабул ителгән. Хәҙер генә улар тарих булып хәтер төпкөлөндә ярала. Һәр яңырған хәтер киҫәге өләсәйемде аң менән тыңлай белмәгәнемә үкенес тыуҙыра. Күпме тарих, күпме мөһим мәғлүмәт уның менән бергә киткән. Был ғына түгел. Элегерәк өләсәй һөйләгән аҡ һаҡаллы ҡарт һынының әленән-әле күренеп ҡалыуын ишеткеләй торғайныҡ, хәҙер ишетмәйбеҙ. Уның менән тап килешер изгеләр ҡалманымы икән ерҙә? Бәлки, беҙҙең өләсәйҙәр һуңғыһы булғандыр, тип тә уйланыла...

Эйе, изгеләр эргәһендә генә тыуа мөғжизәләр, хикмәтле хәлдәр. Торатауыбыҙҙа ла булып торған, булып тора улар. Тау, Лепехин тураһындағы яҙмалар ҙа, өләсәйем һөйләгәндәр ҙә раҫлағанса, ысынлап та, халҡым өсөн изге урын. Уның ҡиммәтен тауыбыҙҙағы әүлиә ҡәберҙәре лә арттыра. Беҙ, ошо тирәләге ауылдарҙа йәшәгәндәр, был тауҙа әүлиә ҡәберҙәре барлығын һәр саҡ белдек. Өләсәйемдең ул хаҡта ҡабат-ҡабат һөйләгәне булды. Бәлки, өләсәйем ул ҡәберҙәрҙең ҡайҙа, кемдеке булыуын да әйткәндер. Әлеге лә баяғы... Хәйер, әкиәт күреп тыңланһа ла, тауҙың көнсығыш битләүендәге ҡәбер тураһында әйткәне хәтерҙә яңырҙы был бынан өс йыл элек. Был хәтерҙе яңыртыуға сәбәпсе булған хәлде яҙып сыҡҡайным инде. Нисек кенә булмаһын, ул ваҡиға беҙгә бурыс йөкмәтте һәм Өфөләге "Юрматы" ойошмаһы вәкилдәре - танылған эшҡыуар, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов, уның улдары Рөстәм, Рәфис, шулай уҡ танылған эшҡыуар, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиелары селтәре етәксеһе Рәйлә Фәсхетдинова, уның улы Эдуард ошо бурысты тормошҡа ашырып ҡуйғайныҡ: Имән әүлиә күмелгән урынға мәрмәр таҡташ ултыртҡайныҡ.

Тауҙың көнсығыш битләүендәге тағы бер ҡәбер менән бәйле ваҡиға бик ҡыҙыҡ. 60-сы йылдарҙа Торатауҙы сеймал өсөн вата башлағайнылар бит. Шунда шартлатыла был ҡәбер. Һөлдәләр тирә-яҡҡа һибелә. Шаһит ҡылыусылар баш һөйәген күреп, телһеҙ ҡала: маңлай һөйәгенә Хоҙай тамғаһы һуғылған була. Кемдер шунда был һөйәкте Өфөгә, ғалимдарға еборергә тәҡдим индерә. Кемелер ошо ниәт менән баш һөйәген үҙе менән ала. Шулай эҙһеҙ юғала ул. Ҡәберҙән сыҡҡан башҡа һөйәктәрҙе шул урынға яңынан күмеп ҡуялар. Мөһөрлө, тимәк, изге кеше - Әүлиә ерләнгән булған икәне бәхәсһеҙ.

Әүлиә ҡәберҙәренең күбеһенең яҙмышы ошолай шул беҙҙә: аяҡ аҫтында тапалып, ҡәҙерһеҙләнеп яталар. Сөнки ҡәберҙәре булһа ла, үҙҙәре изгеләр тип нарыҡланһа ла, әүлиәләр тураһында бик аҙ беләбеҙ. "Изге кеше" булыуҙан тыш, тылсымсы, күрәҙәсе, дауалаусы, мөғжизәләргә һәләтле, тип тә беләбеҙ уларҙы. Һәр хәлдә, Хоҙай Тәғәлә рәхмәтендәге кешеләр булған улар. Шулай булмаһа, үҙҙәре үлгәс тә улар рухы беҙҙе ҡурсалауҙы дауам итмәҫ ине. Беҙгә билдәле булған һәр әүлиә ҡәбере ошондайыраҡ ниндәйҙер тарих менән бәйле бит. Кешеләрҙе, ерһыуҙы ҡурсалау тарихы менән. Бында ла шул уҡ хәл: Стәрлетамаҡтың сәнәғәт ҡеүәттәре Торатауҙы ватырға һорай, тигән хәбәр менән әленән-әле ҡурҡытып торалар. Торатауҙың ҡурсыланып килеүенә ошонда күмелгән әүлиәләр (ә Торатауҙа барлығы 18 әүлиә күмелгән, тигән фараз бар) рухы ярҙам итеүе шик тыуҙырмай...

Әммә беҙ үҙебеҙ ҙә тау алдындағы бурысыбыҙҙы оноторға тейеш түгелбеҙ. Изге тау икән, тәбиғәт ҡомартҡыһы икән, Торатауыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға бурыслыбыҙ. Ләкин был бурыс үтәлмәй әлегә. Бәлки, 12 июндә буласаҡ оло саранан һуң ниҙер үҙгәрер? Өмөт итәйек. Булат ағай Рафиҡов та ошоға ишаралаған бит:

**Торатауҙың ап-аҡ таштарынан**
**Ейәндәрем, ана, ҡәлғә ҡора.**
**Ҡороп бөткәндәрен көтәһем бар,**
**Васыятымды әйтеп бөтәһем бар:**
**Олатайҙан һеҙгә - мираҫым, тип**
**Торатауҙы васыят итәһем бар.**
**Килеп тороғһоғоҙ бында гел, тим,**
**Ошо хозур донъя - һеҙҙең ил, тим...**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ҡаҙағстанда әүлиәләр менән бәйле урындар, уларҙың ҡәберҙәре президенттары Нурсолтан Назарбаев ҡабул иткән махсус программа менән һаҡлана. Был мәғлүмәтте Ҡаҙағстандағы әүлиәләр ҡәберенә зыярат ҡылған әбйәлилдәр алып ҡайтҡайны. Шундай бер сәфәр ваҡытында мәләттәштәргә бер ҡаҙаҡ муллаһы былай тигән: "Ниңә әүлиә рухын юллап, беҙгә, Ҡаҙағстанға йөрөйһөгөҙ? Башҡортостаныгыҙ әүлиәләр иле бит ул, үҙ әүлиәләрегеҙгә ҡәҙер күрһәтегеҙ, уларҙан сәләмәтлек һәм имenлек һорағыҙ. Телəгегеҙ беҙҙеке һымаҡ үк ҡабул буласаҡ", - тигән. Уйланырға урын бар. Уйланырға ғына түгел, эш башларға ваҡыт. Республика Президенты кимәлендә ниндәйҙер программалар ҡабул ителһә - бик яҡшы, әлбиттә. Ләкин ниңә беҙ ундай рәсми документтарҙы көтөргә тейеш һуң? Һәр төбәктә бар әүлиә тауҙары, әүлиә шишмәләре, улар барыһы ла шундағы әүлиә ҡәберҙәре менән бәйле. Табығыҙ, билдәләгеҙ, кәртәләп ҡуйығыҙ уларҙы. Әүлиәләр рухы иғтибар иткәнгә, илтифат иткәнгә үҙ хикмәтен күрһәтә тора. Еребеҙҙе, рухыбыҙҙы ла һаҡламаймы икән әле улар?**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ИҢ ҘУР АҠЫЛ - ИЛДЕ ҘУРЛАУ...

Риф МИФТАХОВ

## Салауат - ер күрке (ҡобайыр)

Ҡыш ҡылығы - далала,
Ҡош ҡылығы - һауала.
Аттар тауҙа дан ала,
Егет яуҙа һынала,
Егет яуҙа һынала.

Ҡылды ҡырҡҡа ярырлыҡ
Сәсән һүҙе - батырлыҡ.
Телде ҡылыс иттереп
Алда барыу - шағирлыҡ,
Алда барыу - шағирлыҡ.

Шоңҡар инең һауала,
Толпар инең далала.
Ыласындай егеттән
Һүнмәй торған дан ҡала,
Һүнмәй торған дан ҡала.

Бәйгелә лә, яуҙа ла -
Ил сәсәне ҡайҙа ла
Һин инең бит, Салауат!
Донъя үҙе таң ҡала,
Донъя үҙе таң ҡала.

Батыр егет - яу күрке,
Сәсән егет - дау күрке.
Икеһе лә һин инең,
Уралымдың бөркөтө:
Һай, Салауат - Ил күрке,
Һай, Салауат - Ер күрке!

## Халҡыма баш эйәм

Иң ғали аҡылға табынам: ул - халыҡ,
Ҡаһарман йөрәккә баш эйәм: ул - халыҡ.
Халыҡмы ҡаласаҡ тапалып, юғалып, -
Ул сыҡты, сығасаҡ дарьялай юл ярып.

Халыҡҡа ҡараһа күҙҙәрең - күрерҙәр,
Унынса һөйләнһә һүҙҙәрең - еңерҙәр.
Халыҡтың хәсрәтен-хәстәрен күтәргән
Ҙур йәндәр - яулаған мәңгелек ғүмерҙәр.

Эй, халҡым, мин дә бит һәр ваҡыт янында:
Көрәштә, хеҙмәттә, байрамда, табында.
Мең тапҡыр бурыслы башымды эйәмен
Тик һинең ҡаршыңда, тик һинең ҡаршыңда!

## Йондоҙло уҡ

Ваҡыттың сая елдәре
Сал тарихты ҡуҙғата,
Быуаттарҙың ҡуйынында
Тарих түгел, әйтерһең дә,
Баҙлап тере ҡуҙ ята.
Тере ҡуҙҙа - тере күҙҙә -
Сағыла хәтәр заман.
Ялҡыны - тарихтың тыны -
Биттәргә бәрә һаман.
Халҡым яҙмышы үҙе лә
Көйрәп яткан ҡуҙҙарҙай.
Утта янып, иҫән ҡалып,
Моңон өҙмәҫ ҡурайҙай.
Күпме янау, күпме талау
Өлөшөнә сыҡмаған,
Әммә хаҡын төшөрмәгән,
Рух алмаһы сынлаған.
Азатлығын йөрөткән ул
Шағир, яугир ҡанында:
Күпме азаматтар ҡалҡҡан
Батыршалар дауында,
Батшаны утҡа баҫтырған
Салауаттар яуында!
Ниндәй һәләт, ниндәй ғәйрәт
Булмаған һуң халҡымда!

Теле лә уның тере ҡуҙ, -
Баҙлай тарих битендә:
Йолҡҡандай бөтә булғанын,
Әммә һөйләр, көйләр телен
Йолҡалмаған бер кем дә!

Халҡым, яңы таң елдәре
Үҙгәртте ер - нигеҙҙе,
Яҙмышың усактарынан
Күпме ҡуҙҙар тергеҙҙе.
Тергеҙҙе өмөттәренде,
Мең йыллыҡ хыялыңды
Ҙурланы Уралҡайыңды,
Йәшәртте ҡурайыңды.
Баҙлап яна күҙҙәрендә
Йондоҙло рух уттары:
Ҡитғаларға ишетелә
Башҡортостаным шаны!
Һауаларҙы ашып оса
Башҡортостаным даны!

## Билал бабайҙың әйткәне
("Аҡйылға" поэмаһынан)

Ат ыҫҡынһа, тотоп була,
Һүҙ ыҫҡынһа, тотоп булмай.
Нинә шулай, үлсәп тормай,
Һис оялмай, һис хурланмай,
(Хәҡиҡәтме, йәрәхәтме),
Эй, балалар, һеҙгә хәҙер
Һүҙ әйтеүе бер ни тормай.
Ҡулдан - ҡул, телдән тел уҙа,
Аҡылһыҙ тел ара боҙа.
Яҡшыны ла, яманды ла
Башлап әйткән һүҙ тыуҙыра.
Ғүмер буйы ишетмәгән
Шундай яман һүҙ әйттегеҙ.
Һүҙ генәме? Боғаҙыма
Килеп, гүйә, йәбештегеҙ...
Ауылдарҙа тыуып үҫкән,
Ауылдарҙың һыуын эскән
Һеҙ түгелме ни?!
Һеҙҙә хәҙер атай-бабай
Илен-телен танымаҫлыҡ
Таштай ҡатҡан күнелме ни?!
Ундай күңел була икән,
Изгелек тә һеҙҙә бөткән.
Кешелеклек ҡорбан икән,
Тимәк, һеҙҙән иман киткән.
Иң ҙур аҡыл - илде ҙурлау,
Унан ҡасыу - илде хурлау.
Иманһыҙлыҡ - был донъяла
Әсәң телен һанға һуҡмау.
Туған телең - тыуған ерең,
Йәнең, ҡаның, күңел ҡылың.
Ошо телдән башлана бит
Бишек йырың, ғүмер юлың.
Әсә лә бит үҙ балаһын,
Юҡ, тапмай ул тик бер генә:
Тәнен бирел бер тыуҙырһа,
Телен бирә - икенсегә -
Нур, йыр итеп ғүмеренә.
Тел әсәнең теләге ул,
Иң ҡәҙерле бүләге ул.
Телең - ерҙә аҙаштырмаҫ
Халҡың һалған иң тура юл.
Тел быуындар салауаты,
Атайҙарҙың аманаты.
Телһеҙ - көнһеҙ тороп ҡалыр
Милләтеңдең аты, заты.
Ил һатыуға бәрәбәр ул
Тел юғалтыу хыянаты!

---

Ф. СП-1

АБОНЕМЕНТ на газету

(индекс издания) 50665

Киске Өфө

Количество комплектов

на 2010 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | ~~7~~ | ~~8~~ | ~~9~~ | ~~10~~ | ~~11~~ | ~~12~~ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | | | | | |

Куда

(почтовый индекс)

Кому

Ф. СП-1

ДОСТАВОЧНАЯ КАРТОЧКА

ПВ место Литер

на газету (индекс издания) 50665

Киске Өфө

| Каталожная цена | | Подписная цена | Количество комплектов |
|---|---|---|---|
| Местная цена | | 318.24 | |

на 2010 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | ~~7~~ | ~~8~~ | ~~9~~ | ~~10~~ | ~~11~~ | ~~12~~ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | | | | | |

Куда

(почтовый индекс)

Кому

***Хөрмәтле милләттәштәр! 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға саҡырабыҙ һеҙҙе. Хаҡтар: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 354 һум 24 тин.***

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТАҢДЫҢ ҒЫНА УЛЫ БУЛМА,

## халҡыңдың да улы бул!

Болот берекһә - күк күкрәр, халыҡ берекһә - ер тетрәр.

Халҡы ямандың ханы аҙыр, ҡатыны ямандың ире аҙыр.

Халыҡ аҡылы - ҡойон, ҡаршы тороуы ҡыйын.

Аҫыл кеше "алтын", тип үлмәҫ, "халҡым", тип үлер.

Халыҡ менән хаҡлыҡҡа ҡарышма.

Халыҡ теләһә, хан дөйәһен һуйҙырыр.

Халыҡ һүҙен ташлама, кеше хаҡын ашама.

Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ.

Ҡар башын ҡар ашар, хан башын хан ашар.

Яңғыҙ ҡайын дауылдан ҡурҡыр, яңғыҙ кеше халыҡтан ҡурҡыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кескәй генә сәскә тажында күҙгә күренмәгән бик кескәй генә халыҡ йәшәгән, ти. Шул сәскә үҫкән яланда бәләкәй генә күҙле, ҙур ҡолаҡлы Хартон исемле фил йөрөгән. Бер көндө уның ҡолағына ниндәйҙер тауыш ишетелгәндәй була. Хартон туҡталып, тыңлап тора. Әммә хәүефте белдергән аңлайышһыҙ өндәрҙең айышын төшөнә алмай ҙа ҡуя икән. Баҡһаң, теге сәскәгә һәм унда йәшәүсе теге халыҡҡа ҙур фажиғә янай икән. Ҡайҙандыр килгән ҡорттар ул сәскәнең тамырҙарын ҡороторға, һабаҡтарын кимерергә итә, имеш. Күҙгә күренмәгән халыҡ вәкилдәре ярҙам һорап, тағы ялбара башлай. Хартон ул сәскәне эҙләргә тотона, тик таба алмай. Шул саҡ ул күҙгә күренмәгән халыҡҡа: "Барығыҙ ҙа берҙәм йыйылып ҡысҡырһағыҙ, мин һеҙҙе ишетермен һәм табырмын", - тигән. Сәскә халҡы майҙанға йыйылып, бергәләшеп ҡысҡырған. Артабан Хартон тегеләргә: "Тағы ла кемегеҙҙер ситтә тороп ҡалдымы әллә? Һеҙҙе ишетәм, тик һүҙҙәрегеҙҙе аңлап еткермәйем", - тип өндәшкән. Сәскә халҡы йүгереп йөрөп ситтә тороп ҡалыусыны эҙләгән. Ҡараһалар, бер баҡсала ике бала ғәмһеҙ генә уйнап йөрөй икән. Уларын да алып килеп, тағы ла бергәләп ҡысҡырғандар. Тик шунан һуң ғына фил уларҙы табып, хәлдәрен күреп, аңлап, сәскәне һаҡ ҡына тамырынан һурып ала. Һурып ала ла, ҡорттар һәм башҡа ҡоротҡостар булмаған таҙа тупраҡлы яланға сығарып ултыртып ҡуя..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 8167
Заказ 2192